ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 март - апрель (буранай - алағарай)

2022

№ 12 (1002)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ғәҙәт барҙа әҙәп бар



2-3

Йылмайған - дауа тапҡан



8-9

Мин сәнғәт кешеһе,

рухи байлыкты өстөн ҡуйып йәшәйем...



11

Эшебеҙ ҙә, ашыбыҙ ҙа...

ожмахҡа тиң ошо ерҙә



12-13

ТВ-программа 14

*Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн апрелгә тиклем ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ИҒТИБАР!

## ҠУРАЙҒА ҺӘЙКӘЛ ҠУЯЙЫҠ!



**Өфө ҡала округы хакимиәте баш ҡаланың Үҙәк баҙар янындағы транспорт ҡулсаһын төҙөкләндерергә йыйына. Ошоға ярашлы бында ҡулса урынында "П" формаһындағы юл саты булдырылып, уртаһында сквер урынлашасаҡ. Әле скверға ҡуйыласаҡ арт-объектҡа конкурс иғлан ителде һәм еңеүсегә 300 мең күләмендәге приз билдәләнде.**

РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров бында халҡыбыҙҙың милли музыка ҡоралы ҡурайға һәйкәл урынлаштырырға тәҡдим итә. "Был урындар күңелемә бик яҡын. Цюрупа урамындағы 95-се йортто капиталь төҙөкләндергәндән һуң, ошо биләмәне төҙөкләндереүгә лә булышлыҡ иткәйнем. Ә әлеге сквер уртаһына Башҡортостан символы - ҡурайҙы һынландырырға тәҡдим итәм, уның ете тажы Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың дуҫлығын сағылдырасаҡ, - тип яҙа депутат үҙенең рәсми сәхифәһендә. - Баймаҡ ҡалаһында, ошо райондың Үрге Йайыҡбай, Төркмән ауылдарында ҡурайға һәйкәлдәр бар. Башҡортостандың баш ҡалаһында республика символы - ҡурайға лайыҡлы һәйкәл булырға тейеш".

Беҙҙең ҡарамаҡҡа ла был шәп фекер. Әйҙәгеҙ, тәҡдимде күтәрмәләп алып, конкурсҡа ҡурай һынландырылған төрлө проекттар тәҡдим итәйек, социаль селтәрҙәрҙә үҙ фекеребеҙҙе белдерәйек.

**"Киске Өфө"ләр.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

*Рәсәйгә ҡарата иҡтисади баҫым дауам итә. Ошоно күҙ уңында тотоп, ил Хөкүмәте кесе эшҡыуарлыҡҡа ла ярҙам программалары ҡабул итте. Республика эшҡыуарҙары был ярҙамдан нимә көтә?*

***Айтуған ФӘТТӘХОВ, фермер, Әбйәлил районы:*** Атай-әсәйем йылҡысылыҡ менән күптән шөғөлләнә. Бер нисә баш йылҡынан башланған эшмәкәрлегебеҙ бөгөнгө көндә уңышлы ғына нығынып китте. Шәхсән үҙем 2020 йылда крәҫтиән-фермер хужалығы булараҡ теркәлдем. Бөгөнгө көндә 800-ҙән ашыу башҡорт тоҡомло аттарым бар. Йәйге миҙгелдә ҡымыҙ бешеп, тирә-яҡ райондарға һәм шулай уҡ баш ҡалаға алып барып һатабыҙ. Быға ҡуш итеп агротуризм өлкәһен үҫтереү буйынса эшләйем, былтыр йылҡы итенән экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлек етештерә башланыҡ, шулай уҡ болонут йыйып, эшкәртеп, һатыуға сығарабыҙ. Баҫыуҙарҙа һоло, арпа, етен сәсәбеҙ.

Эшләһәң, эш ҡарышмай, яйлап ҡына алға барырға була. Шулай уҡ ил, республика етәкселеге тарафынан фермерҙарға иғтибар ҙур, төрлө программаларҙа ҡатнашып, субсидия һәм башҡа ярҙам алырға мөмкин ине. Хәҙер иһә, илдәге һуңғы ваҡиғалар шауҡымы аҫтында, был ярҙам тағы ла киңәйтелде. Мәҫәлән, сәсеү эштәрен ваҡытында һәм бер ҡаршылыҡһыҙ алып барып сығарыу маҡсатында аграрийҙарға ярҙам күрһәтеләсәк, тип белдерелде. Ә ашлыҡ ваҡытында сәселһә, һауа торошо яҡшы булып, уңыш түкмәй-сәсмәйенсә йыйып алынһа, уны эшкәртеү тармағындағы ойошмалар ҙа, тимәк, тотороҡло эшләйәсәк. Шулай уҡ һөтсөлөк һәм икмәк етештереү тармағы ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаясағы тураһында билдәле. Быларҙың барыһы ла хаҡтарҙың үҫеүенә юл ҡуймаҫҡа булышлыҡ итер, тип көтөлә. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығына иғтибар арта башланы. Башҡортостан - ауыл хужалығы, малсылыҡ менән йәшәүсе төбәк, беҙҙә егәрле, эшлекле фермерҙар бихисап. Уларҙы күтәрмәләп тороу урындағы халыҡ өсөн дә файҙалы, сөнки улар эш урындары булдыра, дәүләт ҡаҙнаһын тулыландыра. Шуға күрә, ташламалы кредит биреү, агролизинг ярҙамында кәрәкле техника алыуҙа ярҙам күрһәтеү фермер өсөн генә түгел, ә тотош дәүләт өсөн файҙалы. Бөтә был эштәр әлеге ауыр замандарҙы бергә, берҙәм, ҙур юғалтыуҙарһыҙ үткәреп ебәрергә булышлыҡ итер, тип өмөтләнәм.

АФАРИН!

## ИҢДӘРЕНӘ...

### илһөйәрҙәр тәрбиәләү бурысы һалынған

**Йыл да үткәрелгән, йолаға торошло саралар була. Шундайҙарҙың береһе - республика педагогтарының һөнәри ярыштары. Был конкурстарға тиҫтә йылдар дауамында гәҙәткә ингән күренештәр ҙә, шул уҡ ваҡытта яңы һулыш бөркөр үҙгәрештәр ҙә хас. Һүҙ утыҙ икенсе тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" һәм егерме етенсе йыл үткәрелгән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстары тураһында.**

(Дауамы 5-се биттә).




*"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүселәре.*

12+

✓ **"Донбасс халҡын яҡлап ойоштороласаҡ митинг-концерттың хедлайнеры Элвин Грей буласаҡ", - тинеләр ҙә һөйләнеләр был арала. "Митинг-концертҡа йән өрөүсе башҡорт йырсыһы Радик Юлъяҡшин буласаҡ", - тип әйтелһәсе һуң!**



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ТЕЛЕБЕҘҘЕ СҮПЛӘМӘЙЕК!




**Илебеҙҙә мәғлүмәти һуғыш бара. Туҡтағаны ла юҡ инде ул һуғыштың. Тимер шаршауҙарҙы ла йыртып инә алған Һүҙгә бөгөнгө цензураһыҙ мөхит нимә инде ул? Глобаль сәйәсәттең төбөнә төшөп байҡау яһарға һис кенә лә теләгем юҡ, ә бына үҙебеҙҙә, Башҡортостаныбыҙҙа нығынып килгән бер күренешкә туҡталғым килә.**

Урыҫ теленән үтеп ингән һүҙҙәр менән көрәшеү - буш ваҡыт уҙғарыу бөгөн. Рәсәй тигән бер Ватанда йәшәгәс, был, бәлки, әллә ни ҙур әһәмиәткә лә эйә түгелдер. Может, все, наверно, но һәм башҡа күп, бик күп һүҙҙәрҙе ябай халыҡ ҡына түгел, экрандарҙан һүҙ һөйләгән зыялыларыбыҙ ҙа һәүетемсә генә ҡулланып ултыра.

Һүҙем англицизм, германизм һәм башҡа сит телдәрҙең "-измы" тирәһендә булыр. Һуңғы йылдарҙа был күренеш күҙгә күренеп үҫеште. Бер ниндәй ҡаршылыҡ күрмәй сәскә ата лабаһа ул! Үҙебеҙҙең телевизион каналдарҙан шул һүҙҙәрҙе телдәрен вата-емерә әйтеп торған алып барыусыларҙы күрһәм, күңелем болғанып китә, йөрәгем урынынан ҡуҙғала. Хедлайнер, омбудсмен, фьючерс, консалтинг һәм әллә күпме шундай һүҙҙәргә үҙ телебеҙҙә алмаш таба алмайбыҙмы ни? Был нимә ул? Бер яҡҡа әйләнеп, телебеҙҙе сүпләмәйек, юғалған башҡорт һүҙҙәрен табып алып, тергеҙәйек, таратайыҡ, тип матур хәбәр һөйләйбеҙ ҙә, икенсе яҡҡа әйләнеп, сит-ят, ҡолаҡҡа ла ятмаған һүҙҙәрҙе өйәбеҙ түгелме һуң әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә? Уйлап-уйлап та аҡлау һүҙҙәре таба алмайым мин был мәғәнәһеҙлеккә. Халыҡ аңлар өсөн уңайлы бит, тиер инең, улай түгел. Йәш аудиторияға төбәлгән, тиер инең, үҙебеҙ үк быға ҡаршы бит. Ниңә кәрәк бындай ике йөҙлөлөк?

"Донбасс халҡын яҡлап ойоштороласаҡ митинг-концерттың хедлайнеры Элвин Грей буласаҡ", - тинеләр ҙә һөйләнеләр был арала. "Донбасс халҡын яҡлап ойоштороласаҡ митинг-концертҡа йән өрөүсе башҡорт йырсыһы Радик Юлъяҡшин буласаҡ", - тип әйтелһәсе һуң! Ҡолаҡҡа ла ятышлы, йәш быуынға ла бер ишара, дәрес булыр ине.

Телебеҙҙе яҡлау, һаҡлау урынына уны бысратабыҙ һәм ҡыйырһытабыҙ. Иң аяныслыһы, шул тел һағында торған "караптың" рулендә торғандар үҙ талаптарын үҙҙәре боҙа. Был маҡсатлы алып барылған "диверсия" тип әйтә алмайым. Вайымһыҙлыҡ, уйлап еткермәү, кимәл һайлығы арҡаһында тыуған ҡурҡыныс хәл был.

Илебеҙ бөгөн ҙур һынау алдында. АҠШ һәм уның ҡуштандары санкция артынан санкция яуҙыра. Был тәңгәлдә минең тәүге көндән үк аныҡ фекерем шундай булды: мин Илем менән. Һуғыш - яман. Ләкин сит илдәрҙең табаны аҫтында ҡалыу унан да яманыраҡ. Һәр төрлө үпкәләргә, үсәүҙәргә бөгөн урын юҡ.

Сит илдәр беҙҙең мәҙәниәтте, әҙәбиәтте ҡыҫырыҡлап сығарып торған көндәрҙә беҙ экрандарҙан, гәзит-журналдарҙан уларҙың телен үҫтереп, үрсетергә тейешбеҙме? Мин, бәлки, артыҡ талапсанлыҡ күрһәтәмдер. Тик һәр оло нәмә ваҡтан, бөртөктән башлана. Туған телебеҙ иҫ киткес матур, йомшаҡ, моңло. Сит телдәрҙең һәр береһенең һәр һүҙенә алмаш бар башҡорт telendә. Һаҡсыл һәм мәрхәмәтле булайыҡсы телебеҙгә.

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, шағирә.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ҒӘҘӘТ БАРҘА ӘҘӘП БАР



**Был аҡыл йәшәйеш тәғлимәте ине әүәлерәк. Ул һәр шәхесте иҫ белгәндән халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен белеп, әҙәпле, ипле булырға өйрәтте, хеҙмәткә күнектерҙе, фиҙаҡәрлеккә күндерҙе. Аяғында баҫып тора алған һәр кем ғаиләһе алдында үҙенең бурыстарын белеп, ҡылған, ҡыланғандарына яуаплылыҡ тойорға өйрәнде. Ғәме, сәме булғандар ихтирам, дан яулап, хеҙмәт емештәренән мәхрүм булманы. Тормошта әҙәпле, хеҙмәттә өлгөлө кеше маҡтау һүҙҙәре ишетеп йәшәне. "Ғәҙәт барҙа әҙәп бар, әҙәп барҙа оят бар" тигән халыҡ мәҡәле үҙен бөтә мәғәнәһендә аҡлай ине.**

Бөгөнгө тормошта, фәндә, ғилемдә, сәнәғәттә, сәнғәттә һәм башҡа күп өлкәләрҙәге алдынғы үҙгәрештәр, һис һүҙһеҙ, яҡшы күренеш. Ләкин глобализация, интеграция барышында кешеләр, халыҡтар бер-береһенән төрлө ғәҙәттәр, юғары технологиялар, алдынғы тәжрибә, яңы эш ысулдары үҙләштереү менән бер рәттән, үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәрен юғалта бара. Әлбиттә, йәшәү дәүерендә кеше аңы камиллаштырған йәшәү шарттарынан, фән, ғилем үҫеше һөҙөмтәләрен ҡулланыуҙан, яңы тормош тәжрибәләрен үҙләштереүҙән, бөтә донъя халыҡтары файҙаланған көнкүреш уңайлыҡтарынан баш тартыу ахмаҡлыҡ булыр ине. Шул уҡ ваҡытта рухиәттә, тәрбиәүи, әхлаҡи, милли традицияларҙа һәр милләттең үҙ асылына тоғро ҡалыуы киләсәк нәҫеле өсөн хәйерлерәк, сөнки, көн уңайлыҡтарына һылтанып, кешеләр үҙ халҡына хас ғөрөф-ғәҙәттәрен онотоп, хис-тойғоһоҙ йәшәүгә күсә бара. Замандан артта ҡалмаҫ өсөн фән яңылыҡтарын, тормош уңайлыҡтарының файҙалыларын үҙләштереп, донъяны үҙебеҙсә ҡороп, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлап йәшәһәк, бар йәһәттән дә уңышлыраҡ булыр инек, биллаһи. Һәр нәмәнең самаһы бар.

Милләттәштәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә һалҡыная бара. Мәҫәлән, әүәлерәк беҙҙең атай-олатайҙар, осрашҡанда, ике ҡул биреп күрешеп, яҡын күргән кешеләре менән тыйнаҡ ҡына ярым ҡосаҡлашып, хәл-әхүәлен белешер, осраған кешегә үҙенең ихтирамын күрһәтер ине, сөнки һәр кем үҙенә лә шундай яғымлы мөғәмәлә күрһәтеүҙе теләне. Осрашҡанда һаулыҡ һорашып, хәл белешмәй китеү тәрбиәһеҙлек, өлкәндәр менән иҫәнләшмәү әҙәпһеҙлек тип иҫәпләнде. Бергә йәшәгән өлкән улым иртәнсәк эргәмә килеп, "Һаумыһың, атай!" тип күрешә. Шул ваҡытта мин уның күҙҙәренә ҡарап, кәйефен беләм, ҡулдарын устарыма алып, тән йылыһын, ҡан берлеген тоям. Улымдың был яҡшы ғәҙәте күңелемә көс, дәрт биреп, ныҡ ҡыуандыра. Был минуттар минең өсөн бик ҡәҙерле. Шулай ҙа бер ваҡыт: "Улым, көн һайын миңә ваҡытыңды бүлмәһәң дә ризамын", - тигән һүҙҙәремә: "Атай, һин мине бәләкәй саҡтан, башҡорт кәбәнде урап сыҡҡан һайын һаулыҡ һораша, тип өйрәттең бит", - тине. Шунан һуң, "Өлкәнде өйрәткән - һыуға һыҙа, баланы өйрәткән - ташҡа яҙа", тигән халыҡ мәҡәленә (Эфиопия) нисек ышанмайһың?

"Һаумыһығыҙ!" - был яғымлы, мәрхәмәтле, игелекле сәләмләүгә башҡорт халҡына ғына хас йомшаҡлыҡ, татыулыҡ, туғанлыҡ тойғолары һалынған. Үкенескә күрә, улай яҡын күреп иҫәнләшеү "модана" сығып бара. Күптәр иғтибарһыҙ ғына "привет", "сәләм" ти-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

***Рәсәйгә карата иктисади баҫым дауам итә. Ошоно күҙ уңында тотоп, ил Хөкүмәте кесе эшкыуарлыкка ла ярҙам программалары кабул итте. Республика эшкыуарҙары был ярҙамдан нимә көтә?***

***Рәсүл ӘМИРХАНОВ, эшҡыуар, Ғафури районы:*** Мин төбәктә туризмды үҫтереү менән мәшғүл. Беҙҙең районды тәбиғәте иҫ киткес, барыһын да дөрөҫ ойошторғанда, туристик маршруттарҙың төрлөһөн әүҙем алып барырға мөмкин. Былай ҙа Ғафури районына туристар бик теләп йөрөй. Мин уларҙың һанын тағы ла арттырырға теләйем. Был урындағы халыҡҡа ла бер аҙ килем алырға булышлыҡ итә, сөнки туристар өсөн аҙыҡ-түлекте уларҙан һатып алам. Магазин химияһынан тамам арыған туристар бик теләп үҙҙәре лә саф, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлекте һатып алырға ғына тора.

Әлегә тиклем эшмәкәрлегемде тик йылы көндәрҙә генә алып барҙым. Был, үҙ сиратында, эште артабан киңерәк йәйелдереү өсөн килем килтермәй, шулай уҡ миҙгелле эштең башҡа күҙгә күренмәгән етешһеҙлектәре бар. Шуға күрә күптән инде ныҡлы бер нисә йорт төҙөп, йыл әйләнәһенә туристар менән эшләргә тигән уй менән янып йөрөй инем. Ләкин был да мәшәҡәтле һәм бик сығымлы эш. Ә бөгөнгө көндә дәүләт тарафынан иғлан ителгән ярҙам минең һымаҡ эшҡыуарҙарға бик ярап ҡаласаҡ. Етмәһә, йорт йәки ҡунаҡхана төҙөүҙән тыш, уны йылылыҡҡа, яҡтылыҡҡа тоташтырыуҙарҙың да күпмелер өлөшөн кире ҡайтарыуҙы булдырыуҙары уғата ҡыуанныслы. Шулай уҡ һалым түләү йәһәтенән дә ташламалар ҡаралған, тимәк, туристарҙан килгән килемде, һалымдан арттырып, эшмәкәрлекте артабан үҫтереү өсөн тотонорға мөмкин. Быйыл туристар ҙа күберәк булыр, тип уйлайым. Үҙебеҙҙең республикала һәр кешенең зауығына тура килерҙәй, уның күңеленә ятырҙай туристик программалар бик күп. Уларға тик һайлап алырға һәм рәхәтләнеп ял итергә генә ҡала.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 25 мартҡа мәғлүмәттәре буйынса, республикала бер тәүлектә яңы коронавирус йоҡтороуҙың 612 осрағы теркәлгән. Пандемия башланғандан алып сирлеләрҙең дөйөм һаны 272 827 кеше тәшкил иткән. Әлеге ваҡытта 14 640 кеше - амбулатор шарттарҙа, 152-һе стационарҙа дауалана. Бөтәһе 252 533 кеше коронавирустан һауыҡҡан, шул иҫәптән 1026-һы - уҙған тәүлектә. Тәүлек эсендә 7 пациент ковидтан вафат булған. Башҡортостанда йәмғеһе 5 502 кеше коронавирус ҡорбаны булған.

✓"Торатау" конгресс-холы алдында "Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ!" тигән митинг-концерт тотош республиканан, төрлө ҡалаларҙан һәм ауылдарҙан, предприятиеларҙан һәм йәмәғәт ойошмаларынан меңәрләгән халыҡты йыйҙы. Сара Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылыуына һигеҙ йыл тулыуға һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең башланғысы менән митинг-концерт Донецк һәм Луганск Халыҡ Республикалары халҡына (2022 йылдың 22 февралендә Рәсәй уларҙың бойондороҡһоҙлоғон таныны), Рәсәйҙең Украинала махсус операцияла ҡатнашҡан Ҡораллы көстәренә ярҙам итеүгә арналды.

✓20 мартта Донецкиҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Донецк Халыҡ Республикаһы Башлығы Денис Пушилин эшлекле осрашыу уҙғарҙы. Уның йомғаҡтары буйынса Рәсәй төбәге менән ДНР араһында хеҙмәттәшлекте киңәйтеү тураһында берлектәге коммюникеға ҡул ҡуйылды. Осрашыуҙа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров һәм Донецк Халыҡ Республикаһы Донецк хакимиәте башлығы Алексей Кулемзин Өфө менән Донецк араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Улар туғандаш ҡалаларға әүерелде.

✓Радий Хәбиров быйыл 11 октябрҙә - Республика көнөндә генерал Миңлеғәли Шайморатов һәйкәлен асыу бурысын ҡуйҙы. "22 мартта Совет майҙанында беҙҙең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байрағын тапшырыуға 80 йыл тулды. Хәҙер төҙөүселәргә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа һәм Өфө мэрияһына мөрәжәғәт итәм - 11 октябрҙә һәйкәл ҡуйылған майҙанды асырға тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓ *Тарихтан билдәле булыуынса, телен, йөҙөн юғалтып, ҡан берлеген онотоп, рухи берҙәмлегенән яҙған халыҡ башҡалар тарафынан йотолоуға дусар ителгән.*



гән ауаздар менән сикләнә. Ысынлап та, ауаздар ғына, сөнки ул хәл белешеү түгел бит, ә ябай, "мәжбүри" бер ҡағиҙәне үтәү. Ошо ябай ғына, ләкин тәрән мәғәнәле ғәҙәт миҫалында ситтән үҙләштерелгән ят ҡылыҡ, холоҡтар үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ниндәй кире тәьҫир яһауы күренә. Ул яйлап бер милләт кешеләрен генә түгел, бер тоҡом, нәҫел ағзаларын да тарҡатып, бер-береһенән алыҫлаштыра, туғанлыҡты һыуындыра. Аңлы рәүештәме, аңһыҙмы, насармы, яҡшымы икәнен уйлап тормай, башҡалар кеүек булаһыбыҙ килә. Тиҙҙән роботтар кеүек, "пип" тип кенә тәбрикләшербеҙ, сөнки телефон аша һөйләшеү, видео аша күрешеүгә күнеккәнбеҙ һәм ифрат ҡәнәғәтбеҙ. Уңай бит: "күҙгә күҙ ҡарап" һөйләшмәгәс, алдашырға ла, мутлашырға ла була. Ҡунаҡҡа ла "ситтән тороп" йөрөшә башларбыҙ, ситтән тороп яратышалар бит.

Сит-яттар өлгөһөндә уйламаһынса ғәмәлгә индерелгән белем биреү, медицина ярҙамы күрһәтеү, пенсия күләмен иҫәпләү, эш хаҡтары тәғәйенләүҙәге бөтмәҫ реформалар халыҡты тамам йонсотто. Советтар заманында яҡшы һөҙөмтә биргәндәрен танып, ҡулланыу дөрөҫ тә, файҙалы ла булыр ине. Ҡайһыларын тергеҙеп маташалар, ләкин аяҡ салыусылар тик ултырмай, күрәһең. Уларҙың хәҙер Европа илдәрендә барған баланы тәрбиәләүҙәге "алдынғы ҡарашлы" үҙгәрештәрҙән артта ҡалғыһы килмәй. Ул "алдынғылыҡтың" төп идеяһы - балаларҙы енесһеҙ итеп тәрбиәләү. Йәнәһе, ҡыҙ ҙа юҡ, малай ҙа юҡ, атай ҙа юҡ, әсәй ҙә юҡ. Бөтәһе лә йән эйәләре генә. Дөрөҫөн әйткәндә, был - шайтанды тергеҙеп маташыу. Сөнки шайтанды ғына Бөйөк Аң енесһеҙ итеп әүәләгән. Тимәк, ул юлдан киткәндәр тиҙҙән тулыһынса шайтанға оҡшар өсөн баштарына мөгөҙ үҫтереп, арттарына ҡойроҡ тағып йөрөй башлаясаҡ. Беҙ ҙә шуларға эйәрәйекме? Был көлкө өсөн генә яҙылған һүҙҙәр түгел. Ул "зараза"ны йоҡтороусылар тик ултырмай...

Тарихтан билдәле булыуынса, телен, йөҙөн юғалтып, ҡан берлеген онотоп, рухи берҙәмлегенән яҙған халыҡ башҡалар тарафынан йотолоуға дусар ителгән. "Теле көсһөҙләнгән халыҡтың рухиәте менән бер рәттән, йәшәү даирәһе лә ҡыҫырыҡлана", тигән заманында аҡыл эйәһе Ломоносов. Ниңәлер бөгөн яттарға ярап, яттарға оҡшап, бер-береһен танымаған "40 ата балаһы" булып йәшәгәндәргә эйәреү өҫтөнлөк ала бара. Был тамырҙарҙы ҡороҡос хәл тураһында донъя халыҡтарының бер нисә фәһемле мәҡәлен аңғартып китеү зыян итмәҫ. Мәҫәлән, "Өйөн һаҡламағандың түренә яттар үтә" (үзбәк), "Кеше ҡаҙанын болғаһаң, үҙеңдең бутҡаң көйөр", "Бөтәһенә түшәлгән телһеҙгә әйләнгән" (башҡорт), "Күндәм атҡа йүгән күп" (монгол), "Ҡойроҡтоң урыны гел артта" (латин).

Башҡорттар борондан донъянан ситләшеп йәшәмәгән, күршеләре - башҡа милләт халыҡтары менән һәр ваҡыт тығыҙ сауҙа-иҡтисади бәйләнештә торған, ләкин ятҡа ярайым тип, үҙ асылына хыянат итмәгән. Бөгөн дә халҡыбыҙ өсөн интеграция, глобализацияның ыңғай яҡтары бәхәсһеҙ, ләкин хәүефле һөҙөмтәләре лә байтаҡ. Улар телебеҙҙе боҙоп һөйләшеүҙә, боҙоҡ ғәҙәттәрҙә, тотанаҡһыҙ тәртиптә, әҙәпһеҙлектә, хәрәм менән хәләлде бутауҙа, мәғәнәһеҙ, маҡсатһыҙ йәшәүҙә асыҡ күренә.

Был осраҡта, япон халҡының милли традицияларына тоғролоғона һоҡланмау мөмкин түгел. Башҡа илдәр, ерҙәрҙә ниндәй генә үҙгәрештәр бармаһын, улар осрашҡанда һаман да үҙҙәренә генә хас тыйнаҡлыҡ менән баш эйеп тәбрикләшә, бер-береһенә иғтибарлы, ихтирамлы, ярҙамсылдар. Балаларына бигерәк тә һаҡсыл, йомшаҡ, ололарына иҫ киткес итәғәтле мөнәсәбәттәрен һаҡлайҙар. Шуға күрәлер ҙә, бер-береһенә ышаныслы таяныс булғандары өсөн япон халҡы хатта үлемесле ҡыйралыш, катастрофаларҙы берҙәм һәм лайыҡлы кисерә. Йәшәгән дәүерҙә йәш быуынын милли традицияларҙа тәрбиәләп үҫтергән халыҡтың тамырҙары ҡоромаҫ. Сөнки улар бер-береһен яҡын күреп танып, үҙ телендә һөйләшеп, аралашыуҙан йәндәренә көс-дәрт ала, ышаныслы таяныстары бар икәнен һиҙеп йәшәй. Милләттәштәр үҙ-ара мөнәсәбәттә мөләйем йөҙлө, ярҙамда ихлас, дуҫлыҡта ышаныслы булһа, тормоштарында тылсымлы мөғжизәләргә тура юлдар асылыр ҙа бойомға ашмаған теләк, хыялдарының үкенестәре ҡалған ғүмерен ағыуламаҫ ине...

**Урал МОСТАФИН.**
**Октябрьский ҡалаһы.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Рәсәйгә карата иктисади баҫым дауам итә. Ошоно күҙ уңында тотоп, ил Хөкүмәте кесе эшкыуарлыкка ла ярҙам программалары кабул итте. Республика эшкыуарҙары был ярҙамдан нимә көтә?***

***Динис ӘҺЛИУЛЛИН, IT-белгес, Мәскәү ҡалаһы:*** Мин баш ҡалалағы IT технологиялар өлкәһендә эш алып барған ҙур компанияла эшләйем. Февраль айында беҙҙең өлкәгә ҡағылышлы ташламалар тураһында иғлан ителеүе компания һәм уның эшселәре тарафынан оло хуплау тапты. Ниһайәт, беҙгә үҙебеҙ тураһында, эшмәкәрлегебеҙ хаҡында аныҡ белдереү һәм илгә файҙа килтерә алғаныбыҙҙы иҫбатлау мәле етте.

Ил Хөкүмәтенең эшҡыуарлыҡҡа, башлыса беҙҙең өлкәгә ҡағылышлы ҡарарҙарын бик урынлы һәм ваҡытлы тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, беҙҙең компанияның компьютер системалары буйынса эшмәкәрлеге ташламаға хоҡуҡ бирә. Тимәк, беҙҙең компания IT эҙләнеүҙәр өсөн грант алырға, ташламалы кредит юлларға, 2024 йылдың 31 декабренә тиклем килем өсөн билдәләнгән һалымдан, төрлө дәүләт һәм муниципаль тикшереүҙәрҙән, шул иҫәптән һалым һәм валюта тикшереүенән азат ителә. Был өлкәлә яҡшы белгес булған сит ил граждандарын эшкә алыу һәм улар өсөн Рәсәй гражданлығына эйә булыу процедуралары ла еңеләйтелде. Был ташламалар IT компанияларҙың эшмәкәрлеге алға китеүенә ҙур этәргес көс буласаҡ.

Компания менән бер рәттән, уның хеҙмәткәрҙәренә лә ташламалар эшләнеүе был өлкәнең етеҙ үҫешеренә ышаныс бирә. Мәҫәлән, миңә 25 йәш һәм мин хеҙмәт итергә бурыслымын. Яҙын-көҙөн армияға юллама көтөп хәл бөтә ине. Был көтөүҙәр, медицина тикшереүҙәре үтеү миңә ауырлыҡ тыуҙырҙы, сөнки тыныс ҡына, бөтә күңелде биреп эшкә егелеп булмай. Ә хәҙер мин тыныс күңел менән эшләй алам, сөнки минең һымаҡ белгестәрҙе 27 йәшкә тиклем әрме сафына алмаҫҡа тигән ҡарар ҡабул ителде. Шулай уҡ эш хаҡымдың артыуына, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға ла ҙур мөмкинлектәр асылып тора. Мин уларҙы тулы кимәлдә ҡулланасаҡмын.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әҙерләне.**

## ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# КЕМДЕҢ РИЗЫҒЫН АШАҺАҢ...



**Донъяла барған санкцияларға ярашлы илебеҙҙә һәр төрлө "...бургерҙар", башҡа төрлө "...герҙар" менән һатыу итеүсе кафеларҙың, ашханаларҙың, рестарандарҙың ябылыуы көтөлә. Күп кенәләре ябылды ла инде. Был хәлгә шаһит булып, ниһайәт, тип әйтергә генә ҡала беҙгә. Мәсьәләгә өс күҙлектән ҡарайыҡ:**

**А** Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап илебеҙҙе Европаның һәм Америка Ҡушма Штаттарының туҡланыуҙы ойоштороу компаниялары баҫып алып, былай ҙа саҡ-саҡ эшләгән ауыл хужалығыбыҙ тулыһынса емерелгәйне. Хәйер, был хәл бер аҙыҡ-түлеккә генә түгел, йәшәйешебеҙҙең һәр тармағына ла ҡағылмайынса үтмәне. Буш боттары, "Сникерс", "Баунти"лар менән һатыу итеүҙән башланған был хәрәкәт һуңынан тотош монополияны барлыҡҡа килтереп, үҙебеҙ етештергән аҙыҡ-түлекте, башҡа тормош кәрәк-ярағын үҙебеҙҙең баҙарҙан ҡыҫырыҡлап сығарҙы, иң көтөлмәгәне, был йүнәлештә тауар етештереүсе илебеҙ завод-фабрикаларын, предприятиеларҙы туҡтатты. Быға ҡаршы бер нәмә лә эшләй алманыҡ, йәғни баҙар үҙе үк барыһын да хәл итте. Аҙыҡ-түлектән тыш йөрөгән машиналарыбыҙ ҙа, кейгән кейемдәребеҙ ҙә, радио-телеаппаратура, көнкүреш ҡулланыу тауарҙары - барыһы-барыһы ла океан аръяғыныҡы булды. Хәҙер уларҙан ҡотолоу, үҙебеҙҙекен етештереү мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

**Б** Һиндостандың рухи юлбашсыһы Махатма Ганди (1869-1948) үҙ илен Англияның колонияһы булыуҙан ҡотҡара. Ул башлаған хәрәкәт сатьяграха (хәҡиҡәткә тоғролоҡ) тип атала. Махатма индустарҙы инглиздәрҙең магазиндарынан әйберҙәр, аҙыҡ-түлек һатып алмаҫҡа саҡыра. Үҙе үк башлап кейгән кейемдәрен утта яндыра, элек ата-олаталары нисек кейенһә, шуны кейеп, нимә менән туҡланһа, шуның менән туҡланып йәшәй башлай. Уның өлгөһөнә 360 миллион индус эйәрә. Етештергән тауарҙарын һата алмайынса кәмәләре ҡомға терәлгән инглиздәр Һиндостандан китергә мәжбүр була. Шулай итеп, бер тапҡыр ҙа мылтыҡтан атмайынса Һиндостан Англияның ҡоллоғонан ҡотола.

**В** Беҙ һуңғы 20-30 йылда ниндәй ризыҡтар менән туҡландыҡ һуң? Америкала, Европала тап ошондай ризыҡтар менән туҡланыу сәбәпле, һәр өсөнсө кешенең һимеҙлек менән яфаланыуы, һәр дүртенсе кешенең шул сәбәпле ваҡытынан алда вафат булыуын иҫәпкә алғанда - нимә генә эшләнмәһен - яҡшыға, тиергә ҡала. "Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың", ти халыҡ мәҡәле. Уны ошо хәлгә тап килтереп, "Кемдең ризығын ашаһаң, шуның йырын йырларһың" тиергә генә ҡала. Хәҙер үҙебеҙҙең ризыҡ менән туҡланып, үҙебеҙҙең йырҙарҙы үҙ телебеҙҙә йырлап йәшәйбеҙ инде. Нимә генә эшләнмәһен - яҡшыға...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Федераль Роспотребнадзор белгестәре белем биреү учреждениеларының санитар-эпидемиологик эш ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр проектын әҙерләгән. Ковидҡа ҡаршы ҡайһы бер сикләүҙәрҙе йомшартырға тәҡдим ителә. Аныҡыраҡ әйткәндә, һәр класты айырым кабинетҡа беркетеүҙе ғәмәлдән сығарырға. Шулай уҡ санитар табиптар аттестация ваҡытында уҡыусылар араһында социаль араусыҡты һаҡлауҙы бөтөрөргә тәҡдим итте.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр 2022 йылдың 1 апреленә тиклем милек һалымы буйынса льготаларға ғариза бирә ала, тип хәбәр итте Рәсәй Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идараһы. Льготаларҙы Федераль һалым хеҙмәте сайтындағы шәхси кабинетта, "Физик берәмектәрҙең һалымы" мобиль ҡушымтаһында йәки һалым органында, күп функциялы үҙәктә рәсмиләштерергә мөмкин.

✓Башҡортостанда ауыл старосталарына бер нисә вәкәләт бирелә. Улар ҡайһы бер йүнәлештәр буйынса муниципалитеттар эшмәкәрлегенә булышлыҡ итергә һәм урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса тәҡдимдәр индерергә мөмкин. Старосталар урындағы совет ултырыштарында кәңәш биреү тауышына эйә була. Был вәкәләттәр Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары тейешле закон проектын ҡабул иткәндән һуң көсөнә инә.

✓Гамалея исемендәге эпидемиология һәм микробиология фәнни-тикшеренеү үҙәге Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығына коронавирус инфекцияһынан яңы вакцинаны теркәү тураһында документтар ебәрҙе. Ул танауға тамыҙыу (назаль) рәүешендә тәҡдим ителә. "Теркәү көнө: 18.03.2022. Сауҙа атамаһы: Гам-КОВИД-Вак коронавирус инфекцияһын иҫкәртеү өсөн ҡатнаш вектор вакцина", - тип хәбәр ителә реестрҙа.

✓Төньяҡ баш ҡалала иң шәп спортсылар исеменә 23 команданан 120 спортсы шахбокс буйынса көс һынашты. 64 килограмлыҡ ауырлыҡ категорияһында Ғафури районынан 23 йәшлек Илсур Исхаҡов өлкәндәр кимәлендә беренсе тапҡыр Рәсәйҙең Шахбокс федерацияһы беренселегеһәм чемпионаты еңеүсеһе исемен яуланы. Исхаҡовтың шахмат буйынса тәүге тренеры - атаһы Сабир Исхаҡов. Ул һаман да Ҡауарҙы ауылында тренерлыҡ эше менән шөғөлләнә. Бокс менән Илсур 2015 йылда Башҡорт дәүләт университетының беренсе курсында уҡығанда шөғөлләнә башлаған.

✓ *Складтарҙа етерлек күләмдә шәкәр ҡомо бар, халыҡҡа уны күпләп һатып алырға, шул рәүешле яһалма ҡытлыҡ тыуҙырырға кәрәкмәй. Ҡулланғанға ҡарағанда күберәк етештереү дауам ителәсәк.*



ҠЫҪҠАСА

# ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРӘБЕҘ!

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә уҙғарылған "АгроКомплекс" күргәҙмәһендә алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты.** "Беҙ "Агрокомплекс" күргәҙмәһендә булдыҡ һәм эшлекле кәйеф мөхитенә сумдыҡ. Ауыл эшсәндәре, ауыл хужалығы етештереүселәре, машина эшләүселәр, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, күптән импортты алмаштырыу менән шөғөлләнә. Улар техниканы хеҙмәтләндерергә әҙер", - тине республика етәксеһе. Бөгөнгө көндә тукланыу ризыктарын эшкәртеү - республика өсөн төп бурыстарҙың береһе, тип тә билдәләне ул. Башҡортостан ошо күрһәткес буйынса Волга буйы федераль округында бишенсе урынды биләй. Республика Башлығы был юҫыҡта эште дауам итеү һәм кәм тигәндә өсөнсө урынға күтәрелеү бурысын ҡуйҙы. Шулай уҡ ул Беларусь предприятиелары республика иҡтисадына индереүҙең мөһимлегенә иғтибар итте. "Беларусь Сауҙа-сәнәғәт палатаһының Гомель бүлексәһе" предприятиеһы генераль директоры Марина Филонова етәкселегендәге Беларусь Республикаһының эшлекле делегацияһы сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү буйынса саралар, "АгроКомплекс" халыҡ-ара күргәҙмәһендә ҡатнашты.

✓ **Башҡортостанда Донецк Халыҡ Республикаһында (ДНР) йәшәүселәр өсөн реабилитация программалары булдырыла һәм Шайморатов кластары асыла.** Башҡортостан Донецк һәм Луганск Халыҡ Республикалары менән туристик хеҙмәттәшлекте әүҙем үҫтерергә ниәтләй. Әйтәйек, республикала ДНР халҡы өсөн махсус экскурсия, һауыҡтырыу һәм реабилитация программалары булдырыла. "Әле үк Башҡортостан табиптары Донецк һәм Луганск Халыҡ Республикаларында коллегалары менән эшләй. Бында беҙ дауалау-профилактика учреждениелары араһында бәйләнештәрҙе үҫтереүҙе лә күҙ уңында тотабыҙ", - тине Хөкүмәт премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов. Фәнни-техник хеҙмәттәшлеккә һәм мәғарифҡа ҙур әһәмиәт бүлендә, тип билдәләне ул. Мәҫәлән, ДНР мәктәптәрендә Шайморатов кластарын асыу күҙаллана. Башҡортостан һәм халыҡ республикалары музей фонды йүнәлеше буйынса үҙ-ара эш итергә йыйына.

✓ **"Өфө" индустриаль паркы биләмәһендә юғары технологиялы мебель етештереүҙе яйға һалыу күҙаллана, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.** "Заманса мебель технологиялары" компанияһы проектҡа 100 миллион һум сумаһы аҡса һалырға йыйына. Предприятиела 40-ҡа яҡын яңы эш урыны булдырыла. Башҡортостан Республикаһының Үҫеш корпорацияһы башлығы Наил Ғәббәсов билдәләүенсә, продукция етештереү һәм һатыу өсөн уңайлы шарттар булдырыу мөһим. "Хәҙер Үҫеш корпорацияһы белгестәре инвестор менән берлектә проектты ғәмәлгә ашырыу нескәлектәрен тикшерә, индустриаль парк биләмәһендә махсус майҙансыҡ һайлай. Шул рәүешле тиҙҙән "Өфө"лә яңы етештереү үҙәге барлыҡҡа килеүе ихтимал", - тип билдәләне Наил Ғәббәсов. "Өфө" индустриаль паркында ҡатнашыусы (резидент) булып тороу төрлө һалым льготалары һәм уңайлы ҡуртым шарттары алыу мөмкинлеген бирә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШЛАНЫҠ - ТАМАМЛАЙБЫҘ!



**Төҙөлөш материалдарына хаҡтарҙың артыуына һәм Көнбайыштың санкция сәйәсәтенә ҡарамаҫтан, Өфөнән Көнсығыш сығыу юлын төҙөү графикка ярашлы бара, ул 2023 йылдың аҙағында сафҡа индерелә, тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, ҙур инфраструктура проектының автомобиль юлы тоннеле төҙөлөшө барышын ҡарағандан һуң.**

"2020 йылдың февралендә башланған төҙөлөш темптарын туҡтатырға ярамай. Көнсығыш сығыу юлын 2023 йылдың аҙағына, бик булмаһа, 2024 йылдың беренсе кварталында файҙаланыуға тапшырырбыҙ. Яҡын арала ниндәй бурыстарҙы башҡарып сығырға кәрәк? Беренсенән, проекттың хаҡын ҡайтанан тикшерергә, сөнки төҙөлөш материалдарына хаҡтар арткас, ул да ҡиммәтләнә. Икенсенән, кәрәкле материалдарҙы әҙләкһеҙ килтереүгә өлгәшергә. Республика Рәсәй Хөкүмәтенә мөрәжәғәт әҙерләй - илдең ҙур инфраструктура проекттары өсөн Рәсәй етештереүселәренең төҙөлөш материалдарын билдәләнгән хаҡтар буйынса ебәреү мөмкинлеген ҡарауҙы һорайбыҙ", - тине Радий Хәбиров. Көнсығыш сығыу юлы - Волга буйы федераль округында иң ҙур инфраструктура проекты. Үҙенсәлекле проект 1,2 саҡрым оҙонлоҡтағы автомобиль юлы тоннеленән; 2,7 саҡрымлыҡ эстакада менән Өфө йылғаһы аша күперҙән һәм 10 саҡрым оҙонлоҡтағы М-5 "Урал" федераль трассаһына йәнәш автомобиль юлынан тора. Объект төҙөлөшөнөң дөйөм хаҡы 33,5 миллиард һумға баһалана. Әлеге ваҡытта объектҡа 2 489 кеше, 357 берәмек төҙөлөш техникаһы һәм ҡорамалы йәлеп ителгән.

# КӨРСӨККӘ ҠАРШЫ...

**Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров көрсөккә ҡаршы штабтың икенсе ултырышын үткәрҙе. Ошо ултырыш тураһында ул шулай тине:**

"Бизнес менән Рәсәйгә ҡаршы иғлан ителгән санкциялар шарттарында тауарҙарҙы ситкә сығарыу һәм илебеҙгә индереү барышында тыуған проблемалар тураһында фекер алыштыҡ. Шуларҙың береһе - логистикаға бәйле ҡыйынлыҡтар. Ил ситтәренең ябылыуы, ташыуға тарифтарҙың артыуы, доллар курсының үҫеүе, ташыу ваҡытының оҙайыуы, транспорт эҙләүҙәге ҡатмарлыҡтар арҡаһында йөк ташыуҙың хаҡы 50 процентҡа артты. Предприятиеларыбыҙ бөлгөнлөккә төшмәһен, уларҙың продукцияһы конкурентлыҡ кеүәһен юғалтмаһын өсөн компанияларҙың йөк ташыуға сығымын субсидияларға ҡарар иттек. Сығымдың 90 процентына тиклемен ҡаплайбыҙ. Бындай ярҙам сараһын бәләкәй һәм урта бизнесҡа күрһәтәбеҙ. Ҙур бизнес өсөн бындай компенсация федераль кимәлдә ҡаралған. Продукция индереүгә һәм сығарыуға санкция сикләүҙәре арҡаһында күп кенә сит ил компаниялары беҙҙең менән туранан-тура эш итергә хәүефләнә. Шуға күрә, Ҡаҙағстанда һәм Төркиәләге вәкиллектәр аша Башҡортостан предприятиеларына ошо илдәрҙә юридик берәмектәр теркәргә ярҙам итә башланыҡ. Бер нисә компания был мөмкинлектән файҙаланды ла инде. Яҡын арала улар сит илдә үҙ продукцияһын маркировкалай башлай, был иһә санкциялар баҫымына эләкмәү мөмкинлеген бирәсәк. Йәнә импортҡа алмаш һәм импортты тәьмин итеү йәһәтенән ике яңы үҙәк асабыҙ. Уларҙың төүгеһе республика предприятиеларына Рәсәйҙә, шулай уҡ беҙҙең менән дуҫ илдәрҙә яңы ҡоралдар, комплектлау өлөштәре, сеймал тәьминәтселәре һайлауҙа ярҙам итәсәк, икенсеһе иһә хаҡтың нигеҙһеҙ артыуын күҙәтәсәк..."

# ЯҠЛАУ БУЛАСАҠ!

**Яҡын арала хеҙмәткә түләүҙең минималь кимәлен, йәшәү минимумы дәүмәлен, бюджет өлкәһендә эшләгәндәрҙең хеҙмәт хаҡын, бөтә социаль түләүҙәрҙе, шул иҫәптән пенсияларҙы арттырыу ҡараласаҡ. Рәсәй Президенты Владимир Путин ил төбәктәрен социаль-иҡтисади ярҙам итеү буйынса кәңәшмәне асҡанда ошо хаҡта белдерҙе.**

"Хаҡтар артыуы кешеләрҙең килеменә нисек тәьҫир итеүен аңлайым. Шуға күрә, пособие һәм пенсияларҙы ла индереп, яҡын арала бөтә социаль түләүҙәрҙе арттырыу буйынса ҡарар ҡабул итәсәкбеҙ. Хеҙмәткә түләүҙең минималь кимәлен (МРОТ), шулай уҡ бюджет өлкәһендә эш хаҡын арттырасаҡбыҙ," - тине дәүләт етәксеһе. Ул Хөкүмәткә был эштәрҙең теүәл күләмдәрен иҫәпләргә ҡушты. "Шуны ла билдәләйем: әлеге ябай булмаған хәлдә лә йыл һөҙөмтәләре буйынса беҙгә ярлылыҡ кимәлен һәм социаль тигеҙһеҙлек кимәлен кәметеүгә өлгәшергә кәрәк. Был - хатта бөгөн дә тормошҡа ашыра алырлыҡ бурыс", - тип өҫтәне Президент. Ул Министрҙар Кабинетын һәм төбәктәрҙе ошо бурысты үтәүҙә тупланырға саҡырҙы һәм уның "иҡтисади йөкмәткегә эйә булыуынан тыш, социаль ғәҙеллек мәсьәләһе" булыуын да өҫтәне. Дәүләт етәксеһе Хөкүмәткә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә эштәрен юғалтҡан кешеләргә ярҙам саралары тәьҫирлеген анализларға ҡушты. Президент билдәләүенсә, бындай сараларҙы киңәйтергә тура киләсәк, шул иҫәптән, социаль контракт механизмы иҫәбенә.

# КҮПЛӘП АЛҒАС, ХАҠ АРТА...

**"Башҡортостан үҙебеҙҙә етештерелгән продукцияның төп төрҙәре менән тәьмин ителгән. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, продукцияның ҡайһы бер төрҙәренә - шәкәргә, ярмаларға хаҡтар ҡапыл артты. Ләкин был ғәҙәттән тыш һорау менән бәйле, һорау кәмеһә - хаҡ та төшә", - тине республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

Уның билдәләүенсә, складтарҙа етерлек күләмдә шәкәр ҡомо бар, халыҡҡа уны күпләп һатып алырға, шул рәүешле яһалма ҡытлыҡ тыуҙырырға кәрәкмәй. Ҡулланғанға ҡарағанда күберәк етештереү дауам ителәсәк. Һөт ризыҡтары менән 130 процентҡа тәьмин ителгәнбеҙ, ит буйынса илдә алдынғы урынды биләйбеҙ, көнбағыш майын республика ҡулланғанға ҡарағанда 7 тапҡырға күберәк етештерә, ҡарабойҙай майҙаны арттырыласаҡ. Хөкүмәт вице-премьеры ҡала халҡын ял көндәрендә ойошторолған ауыл хужалығы йәрминкәләренә саҡырҙы. Башҡортостанда малдарҙы, төү сиратта, һыйыр малын, йылҡыны, һарыҡтарҙы республика биләмәһенән сығарыуҙы ваҡытлыса тыйыу тураһында ҡарар ҡабул ителеүе тураһында ла белдерелде. "Ҡарар эске баҙарҙы яҡлау менән бәйле, халыҡҡа ла йәш мал кәрәк. Европала һатып алынған тоҡом малы менән проблемалар буласағын аңлайбыҙ. Был мәсьәләне лә хәл итербеҙ. Хәҙер төп маҡсат - эске баҙарҙы яҡлау, шуға күрә "донъя баҙарында хаҡтар юғары булһа ла, продукцияны экспортҡа оҙатыу тураһында уйламайбыҙ", - тип билдәләне вице-премьер.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөгә Луганск Халыҡ Республикаһының Петровское ҡалаһынан 30 уҡыусы килде. Килеп төшкәс тә балаларҙы табиптар тикшерҙе, шунан улар "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханыһына урынлаштырылды. Балалар бында ике аҙна һауыҡтарын ныҡытырға тейеш. Луганск уҡыусылары өсөн бай мәҙәни программа: театрға, музейға, аквапаркка, шулай уҡ Торатауға һәм Ҡыҙыл шишмә ҡасабаһына алып барыу ҡаралған.

✓Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты ҡалала, ҡала янында, районда һәм муниципаль-ара бәйләнештә йәмәғәт транспортында максималь юл хаҡын билдәләү тураһында документ проектын әҙерләгән. "Алға" картаһы буйынса ул 28 һум була. Ҡулаҡса йәки банк картаһы менән түләгән осраҡта иһә 33 һумға етеүе ихтимал. Экспресс режимында эшләгән маршруттарҙа - 40 һум. Яңы хаҡтарҙың апрель айында ғәмәлгә инеүе мөмкин. Әле "Алға" картаһы менән юл хаҡы - 24 һум, ҡулаҡса һәм банк картаһы менән 29 һум тора.

✓Франция бизнесмендары, шул иҫәптән Башҡортостанда эшләгән "Ашан", "Декатлон" һәм "Леруа Мерлен" халыҡ-ара ваҡлап һатыусылар Рәсәйҙә ҡалырға тейеш, тип белдерҙе Француз эшҡыуарҙары союзы башлығы Жоффруа Ру де Безье. Уның һүҙҙәренсә, Францияның Рәсәйҙәге компанияларында 160 меңгә яҡын кеше эшләй. Бизнес Франция хөкүмәте тәҡдимдәренә ярашлы эш итә, ул компанияларҙы япмауҙы һорай, тине ул. "Ашан" Рәсәйҙә лә, Украинала ла асыҡ, тип билдәләне Ру де Безье.

✓Башҡортостанда Өфө биләмәһендә урынлашҡан биш мәҙәни мираҫ объектының сиктәре һәм файҙаланыу тәртибе билдәләнде. Улар - Башпотребсоюз бинаһы, Бернштейндың сауҙа йорто, Ленин скверындағы һәйкәл, Ленин урамындағы Килем йорто, шулай уҡ Ҡунаҡһарай һәм Ленин урамындағы сауҙа ихаталары. Бойороҡтарҙа билдәләнеүенсә, объекттарҙың сигендә киоскылар һәм сауҙа павильондары асыу, төҙөлөш һәм ер эштәрен башҡарыу, һыу, йылылыҡ, электр һәм газ менән тәьмин итеү селтәрҙәрен һүҙыу тыйыла.

✓"Аэрофлот" авиакомпанияһы 2 апрелдән Ирандың Тегеран ҡалаһына даими осоштарҙы тергеҙә. Компанияның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, рейстар аҙнаһына ике тапҡыр башҡарыла. Бынан алда "Аэрофлот" Бишкәккә һәм Ошҡа (Ҡырғыҙстан), Баҡыға (Әзербайжан) осоштарҙы тергеҙҙе. 22 марттан Ереванға (Әрмәнстан) рейстар башлана.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*АФАРИН!*

# ИНДӘРЕНӘ...

## илһөйәрҙәр тәрбиәләү бурысы һалынған



**(Башы 1-се биттә).**

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2022" төбәк-ара конкурсында быйыл республиканан, Силәбе, Ырымбур өлкәләре, Татарстандан һәм Ханты-Манси автономиялы округынан барлығы 75 педагог ҡатнашҡан. Ярыштың күпселек этаптары дистанцион форматта уҙғарылып, жюри ағзалары уҡытыусыларҙың компетентлығын ситтән тороп баһалаған. Гәҙәти һәм төп һынауҙар - таныш булмаған синыфта дәрес биреү, оҫталыҡ дәресендә тәжрибә уртаҡлашыуҙан тыш, милли кейемдә презентациялау һәм ата-әсәләр менән әңгәмә ойошторолған. Шулай уҡ быйыл беренсе тапҡыр һынауҙың өсөнсө туры матбуғат конференцияһы форматында уҙған һәм унда ҡатнашҡан уҡытыусыларға һорауҙы теләгән һәр кем видеояҙма рәүешендә алдан ебәрә алған. Был турала баһалама ағзаһы, Башҡорт дәүләт университеты доценты Рәмилә Хөснөтдинова былай ти: "Баһалама комиссияһында йыл да эшләмәйем, шуға ла ҡайһы бер һынау төрҙәре минең өсөн дә яңылыҡ булды. Шул тиклем сағыу, күңелгә ята торған ярыш төрө - милли кейемде күрһәтеүҙе айырым телгә алып китмәй булмай. Һәр конкурсанттың видеояҙмаһы үҙенсәлекле сюжетҡа ҡоролған, һәр кем үҙенең тыуған төбәгенә хас башҡорт милли кейемен бөтә күркәмлегендә сағылдырырға тырышҡан. Ә инде асыҡ дәрестәрҙе тура эфирҙар аша баһалау бер аҙ ҡатмарлыраҡ булды, ни тиһәң дә, синыфҡа инеп ултырып, уҡыусыһы ла, уҡыусылары ла күҙҙән үткәреп ҡарауға етмәне. Шулай уҡ быйыл башланғыс синыфтарҙа һәм колледж студенттарына башҡорт телен уҡытҡан педагогтарҙың да конкурста ҡатнашыуы уларҙың да хеҙмәтен дөрөҫ баһаларға, тәжрибә бүлешергә булышлыҡ итте".

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2022" төбәк-ара конкурсы финалына сыҡҡан биш уҡытыусы араһынан Сибай ҡалаһы Р. Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейынан Айһылыу Моталлапова, Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылындағы башҡорт гимназияһынан Зилә Миңлебаева, Өфө ҡалаһы 2-се СМАРТ Республика полилингваль күп профилле гимназияһынан Ләйсән Сафиуллина, Ҡырмыҫҡалы районы Ефремкино урта мәктәбенән Лилиә Юлдашбаева лауреаттар булып танылды. Ә төп награда Өфө ҡалаһы 107-се лицей уҡытыусыһы Мирас Ишдәүләтовҡа бирелде. Әйткәндәй, Мирас Рәшит улы быйыл Өфө ҡалаһы кимәлендә үткәрелгән һөнәри ярышта ла абсолют еңеүсе тип танылғайны. Һөнәре буйынса әлегә ни бары ете йыл эшләгән йәш педагог үҙенән тәжрибәлерәк һәм абруйлыраҡ коллегалары менән ярышыуы еңелдән булмауын, әммә бөтә көсөн, күңелен һалып еңеүгә ынтылыуын билдәләне. "Төбәк-ара конкурсының ин иҫтәлекле мәле, һис шикһеҙ, милли кейемдә презентациялау булды. Ҡыҫҡа ғына видеояҙма төшөрөү өсөн тыуған яғыма - Көйөргәҙе районы Яҡут ауылына ҡайтып килергә тура килде. Ә инде конкурстың эш алымдары, тәжрибә уртаҡлашыу, һөнәри оҫталыҡты баһалауға ҡоролған һынауҙарына килгәндә, мин уҡыусыларҙың телефондарын үҙ мәнфәғәтебеҙҙә ҡулланыуҙың бер юлын - QR-код артына йәшерелгән йомаҡтарҙы сисеү ысулын күрһәттем. Әлбиттә, балаларҙы шулай ҡыҙыҡтыра алыу өсөн уҡытыусыға заман менән бергә атларға, һәр ваҡыт эҙләнергә, креатив булырға кәрәк", - ти Мирас Ишдәүләтов.

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2022" республика конкурсында йөмғеһе 155 кеше ҡатнашҡан һәм улар бер нисә йүнәлеш буйынса ярышты. Быйыл республиканың иң яҡшы рус теле уҡытыусыһы тип Стәрлетамаҡ ҡалаһы 1-се гимназияһынан Юлия Смехова, иң яҡшы татар теле уҡытыусыһы тип Дүртөйлө районы Исмаил мәктәбенән Ләйсән Мырҙаева танылды. Беренсе тапҡыр үткәрелгән "Дистанцияла белем биреү уҡытыусыһы" конкурсында Туймазы ҡалаһының Республика дистанцияла белем биреү үҙәгенең информатика уҡытыусыһы Ольга Густова еңде, ә Өфөнөң 112-се мәктәбе башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Анастасия Ногина "Йылдың йәш уҡытыусыһы", Ҡариҙел ауылының 1-се урта мәктәбе сит телдәр уҡытыусыһы Зарина Ғәлләмова "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" булды. "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2022" республика конкурсының абсолют еңеүсеһе исеме Стәрлетамаҡ ҡалаһының 1-се гимназияһы уҡытыусыһы Юлия Смеховаға бирелде.

Ойоштороусылар тағы бер бик үҙенсәлекле конурсҡа башланғыс биргән. BRAIN-PUZZLE Соты тип атала ул. Был беренсе республика марафонында 5 мәктәп командаһы ярышҡан һәм Нефтекама ҡалаһы уҡытыусылары еңеүсе булды. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Сухомлинский мизалы Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Динара Латиповаға тапшырылды. Уҡытыусыларҙы һөнәри оҫталыҡ конкурстарындағы еңеүҙәре менән БР мәғариф министры Айбулат Хажин тәбрикләне һәм бөгөн улар алдында заман яңы һынауҙар ҡуйыуын, индәренә киләсәк быуынды илһөйәр итеп тәрбиәләү бурысы һалыныуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан уҡытыусылары тантана барышында тағы әллә күпме номинациялар һәм махсус призлар артынан сәхнәгә күтәрелде. Был көн уларҙың һөнәри һәм ижади уңыштарын гәҙел баһалау ғына түгел, ә уҡытыусыларҙың кешелеклеген, изгелеклеген һәм йәш быуында илһөйәрлек, мәрхәмәтлек тойғоларын тәрбиәләү йәһәтенән дә көс еткеһеҙ эш алып барыуҙарын таныу көнө булды. Быға конкурс еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы алдынан Өфө, Бәләбәй, Борай, Дүртөйлө, Ғафури, Нуриман, Тәтешле районлары мәктәптәре һәм балалар баҡсалары Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһы хакимиәте башлығынан гуманитар ярҙам өсөн рәхмәт хаттары тапшырылыуы ныҡлы дәлил.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҺЫУ ТАША...



**Был аҙнала ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә төп темаларҙың береһе ташҡын тураһында булды. Быйыл ҡар күп яуҙы һәм әлегәсә һаҡланған һыуыҡтар арҡаһында ер һаман да туң, шуға ла ирегән ҡар һыуҙары ергә бик һеңмәй. Бының кире яғы шунда: апрелдә көндәр ҡапыл йылытып ебәрһә, канализация системаһы йылдағыса был миҙгелгә әҙер булмай сыҡһа, хатта ҡала урамдарын да һыу баҫыуы мөмкин. Бынан тыш, Өфөнөң ете районының дүртеһенә ташҡын янай.**

Оперативкала ошо мәсьәлә буйынса Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов отчет тотто. Бөгөн район территорияһында ташҡынға ҡаршы ике штаб эшләй, халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыуҙың 13 пункты булдырылған. Нижегородка биҫтәһендә һыу баҫыу янаған участкаларҙан ҡар сығарыла, әлеге ваҡытҡа 4047 кубометр сығарылған да инде. Халыҡ араһында йылдағыса аңлатыу-мәғлүмәт рейдтары алып барыла, тәү сиратта ярҙам кәрәк булған зоналарҙа йәшәүселәрҙең исемлеге асыҡланған.

Ҡыш бар донъя аҡҡа күмелеп, тирә-яҡ таҙа, саф кеүек тойолһа ла, яҙ ошо сихрилыкты күҙ асып йомғансы юҡҡа сығарырға һәләтле - ҡар аҫтынан, умырзаяларҙан алдараҡ, ҡыш буйына йыйылған сүп-сар күренә башлай. Шуға ла, оперативкала билдәләнеүенсә, 24 марттан баш ҡала территорияһын санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса айлыҡ башлана. Дөйөм ҡала өмәләре 26 мартҡа, 9 һәм 23 апрелгә билдәләнгән. Шулай уҡ һәр аҙна санитар йомалар үтәсәк.

Оперативкала ҡаралған тағы бер мөһим мәсьәлә - былтыр ҡала бюджетының үтәлеше. Был хаҡта һәм 2022 йыл бюджетының финанс тотороҡлолоған тәьмин итеү тураһында Финанс идаралығы начальнигы Рөстәм Аҡбашев бәйән итте. Былтыр баш ҡала ҡаҙнаһына барлығы 35 миллиард 906 миллион һум (102,9 процент) килем ингән, сығымдар 35 миллиард 863 миллион һум тәшкил иткән. Мәғариф, мәҙәниәт, социаль сәйәсәт, физик культура һәм спорт тармаҡтарын финанслауға бюджеттың 50 проценты самаһы йүнәлтелгән. Барлыҡ социаль бурыстар, милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу, эш хаҡы түләү тулыһынса үтәлгән. Быйыл бюджет үтәлеше былтырғы менән сағыштырғанда шул уҡ кимәлдә бара, һалым һәм һалым булмаған килемдәр былтырғы күләмдә инә. Өҫтөнлөклө бурыстар булып эш хаҡын тулыһынса түләү, муниципаль учреждениеларҙың коммуналь хеҙмәттәргә түләүен һәм башҡа социаль әһәмиәтле бурыстарын тулыһынса тормошҡа ашырыу; бюджетҡа килем килеүе кәмегәндә сығымдарҙы кәметеү; бюджет сараларын һөҙөмтәле һәм ваҡытында ҡулланыуҙы контролләүҙе көсәйтеү, бюджет сараларын бүлеүселәр һәм ҡаланың муниципаль учреждениеларының кредит бурыстарына лимит булдырыу; уйланылған бурыс ҡайтарыу сәйәсәтен алып барыу тора.

Бурыслы үлмәй, тиһәләр ҙә, бурысың булмауы яҡшыраҡ инде: йәнең дә, йоҡоң да тыныс. Әммә тормош карабының ҡайһы ярға барып морон төртөрөн берәү ҙә белмәй. Бөгөнгө хәл-торош тан сығып ҡарағанда, донъялар ғына имен булһын, бурысы ла бөтәр, килеме лә булыр, Хоҙай биргән йәнгә йүнә лә табылыр.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Аллергия

❖ Ялан туҡранбашынан сәй аллергиянан ярҙам итә. Был сәскә иммунитетты ла күтәрә, организмдағы төрлө шешеү процестарын юҡҡа сығара, нервыны тынысландыра. Бер ҡалаҡ ваҡланған ялан туҡранбашы япраҡтарына йәки сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут төнәтергә. Балаларға берәр ҡалаҡ, өлкәндәргә сирек стакан төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда эсергә. Үләнде шулай уҡ сәйгә ҡушып бешерергә, компот, ҡәһүә һәм хатта йәшелсә аштарына ҡушырға мөмкин.

## Быуындар һыҙлаһа

❖ Бер ҡалаҡ ваҡланған ҡарағай бөрөһө һәм энәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 5-7 минут ҡайнатырға. Һыуытып һөҙөргә һәм бер нисәгә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ Етен орлоғон ыуып ваҡлап, кәрәкле ҙурлыҡтағы киндер муҡсаға һалырға. Шуны 10 минутҡа ныҡ эҫе һыуға тығырға. Шунан ауыртҡан урынға һалып, һыуынғансы тоторға. Йылыһы оҙағыраҡ һаҡланһын өсөн йылыға төрөнөргә.

## Артыҡ һимеҙлек

❖ 1 ҡалаҡ цикорий тамырына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешерергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне дүрт өлөшкә бүлеп көн дауамында ашарҙан алда эсеп бөтөргә.

❖ Бесәй тырнағы (һиҙеп үләне йәки русса алтей) тамыры, йүкә һәм ҡайын япраҡтарын 100-әр грамм алырға. Ваҡланған йыйылманың 2 ҡалағын термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә көнөнә 4 тапҡыр 100-әр грамлап ашарҙан 1 сәғәт алда эсергә.

## Простата биҙе аденомаһы

❖ Ҡара мәрүәрҙен (өҫкат, бүре емеше лә тиҙәр) киптерелгән 1 ҡалаҡ сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыу парында 15 минут тотҡас, 45 минут төнәтеп һөҙөргә. Өскә бүлеп, ашарҙан алда эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ спаржа тамырына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп 15 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Бер нисәгә бүлеп, ашарҙан 30 минут алда эсергә. Бер үк ваҡытта 40-ар тамсы прополистың спиртлы төнәтмәһенән 1 ҡалаҡ һыуға бутап эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Был хоҡуҡ менән һуңғы айҙағы килеме 2021 йылдағы уртаса айлыҡ килеме менән сағыштырғанда 30 процентҡа кәмегән һәм ошоно раҫлай алған кешеләр файҙалана ала.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Борон түмәрҙән эшләнгән ултырғыс - бүкән ҡулланғандар. Улар бөтөн көйөнсә, йәки тояҡлы ҡалын түңәрәк рәүешендә булған. Бындай бүкәндәр һәм ултырғыстар XX быуаттың 50-60-сы йылдарында урман ерендә йәйге аласыҡтарҙа йыш осраған.



*Балалар өсөн бүкәндәр. Архангел районы, 1975 й. Рәссамы И.Ф. Кибальник*

Ағастың төп тамырынан йәки тап килгән асаһынан ботаҡтарын сабып, балалар өсөн бәләкәй генә ултырғыстар, эскәмйәләр һәм ағас тәгәрмәсле йөрөү өсөн ҡулайлама яһағандар.

Тағы ла күсмә тормоштан бәләкәй шкафтар һәм кәштәләр эшләү йолаһы килә. Элек уларҙы тирмәлә кирге саталарына элеп, ҡайыш йәки бауҙар менән нығытып ҡуйғандар. Был әйберҙәр өй интерьерының да айырылғыһыҙ өлөшө булған.

Уҡымышлы кешеләрҙең өйөндә "таҙа яҡ"та түбә таҡтаһы буйынса ҙур булмаған китап кәштәһе - ширлек, таҡтабаш урынлашҡан. Уның ике яҡ ҡыры семәрләнгән, ә сите ҡайһы бер осраҡта һырлы ҡаймалы итеп эшләнгән.

Һәр өйҙә аш бүлмәһе яғында мейес эргәһендә һауыт-һаба өсөн асыҡ кәштә урынлашҡан. Ул фаянс һәм фарфор һауыт-һаба, бигерәк тә сәй сервиздары киң таралыуға бәйле айырыуса кәрәкле әйбергә әйләнгән. XIX быуат урталарында уҡ П.И. Небольсин башҡорт өйҙәрендә төрлө кәштәләрҙең күплеген һауыт-һаба һатып алыуҙарына һәм "һауыт-һаба күплеге хужаларҙың етешлеген сағылдыра һәм уларҙың ҡунаҡсыллығына ишара" тигән киң таралған фекергә бәйле аңлата.

Һауыт-һаба кәштәләре йәки элеп ҡуйылмалы шкафтарҙы "һике", "таҡталыҡ", "ҡашығаяҡ таҡтаһы" тип йөрөткәндәр, улар ике-өс кәштәнән торған йәшник рәүешендә эшләнгән. Уны тештәр йәки тишекле ярым түңәрәк формаһындағы бысып йәки тишеп эшләнгән биҙәкле йоҡа тар таҡта ҡағып матурлағандар. Ҡайһы берҙә ваҡ биҙәктәре буяу һыҙаттары менән бер бөтөнгә тоташҡан. Беҙҙең осорға яҡыныраҡ был һикеләрҙе зәңгәр, йәшел йәки һоро төҫкә буяу киң таралған. Артҡы таҡтаһын йыш ҡына сәйҙән бушаған ҡурғаш менән ҡаплағандар.



*Ҡашығаяҡ таҡтаһы. Йылайыр районы, 1981 й.*

1976 йылда экспедиция барышында Бөрйән районы Брәтәк ауылында күргән ҡашығаяҡ таҡтаһының ҡырҙары буйлап ҡына түгел, уртаһынан да киң семәрле йөҙләктәр ҡағылған. Урындағы халыҡ был әйберҙе "кәштә" тип кенә йөрөтә. Ике яҡлап та йә түңәрәтеп, йә ослайтып ҡырҡылған йөҙләктәрҙә бырау менән яртылаш тишектәр эшләнгән. Урталағы тар йоҡа таҡтаһы һәм кокошнигы ҡыяҡ япраҡтарға оҡшаш. Был семәрле ситтәр бөтәһе лә зәңгәр төҫкә буялған.



*Элмәле кәштә. Бөрйән районы, Брәтәк ауылы, 1976 й. М.Г. Муллағолов фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ҺОРАУ - ЯУАП

**Кредит каникулы - айырым бер осорҙа түләүҙәрҙе сикләп йәки кәметеп тороу мөмкинлеге. Законға ярашлы, кредит каникулынан санкциялар арҡаһында зыян күреп, ауыр финанс хәлендә ҡалған кешеләр файҙалана ала. Әлегә бындай каникулды алыу ваҡыты 30 сентябргә тиклем тип билдәләнде. Рәсәй Банкының "Финанс мәҙәниәте" эксперттары ошо хаҡта ентекле аңлатма бирҙе.**

# МАТДИ АУЫРЛЫҠТЫ ЕҢЕЛӘЙТӘ...

## кредит каникулдары



***Ниндәй кредиттарға каникул бирелә?*** Был мөмкинлек бөтә төр банктарҙан, микрофинанс ойошмаларынан, кредит ҡулланыусылар кооперативтарынан алған кредиттарға һәм заемдарға, кредит карталарына, автокредиттарға һәм ипотекаға ҡағыла. Әммә бер шарт - улар 2022 йылдың 1 мартына тиклем алынған булырға тейеш. Ташлама менән ҡулланыу өсөн кредиттарҙың максималь күләме лә билдәләнгән: кредит карталары буйынса - 100 мең һум; ҡулаҡса менән алынған ҡулланыусылар кредиттары: физик шәхестәргә - 250 мең һум, шәхси эшҡыуарҙарға - 300 мең һум; автокредиттар - 600 мең һум; ипотека лимиты төрлө төбәктә төрлөсә: мәҫәлән, Мәскәүҙә - 4,5 миллион һум. Әгәр ипотека кредиты ошо сумманан ҙурыраҡ икән, 2019 йылда булдырылған ипотека каникулын юллай алаһығыҙ.

***Кредит каникулына ниндәй осраҡта өмөт итеп була?*** Был хоҡуҡ менән һуңғы айҙағы килеме 2021 йылдағы уртаса айлыҡ килеме менән сағыштырғанда 30 процентҡа кәмегән һәм ошоно раҫлай алған кешеләр файҙалана ала. Бының өсөн һалым хеҙмәтенән, мәшғүллек үҙәгенә иҫәпкә тороу тураһында белешмә, рәсми рәүештә тултырылған ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы йәки башҡа төрлө документ күрһәтергә була.

***Каникул кредит тарихын боҙамы?*** Юҡ. Санкциялар арҡаһында кредит йәки ипотека каникулы алыу тураһында мәғлүмәт кредит тарихына индерелә, әммә уны боҙмай. Әгәр каникулдан һуң түләүҙәрҙе ваҡытында индерә башлаһағыҙ, һеҙ ышаныслы клиент булып һаналасаҡһығыҙ.

***Ғаризаны нисек бирергә?*** Быны кредит биргән ойошманың офисына барып, йәки шәхси кабинет, мобиль ҡушымта аша эшләргә мөмкин. Законға ярашлы, банктың йәки башҡа төр финанс ойошманың "ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны буйынса ла ғариза ҡалдырырға мөмкин. Һеҙҙең мөрәжәғәтте биш көн эсендә ҡарарға тейештәр.

***Каникул ярты йылға ғына бирелəме?*** Ярты йыл - ул кредит каникулының максималь оҙайлығы, һеҙ унан аҙыраҡ ваҡытҡа ла каникул һорай алаһығыҙ. Шулай уҡ уның ғәмәлгә инеү ваҡытын алға шылдырырға, мәҫәлән, ғариза биргәнгә тиклем 30 көн алдан иҫәпләй башлатырға ла мөмкин. Әммә быны 2022 йылдың 1 мартынан алдараҡ датаға эшләтеү мөмкин түгел. Каникулды үҙегеҙ теләгән мәлдә туҡтата алаһығыҙ. Был хаҡта кредиторҙы иҫкәртергә генә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта хәлендән килгәнсә сумманы индереп барырға ла рөхсәт ителә, ул төп бурысты ҡаплауға йүнәлтеләсәк. Был осраҡта каникул тамамланғас, кредитығыҙҙың проценттары кәмерәк буласаҡ.

***Каникул осоронда бөтә түләүҙәрҙән дә ҡотолоп тораһыңмы?*** Ташламалы осорҙа һеҙ бөтә төр түләүҙәрҙән азат ителәһегеҙ. Әгәр быға тиклем кредит йәки займ буйынса бурысығыҙ булып, һеҙгә штраф, пеня һалынған булһа, каникул осоронда улар ҙа "туңдырыла". Был осорҙа кредитор залог булараҡ һалынған фатирҙы йәки машинаны ла һата алмай. Әммә бурыс сумаһына процентттар иҫәпләнеп барасаҡ - уларҙы һуңынан түләргә тура киләсәк.

***Каникулдан һуң түләүҙәр нисек буласаҡ?*** Ташламалы осор тамамланғанға тиклем кредитор һеҙгә түләүҙәрҙең яңы графигын ебәрә. Бөтә төр кредиттар һәм кредит карталары буйынса төп бурысты килешеүҙә күрһәтелгәнсә түләргә тура киләсәк, тик түләү ваҡыты, каникул осорон иҫәпкә алып, оҙайтыла.

***Кредит каникулын нисә тапҡыр алырға мөмкин?*** Бер кредит буйынса бер тапҡыр ғына каникул бирелә. Әммә был осраҡта иҫкәрмәләр ҙә бар. Әгәр һеҙ ипотека каникулы алып, ул тамамланһа, яңы ташламалы осорға - кредит каникулына ғариза яҙа алаһығыҙ. Һәм киреһенсә: кредит каникулы тамамланһа, ипотека каникулы алыу хоҡуғы ҡала. 2020 йылда пандемия арҡаһында кредит каникулы алыусылар ҙа ташламаға өмөт итә ала, был юлы әлеге хоҡуҡ уларға санкциялар нигеҙендә биреләсәк.Әгәр бер нисә кредитығыҙ булһа, һәр береһе буйынса каникул һорай алаһығыҙ. Кредит каникулы алыу мөмкин булмаһа, банк менән шәхси шарттарҙа бурысты реструктуризациялау тураһында килешергә мөмкин.

***Нимә ул реструктуризация?*** Реструктуризация - кредит буйынса түләүҙәрҙе кәметеү, уны үҙең өсөн ҡулайлыраҡ итеү. Ғәҙәттә, түләү күләме кредит ваҡытын оҙайтыу иҫәбенә кәметелә. Шул уҡ ваҡытта реструктуризацияның башҡа алымдары ла бар. Мәҫәлән, ниндәйҙер бер осорға кредиттың процентарын йәки төп бурысты ғына түләү мөмкинлеге бирелеүе бар. Әгәр кредитығыҙҙы түләү ауырлашһа, банктарға, кредит ойошмаларына мөрәжәғәт итеүҙән тартынмағыҙ. Ғәҙәттә, улар клиенттарға ҡулай юл табырға тырыша.

***Кредит буйынса бурысым барлыҡҡа килде. Миңә штраф һаласаҡтармы?*** Рәсәй Банкы кредиторҙарға 2022 йылдың 18 февраленән һуң финанс хәле насарайған кешеләргә түләүҙе һуңлатҡан өсөн штраф һалмаҫҡа тәҡдим итте. Әгәр банк законһыҙ рәүештә һеҙгә штраф һалды, тип иҫәпләһәгеҙ, Рәсәй Банкына мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# АҠСАҢ ӨСӨН ҠУРҠМА!

**SWIFT системаһының туҡтатылыуы Башҡортостандың ябай кешеләренә ҡағылмаясаҡ. Һумдарҙа тупланып һаҡлауға һалынған аҡсаға бер ни ҙә янамай, тип хәбәр итте республика Милли банкының матбуғат хеҙмәте.**

Беренсенән. SWIFT түләү системаһы булып иҫәпләнмәй. Ул - мессенджер, уның ярҙамында төрлө ил банктары финанс мәғлүмәт тапшыра һәм ала. Уны бөтөрөү банктар өсөн уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра, ләкин ил эсендәге операцияларға бер нисек тә йоғонто яһамай. SWIFT системаһының граждандар картаһы буйынса Рәсәй эсендәге операцияларға бер ҡыҫылышы ла юҡ. Икенсенән. 2014 йылда Рәсәйҙә Түләү карталарының милли системаһы (НСПК) булдырылды. Уның ярҙамында бөтә операциялар, хатта халыҡ-ара карталар ҡулланып башҡарылғандары ла, SWIFT ҡатнашлығынан тыш уҙғарыла. Тимәк, хәҙер беҙ файҙаланған карталар Рәсәйҙә ҡәҙимге режимда эшләй: кешеләр һатып алыу өсөн түләй, картанан картаға аҡса күсерә, банкоматтарҙан файҙалана ала. Өсөнсөнән. Шул уҡ йылда илебеҙҙә SWIFT системаһының альтернативаһы - Рәсәй банкының финанс хәбәрҙәрен тапшырыу системаһы эшләй башланы. Ул Рәсәй юридик шәхестәренә ил эсендә лә, унан ситтә лә финанс хәбәрҙәрен гарантиялы, өҙлөкһөҙ, тәүлек әйләнәһенә тапшырыуҙы тәьмин итә. Башҡортостан ойошмалары ла финанс хәбәрҙәрен тапшырыу системаһына тоташа ала. Әлеге ваҡытта быны Федераль ҡаҙнасылыҡтың төбәк идаралығы һәм республиканың ПТБ банкы эшләне лә инде. Рәсәй банкының финанс хәбәрҙәрен тапшырыу системаһына тоташыу өсөн Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банкка шәхсән йәки электрон почтаға мөрәжәғәт итергә кәрәк: 80svc_bank@cbr.ru

✓ *Яуҙан иҫән-һау ҡайтҡан шайморатовсыларҙың бәғзеләре, генералыбыҙҙың үлемен үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек, тип мәғлүмәт бирһә лә, улар күп осраҡта бер-береһенә тап килмәй.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар

**XVI быуат урталарында - XVII быуат баштарында, Мәскәү дәүләтенә ҡушылғандан һуң, башҡорт ырыуҙары биләгән аҫаба ерҙәр батша властары тарафынан административ берәмектәргә - улустарға (волостарға) бүленә. Һәр улустың атамаһы ошо ер хужалары - ырыуҙар исеменә тура килтерелеп билдәләнә. Урал һыртының көнсығыш яғынан Себергә табан йәйрәп ятҡан урманлы-далалы зонала Һалйот, йә иһә Һалйоғот/Салйоғот (Чалжаутская, Салжаутская, Салзигутская), Терһәк (Терсяцкая), Һеңрән (Сыгрянская, Синрянская), Бәкәтин (Мякотинская, Мекетинская, Бекатинская), Һырҙы (Чирлинская), Шуран (Шуранская) улустары теркәлә. Тарихи сығанаҡтарға ярашлы, Һалйот, Терһәк, Һеңрән, Бәкәтин ырыуҙары Ҡатай этник берләшмәһенә ҡараған, тип иҫәпләнә.**



Этнолог Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, һалйот/һалйоғот этнонимы ошо башҡорт ырыуының монгол сығышлы булыуына ишара: "Һалйот башҡорттары, күрәһең, туранан-тура салжиуттарға - беҙҙең эраның II мең йыллығының тәүге быуаттарында төрки-монгол көрәшендә әүҙем роль уйнаған монгол ҡәбиләһенә барып тоташа". Ғалим шулай уҡ һалйот-ҡатай этник бәйләнешенә лә иғтибар иткән: "Башҡортостан территорияһында һалйот һәм ҡатай ҡәбиләләре һәр саҡта ла йәнәш ятҡан ерҙәрҙе төйәк иткән, был факт риүәйәттәрҙә һалйоттарҙың һәм ҡатайҙарҙың "туғандар" тип аталыуы менән бергә уларҙың тәрән традицион бәйләнештәренә дәлил булып тора".

Бынан ошо башҡорт ырыуҙарының генетик туғанлығы хаҡында һүҙ йөрөтөп буламы? Юҡ, әлбиттә. Боронғо салжиуттарҙың нәҫел тамырҙары монгол-нирундарға барып тоташа, улар Сыңғыҙ хан ырыуы - кият-борджигиндарға ла туғандаш була. Монгол риүәйәттәрендә ошо ике ҡәбиләнең төп бабаһының исеме Добун Мәргән булып, ә уның ҡатыны Алан Гоаның хори-тумаг ҡәбиләһе юлбашсыһының ҡыҙы икәнлеге хаҡында әйтелә. Уларҙың Бельгунотай һәм Бугунотай исемле улдары тыуа, ә һуңынан Добун Мәргән вафат була. Ошо хаҡта "Монголдарҙың йәшерен тарихы" йәиһә "Йәшерен хикәйәт" тип аталған әҫәрендә былай нисек бәйән ителә: "Күп ваҡыт үткәнме, аҙмы, Добун-Мәргән үлеп китә. Добун-Мәргәндең вафатынан һуң, Алан-гоа, ирһеҙ була тороп, өс ул таба. Бына улар: Бугу-Хадаги, Бухату-Салчжи һәм Бер ҡатлы Бодончар. Өлкән улдары һөйләнә башлай: "Бына беҙҙең әсәйебеҙ өс ул тапты, ә бит уның янында атайыбыҙҙың бер туған йә ике туған энеләре лә, ире лә юҡ ине. Өйҙә берҙән-бер ир - ул Маалих, Баяудай кешеһе". Улдарының һуҡраныуҙарына яуап биргәндә Алан-Гоа, аҡланырға теләп, үҙе менән булған мистик хәлдәр тураһында ошолай тип әйтә: "... һәр төндә тирмәнең төтөн сыға торған төнлөгөнән, эстә яҡтырт-ҡыс һүнгән мәлдә, минә аҡ йөҙлө, һары сәсле кеше инә торған ине; ул минең эсемдән һыйпай, һәм уның яҡтылығы минең ҡарыныма үтеп инә".

Боронғо монгол риүәйәттәрендә Алан-Гоаның ире үлгәндән һуң тапҡан улдарының инә ҡарынынан түгел, ә әүернә һөйәгенән, йәғни һигеҙгүҙҙән тыуыуы хаҡында ла бәйән ителә. Алан-Гоаның тәүге ике улынан хасил булған ҡәүем дарлекин атамаһын йөрөтһә, уның атайһыҙ тыуған өс улынан таралып киткән тоҡомдары монгол-нирундар, тип атала башлай. "Йәшерен хикәйәт" яҙмаһына ярашлы, Бер ҡатлы Бодончар - Барын, Барлас, Манғыт, Борджигин ырыуҙарының төп бабаһы, ә уның ир туғаны Бухату-Салчжи салжиут ырыуына нигеҙ һалыусы баба, тип иҫәпләнә. Ошо боронғо монгол риүәйәтендә Алан-Гоа монгол халҡының төп инәһе сифатында ололана. Ул үҙенең кесе улдарына бөйөк яҙмыш юрай: "... ошо улдарым күктән төшөрөлгән мисәт менән билдәләнгән. Һеҙ нисек итеп улар хаҡында, ябай бер әҙәми заттарға тиңләп, һүҙ сығарҙығыҙ? Улар батшаларҙың батшаһы, бөтөнөһө өҫтөнән хан булғас, шул саҡта ғына ябай кешеләр быларҙың барыһына ла төшөнөр".

Ысынлап та, Алан-Гоаның күрәҙәлеге дөрөҫкә сыға: Борджигин ырыуы Алтын Урҙа империяһына нигеҙ һалыусы, йыһангир Сыңғыҙ ханды тыуҙырһа, тыумышы менән Барлас ырыуынан булған, ҡанһыҙлығы, илбаҫарлығы менән дан тотҡан Аҡһаҡ Тимер барса Евразия ҡитғаһын тетрәтә, ә төрки донъяһының легендар шәхесе, кенәз Иҙеүкәй (Едигей) манғыт нәҫеленән була. Табын һәм һалйоғоттар (салжиут) араһынан чингизид ханлыҡтарының билдәле сардарҙары һәм министрҙары сыға.

XIX быуат лексикографы Владимир Даль, боронғо башҡорт риүәйәттәрендә монгол тарихы менән бәйле мәғлүмәттәр булыуына иғтибар итә: "...В сказках и песнях их поминают родоначальником дивного Чингисхана, коего предок рожден девственницею от наития солнечного луча, а сам он, Чингис, вдовою Алан-гу, которую также посетил луч солнца..." Күрәһең, В.И. Даль "Ҡысса-и Сыңғыҙхан" исемле башҡорт дастаны менән таныша булғандыр. Әммә ошо дастанда монголдарҙың төп бабаларының исемдәре үҙгәртелеп бирелә: "Дуин Баяндың Алангунан өс улы тыуған. Беренсеһе Бүҙәнйәр (Буденджар) исемле, икенсеһе - Күгәнйәр (Кугенджар), өсөнсөһө - Салджут (Һалйот). Ҡыят ҡәбиләһе Бүҙәнйәрҙән, ҡатай (хатай) ҡәбиләһе - Күгәнйәрҙән, һалйот халҡы - Салджуттан хасил булған".

Академик Р.Ғ. Кузеев иҫкә алған һалйот һәм ҡатай ҡәрҙәшлеге хаҡындағы риүәйәттәр ҙә ошо дастандағы мәғлүмәттәр нигеҙендә барлыҡҡа килгәненә шик юҡ. Һалйот һәм ҡатай башҡорттарының генетик яҡтан ҡәрҙәш булыуы ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Күрәһең, тарихи Башҡортостан территорияһында, Алтын Урҙа барлыҡҡа килгәндән күпкә һуңырак осорҙарҙа, тығыҙ аралашып йәшәү барышында ошо ырыуҙар араһында нығынып киткән этник бәйләнештәр ошондай ҡараштарҙың таралып китеүенә ерлек биргәндер. Монгол тарихын ентекләп өйрәнгән XIV быуат тарихсыһы Рәшид ад-Дин ҡатайҙарҙың төп бабалары булған ҡара хитайҙарҙы монголдарҙың дарлекин һәм нирун ҡәбиләләре иҫәбенә индермәгән.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Ғөмүмән, комдив М.М. Шайморатовтың аяныслы үлеме хаҡында һуғыштан һуң төрлө, хатта бере-береһенә һис тап килмәгән фараздар хасил була. Бит тәүҙә, 1948 йылдың октябрь айында Башҡортостан хөкүмәте тарафынан Донбасҡа, данлы генералыбыҙ һәләк булып ҡалған Ворошиловград өлкәһенә ебәрелгән махсус комиссия һөҙөмтәләре билдәле булғансы, М.М. Шайморатов хәбәрһеҙ юғалған, тип иҫәпләнә. Билдәле сәбәптәр арҡаһындалыр инде, яуҙан иҫән-һау ҡайтҡан шайморатовсыларҙың бәғзеләре, генералыбыҙҙың үлемен үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек, тип мәғлүмәт бирһә лә, улар күп осраҡта бер-береһенә тап килмәй. Совет осоро идеологияһына хас булғанса, билдәле кимәлдә булып үткән ваҡиғаларҙы күпертеберәк күрһәтеү, хатта төптө дөрөҫ булмаған, хәҡиҡәтте боҙоборaҡ, кәрәгенән артыҡ геройлаштырып бәйән итеү осраҡтары ла була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо ҡанлы алыштарҙа ҡатнашҡан, инде олоғая барған яугирҙарыбыҙ, ҡыҙыу бәхәстәр тоҡанып киткәс, бер-береһен ялғанда ғәйепләп, низағлашып та бөтә. Ошо бәхәстәрҙең үтә һуңлаған ауазы булдымы, әле беҙҙең көндәрҙә бер төркөм йәшерәк ғалимдарыбыҙ, Украинала йәшәгән Маслов исемле бер крайҙы өйрәнеүсенең уйҙырмаларға ҡоролған мәҡәләһенә таянып, республика матбуғатында генералыбыҙҙың трагик үлеме хаҡында, йәнәһе, сенсацион "асыш" яһаны: М.М. Шайморатов яралы килеш фашистарға әсирлеккә эләккән икән дә, тегеләре шундуҡ генералды һатлыҡ йән казактарға язаларға биргән икән. Кинорежиссер Р. Ҡоҙаяров та ошо сенсацияны "документлаштырып", "Генерал" тип исемләнгән документаль фильм дә төшөрөп өлгөрҙө, әммә уның фильмы прокатҡа сығарылмайынса, тыйылды. Алды-артты ҡарамай, ошондай яһалма сенсацияларҙы бер ниндәй тәнҡитһеҙ халыҡҡа еткергән матбуғат саралары ошо саҡта оло хилафлыҡ ҡылды.

Бында тағы бына нимәгә иғтибар итеү фарыз. Генералыбыҙҙың һуңғы алышында уның янында 12 һаҡсыһы ла була. Һуғыш осоронда ла, унан һуң байтаҡ йылдар үткәс тә, һөйөклө генералдары өсөн йән аямай айҡашҡан дивизия штабы һаҡсыларының барыһы ла һәләк булған, тип иҫәпләнә. Әммә ошо һаҡсы һалдаттарҙың береһе, тыумышы менән Баймаҡ районы Муллаҡай ауылы егете Рамаҙан Шаһивәли улы Билалов, аяҡтары яраланып йығылып, тере ҡала, немецтар уны әсирлеккә ала. Ул әсирлектән тик 1945 йылда ғына ҡотола, әммә тап ошо "ҡара мөһөрө" айҡанлы үҙенең генерал М.М. Шайморатов менән бергә һуңғы алышта булыуы хаҡында бер кемгә лә бер ни ҙә һөйләмәй. Рамазан Билалов 1987 йылда вафат була, әммә, ҡаты ауырый башлағас, үҙендә сер итеп һаҡлаған хәтирәһен үлеренән бер аҙ алдараҡ икенсе бер шайморатовсы ветеран дуҫына һөйләп ҡалдыра. Немецтарҙың аяуһыҙ көслө уты аҫтында ҡалғас, башҡорт генералы яраланып, атынан ергә ҡолай. Һаҡсылары, ҡар өҫтөндә ятҡан килеш, уның яраһын бәйләргә тырыша, әммә комдивҡа икенсе пуля тейгәс, уның кәүҙәһе хәрәкәтһеҙ ҡала. Яраланмаған бер нисә һалдат, генералдың үле кәүҙәһен күтәреп алып, балка ситендәге ҡаяларға табан йүгерә. Рамаҙан Билалов уларҙы башҡаса күрмәгән. Билаловтың һөйләгәндәре ысын хәл булырға тейеш, әммә штаб һаҡсыларының береһе лә ошо үлемесле Романов йырынынан иҫән-һау сыға алмаған. 1948 йылдың октябрендә Башҡортостандан килгән хөкүмәт комиссияһы һорауы буйынса Штеровка ауылында халыҡ сходы уҙғарыла. Йыйылышҡан кешеләр араһында немец офицерҙары ҡушыуы буйынса һәләк булған билдәһеҙ генералды, башҡа офицер һәм һалдаттарҙы ерләргә Романов балкаһына барған ҡарттар ҙа була. Улар беҙҙең яугирҙарыбыҙ кәүҙәләренең тап ошо ҡаялар янында ятҡанын үҙ күҙҙәре менән күргән.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Баҡһаң, көршәктәр менән һыу ташыу башы эшләмәгәндәргә аяҡтары аша ябай ҡағиҙәне өйрәтеү ысулы булып сыҡты, сөнки бында тәүгә килгәндәр үҙҙәренең тәкәбберлектәрен еңә алмайҙар икән.*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

**Йә, йылмай әле! Йылмайҙыңмы? Шунан, ҡыйынмы йылмайыуы? Шулай булғас, ниңә йылмайырға ваҡытың юҡ? Эйе, буштан-бушҡа йылмайырға, кәйеф булмағанда ла, ауыр булғанда ла... Бик булмаһа, академик Мырҙакәрим Нурбәковтың бер китабындағы ошо өҙөктө уҡып сыҡ әле. Йылмайып ҡына, сөнки шунһыҙ фәтеүәһе булмаҫ. Был булған хәлдең тарихы ябай ғына. Мырҙакәрим Санакул улы элекке коммунистар партияһы номенклатураһына ҡараған оло йәштәге бер төркөм бабайҙарҙың һаулығы яҡшы һаҡланыу серҙәрен өйрәнә. Баҡтиһәң, улар бейек тау башында урынлашҡан Утҡа табыныусылар ҡорамына барып дауаланғандар икән. Ике иптәше менән Нурбәков әфәнде лә бара ул монастырға. Артабан ни булғаны түбәндәге өҙөктә.**



# ЙЫЛМАЙҒАН - ДАУА ТАПҠАН

Тәғәйен көнгә ҡараңғы төшөүгә кәрәкле урынға барып еттек. Беҙҙе алып килгән машина ҡайтып китте, сөнки артабанғы юлға транспорт вәғәҙә иткәйнеләр. Баҡтиһәң, юлды ишәктәргә атланып дауам итергә тейешбеҙ. Ҡорамға тау юлы буйлап 26 саҡрым йәйәүләп, йә булмаһа, ишәктәргә ултырып күтәрелергә кәрәк. Беҙ һуңлап килгәнгә күрә, өсөбөҙгә ике ишәк кенә ҡалғайны. "Һеҙ ҡасан да булһа тауға артылғанығыҙ булдымы, әйҙә, тәүәккәлләйек", - тип иптәштәремдең кәйефен күтәрергә тырыштым. Операторыбыҙ ҙур ҡорһаҡлы, 130 килограмдан артығыраҡ кәүҙәле бик елле кеше булһа ла, тиҙ ризалашты. Үҙебеҙ менән алған аппаратураны ишәктәргә тейәп, юлды дауам иттек. Беренсе булып миңә мыжырға тура килде, сөнки ҡала урамдары өсөн генә ҡулайлаштырып тегелгән туфлиҙарым тиҙ арала эшлектән сыҡты һәм аяҡтарымды өйкәй башланы. Аяҡтарым сыҙамаҫлыҡ булып һыҙлаһалар ҙа үҙемде тынысландырырға маташтым: "Анау тиклем ауырыуҙар йүнәлгәс, рецептарҙы яҡшылап өйрәнһәм, ҡалала мин бөйөк табип буласаҡмын".

Унлап саҡрым күтәрелгәс, оператор юл уртаһына лып ултырҙы ла:

- Булды! Үлтерһәгеҙ үлтерегеҙ, мин кире боролам, - тине. Беҙ уны өгөтләй башланыҡ:

- Юлдың яртыһын үттек бит инде, түбәнгә ун саҡрым атлағансы, юғарыға шунса ҡалды.

Өгөтләнек. Төн уртаһына саҡ менеп еттек тау башына. Беҙҙе ҡаршыланылар, урынлаштырҙылар. Иртәнге сәғәт ун берҙә уятып, дауаланырға ниәтләнеп килгәндәрҙе бергә йыйҙылар.

- Ҡорамда гонаһ ҡылмауығыҙҙы һорайбыҙ. Үтенесебеҙҙе үтәмәгәндәр беҙгә хужалыҡ эштәрендә ярҙам итәсәк - һыу ташыясаҡ.

Баҡтиһәң, был Изге урында йөҙ һытып йөрөргә ярамай икән. Шундуҡ еңелсә генә йылмайып йөрөгән тура кәүҙәле монахтар иҫкә төштө. Ярай, һәр саҡ йылмайып ҡына йөрөргә булалыр ҙа, кәүҙәне нисек, таяҡ йотҡандай, туп-тура тотоп йөрөргә мөмкин икән - иң аптыратҡаны шул ине. Тимәк, гонаһ ҡылмаҫ өсөн беҙ һәр ваҡыт йылмайып ҡына, кәүҙәбеҙҙе тура тотоп йөрөргә тейешбеҙ. Әлбиттә, тыңланыҡ, бер-беребеҙгә ҡарап йылмайыштыҡ, әммә ҡалалағыса алан-йолан ҡаранып, һытыҡ йөҙ менән йөрөү ғәҙәтебеҙ үҙенекен итте, кире элекке хәләтебеҙгә ҡайттыҡ.

Мин бит бында бөтөнләй икенсе төрлө күренештәр көткәйнем - алтын ялатылған манаралы ҙур-ҙур биналар ҡаршылар, тип уйлағайным, ә бында ыҡсым ғына бәләкәй өйҙәрҙән башҡа бер нәмә лә юҡ. Ҡорамдарында көнө-төнө ут яна, сөнки бындағылар Утҡа һәм Ҡояшҡа табыналар. Ҡасандыр монахтар ер аҫтынан эҫе бөрккән тау тишеген табып, шул урында ҡорам төҙөгәндәр.

Һорамайынса булдыра алманым:

- Ҡасан диагноздар ҡуйып, дауалай башлайһығыҙ?

Ыста! Бында бер ниндәй тикшереү үткәрмәйҙәр икән дә баһа! Дауаламайҙар ҙа... Нимә-нимә, быңдай мөғәмәләгә мин бөтөнләй әҙер түгел инем. Етмәһә, беҙгә тау артылырға ярҙам иткән ишәктәрҙе хужалары алып ҡайтҡан. Тимәк, көс еткеһеҙ аппаратураны йөкмәп, кире төшөп булмай. Ҡыҫҡаһы, һемәйттеләр! Бында дауаларға уйҙары ла юҡ, ҡайтып та булмай. Йөрө инде хәҙер алйот һымаҡ ауыҙ йырып. Оператор асыу менән миңә тексәйҙе.

- Ҡайҙа алып килдең беҙҙе, ғалим йораты! - тине режиссер.

Минең күңелдә нимәләр ҡайнағанын белһәләр икән дә!

Ҡыҙығы аҙаҡ башланды. Дауаланырға өмөтләнгән утыҙ кешенең ун бише һыу ташырға китте. Улар араһында мин дә бар инем... Ни өсөн икәнен аңлатып тормайым, былай ҙа билдәле.

Һыу алыр өсөн 600 метр бейеклектәге текә ҡаянан аҫҡа төшөр кәрәк: тар ғына һуҡмаҡ буйлап дүрт саҡрым аҫҡа, шунса юлды кире өҫкә менергә. Бер кеше 16 литр һыу алып килергә тейеш. Көршәктең ауырлығы биш килограмм булыуын иҫәпкә алғанда, 21 килограмм ауырлыҡтағы йөк менән өҫкә үрмәләргә кәрәк. Кисә генә шул юл буйлап килгәйнек! Тар һуҡмаҡта көршәкте башҡа ултыртып мендереү - иң һәйбәт ысул. Умыртҡа һөйәгенең кешегә ни өсөн кәрәк икәне шундуҡ аңлашыла. Умыртҡа һөйәге кешенең башы ыштаны эсенә төшөп китмәҫ өсөн кәрәк!

Һыу юлынан киске биштәргә ҡайттым. Арыным, йонсоном, әммә ул-был булһа тип, йылмайған булам. Эргәмә бер монах килде лә итәғәтле генә:

- Һеҙгә тағы һыуға барырға тура килер, - ти.

- Ни эшләп? Мин бит әле генә һыу алып килдем! - тип, артҡа ҡолап китә яҙҙым.

- Өҫкә менеп килгәндә һеҙ гонаһ ҡылдығыҙ, - тимәһенме.

- Юҡ! Мин йылмайып ҡына мендем! - тип талаша башланым.

Күҙ алдына килтерегеҙ, кисә 26 километр юл үтеп, тауға мендем, әле генә тағы 8 саҡрым шул юлды тапаным. Ике көн йүнләп ашаған да юҡ, аяҡтар һыҙлай, ә һиңә матур ғына, йылмайып ҡына "тағы бер тапҡыр һыуға барығыҙ", тиҙәр. Ят та үл!

- Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә бер нәмә күрһәтәм, - ти монах.

Баҡтиһәң, һыу юлында йөрөгәндәрҙе биноклдән ҡарап күҙәтеп торалар икән дә! Бәхәсләшеп тороу мәғәнәһеҙ икәнен аңланым - тағы һыу юлына төшөргә тура килде. Аҫҡа табан туйтаңлағанда үҙемде-үҙем әрләйем: "Алйот! Һин алйот менән яртаҡылдар идара итә! Мәсхәрә!" Ә үҙем бар көсөмә ауыҙ йырам, юлда тап булғандарҙы ла иҫкәртергә онотмайым: "Йылмай, улар һәр кемде биноклдән күҙәтеп тора, әтеү тағы һыуға ебәрәсәктәр. Кәңәшем өсөн минең көршәккә бер аҙ һыу ҡой". Шулайтып, көршәгемә байтаҡ ҡына һыу йыйылғас, аҫҡа төшөп етмәнем, ваҡыт үткәрер өсөн ултырып ял итеп алдым да, кире боролдом.

Беҙгә тиклем бында килеп "дауаланып" ҡайтҡандарҙың дауалау ысулдары тураһында һорашҡанда, "Беләһеңме, уны бер һүҙ менән генә аңлатып булмай", тип, яуаптан ҡасҡандарын аңланым. Ҡорамдың ҡапҡаһы төбөнә килеп еткәс, шуға иғтибар иттем: ҡараңғы төшкән, ә мин һаман йылмаям. Һаҡлыҡ өсөн, кем белә, бәлки, уларҙың ҡараңғыла ла күрһәтә торған биноклдәре барҙыр.

Асығып, алйып, үҙебеҙ йәшәгән өйгә һөйрәлеп тигәндәй ҡайтып индем. Тәрән итеп көрһөндөм дә, йөҙөмдәге йылмайыуҙы һыпырып ташланым (Йөҙ арый ҙа инде!) Шул саҡ кемдер мине ситтән күҙәтеүен тойҙом. Йөрәк жыу итеп ҡалды. Тағы ла ихласыраҡ йылмайып, артыма боролдом һәм... Үҙемде күрҙем! Баҡтиһәң, стенала ҙур көҙгө эленеп тора икән. Йөҙөм йонсоу, юлаҡ-юлаҡ булып, битемдәге саңды йыуып, тир аға. Үҙе йылмая! Мин истерика хәленә етеп, һыным ҡатып көлә башланым. Яңаҡтарым тартыша, эс ауырта, ә мин туҡтай алмай, көләм дә көләм, тыныслана алмайым. Бынан да алйотораҡ хәлдә булғаным юҡ ине бит быға тиклем. Тауышҡа иптәштәрем, оператор менән режиссер йүгереп килделәр. Башта бергәләп хахылдаштыҡ, шунан былар, шымып, миңә бик сәйер итеп ҡарай башланы.

Көндәр үтә торҙо, һыу ташыусылар һаны кәмей барҙы. Бер аҙнанан һыуға йөрөүселәр ҡалманы.

Беҙҙе тағы бергә йыйҙылар.

- Ҙур рәхмәт һеҙгә, беҙҙең Ҡорамға нур өҫтәйһегеҙ. Әгәр ҙә һыу кәрәк булһа, бына ошо өй эсендәге ҡоҙоҡтан алығыҙ, - тиҙәр.

Баҡһаң, көршәктәр менән һыу ташыу башы эшләмәгәндәргә аяҡтары аша ябай ҡағиҙәне өйрәтеү ысулы булып сыҡты, сөнки бында тәүгә килгәндәр үҙҙәрен шул тиклем аҡыллы һанап, тәкәбберлектәрен еңә алмайҙар икән. Үҙҙәре менән алып килгән мин-минлектәрен еңеү өсөн монахтар ошондай "дауалау" сараһы уйлап тапҡандар.

Мин дә бит әллә кем булып килгәйнем бында: йәнәһе, белемлемен, һәләтлемен, башҡалар менән сағыштырырлыҡ түгел. Бер аҙна эсендә алйотлоғомдо юҡҡа сығарҙылар. Бер аҙнала минән икенсе кеше яһанылар!

Унда мин үҙем менән үҙем осраштым. Сәскәләргә, үлән араһындағы бөжәктәргә элеккеләй һоҡланып, ҡыуанып, йылмайып ҡарай башланым. Әйтерһең дә, яңынан бала сағыма ҡайттым. Бер миндә генә түгел, башҡаларҙа ла күренә ине был үҙгәреш. Хәҙер беҙ элекке вазифаларыбыҙҙы, йәшебеҙҙе онотоп, тиңдәштәргә әйләндек һәм, иң ҡыҙығы, һытыҡ йөҙлө ҡала кешеһе мимикаһы беҙгә ҙур етешһеҙлек һымаҡ тойола башланы.

Һеҙ оло кешеләрҙең бөтә донъяһын онотоп, балалар кеүек уйнағанын күргәнегеҙ бармы? Ә беҙ уйнаныҡ. Көлкөмө? Көлкөлөр, әммә ундай бала-саға уйындары беҙҙең өсөн тәбиғи хәлгә әйләнде. Шуға иғтибар иттем: кешеләрҙән "миңә рәхәт булып ҡалды", "миңә бында күңелле", тигән һүҙҙәр ишетелә башланы. Башта был тәбиғәткә бәйлелер, ни тиһәң дә, саф һауа, таҙа һыу, тип уйлағайным. Аҙаҡ бөтөнләй икенсе һығымта яһаным: был үҙгәрештәрҙең бөтәһе лә йылмайыуға һәм кәүҙәнең туп-тура булыуына бәйле.

Ҡырҡ көн ошондай шарттарҙа йәшәгәндән һуң монастырҙың башлығына индем дә: "Мин бында ҡалырға теләйем", - тинем.

- Улым, һин йәшһең. Беҙҙе насар тормоштан ҡасып, бында йәшәйҙәр, тип уйлама. Монахтар, һеҙҙең менән сағыштырғанда, көсһөҙ кешеләр. Улар бысраҡҡа батһалар, таҙарыныу юлдарын белмәйҙәр, ҡала шарттарында йәшәй алмайҙар. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - һеҙҙең кеүектәр аша башҡаларға нур таратыу. Һеҙ көслө, сөнки иммунитетығыҙ бар.

Мин теләгемде дөрөҫ аңлата алманым шикелле, тип уйлап, әллә нәмәләр һөйләп маташтым да:

- Ғәфү итегеҙ, төркөмдән бер мин генә ошондай теләк менән килгәнмендер, - тинем.

- Юҡ, һин аҙаҡҡыларҙың береһе, - тине монастырь башлығы.

Баҡтиһәң, беҙҙекеләрҙең бөтәһе дә бында ҡалыу ниәте менән мөрәжәғәт иткәндәр икән. Аңлайһығыҙмы?

Ҡырҡ көндән һуң Ҡорам менән хушлаштыҡ. Ҡайтып барғанда "дауаланыу" өсөн тауға үрмәләгән яңы төркөмгә тап булдыҡ. Улар беҙ үткәнде ҡабатларға күтәреләләр ине. Уф! Йөҙҙәренә ҡарарлыҡ түгел!

- Файҙаһы бармы? Ярҙам итәме? Бөтә ауырыуҙарҙы ла йүнәлтәләрме? Нимә ашаталар? - Әйтерһең дә, беҙгә ҡырағай кешеләр ябырылды.

Мин: "Һәр кем үҙенә кәрәкләһен алыр", - тинем. Үҙем уларға ҡарайым да, үҙебеҙҙекеләргә ҡарайым - беҙҙекеләр бөтәһе лә йылмая! Ике төркөм араһындағы айырма ер менән күк араһы. Эргәмдә торған һикһән йәшлек бабай: "Беҙ ҙә ошолар һымаҡ булдыҡмы икән?" - тип әйтеп ҡуйҙы...

...Ҡалаға ҡайтҡас, йәнһеҙ, гәмһеҙ кешеләр араһына сумдым, улар мәңге ҡайҙалыр ашығалар, ҡайҙа икәнен үҙҙәре лә белмәйҙәр. Ҡала тормошона яңынан өйрәнеү еңел булманы.

Миндә нимәлер ҡапыл һәм мәңгегә үҙгәргәйне. Ҡалала үҙемде абсурд театрында һымаҡ тоя башланым: тирә-яғымдағы тормош буш һәм мәғәнәһеҙ ине. Кешеләрҙең һытыҡ йөҙҙәренә ҡарауы иң ауыры. Белһәгеҙ икән, ни тиклем күңелһеҙ булғанын: ай ярым элек мин дә улар кеүек инем бит.

Һуңынан, эшкә сыҡҡас, тикшереүҙәремде ғилми яҡтан дауам иттем. Ысынлап та, дауалауҙың һөҙөмтәһе йылмайыу менән кәүҙәнең төҙлөгөнә бәйлеме икән? Бәлки, һауа шарттарына, тәбиғәттең үҙгәрешенә бәйлелер? Дауаханабыҙҙың спорт залында күнекмәләр үткәрә башланыҡ. Ирекмән-пациенттарҙан төҙөлгән төркөмгә эш тәртибен аңлаттыҡ. Көнөнә бер-ике сәғәт шөғөлләнгән ваҡытта кәүҙәне тура тотоп, йылмайып йөрөргә өйрәттек.

Спортзалдағы күнекмәләр һөҙөмтә бирә башланы: бер пациенттың күреү һәләте яҡшырҙы, икенсеһенең эсе ауыртыуы баҫылды, өсөнсөһөнөң ҡолаҡтары яҡшыраҡ ишетә башланы. Был хәл мине ныҡ аптыратты: ысынлап та, төҙ кәүҙә менән йылмайыу кешене дауалаймы икән?

Лаборатор шарттарҙа үткәргән иҫәпләүҙәр организмдағы үҙгәрештәрҙең кәүҙә торошона һәм йылмайыуға туранан-тура бәйле икәнен иҫбатланы. Ғилми донъяла был ҙур асыш булды.

Оператор менән режиссерҙың артабанғы хәле борсойҙор? Операторыбыҙ ябыҡты, әле ауырлығы 85 килограмдан артмай. Сырхауҙары тураһында онотто.

Беҙ өсәүҙең араһында иң ҙур уңышҡа режиссерыбыҙ өлгәште. Ул ҡатыны менән айырылышҡайны. Тауға йөрөп ҡайтҡандан һуң, эсеүен ташлап, ул үҙ ҡатынына яңынан өйләнде.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Фәһемле тарихмы? Миненсә, бик тә файҙалы ишара был беҙҙең кеүек йылмая белмәгән, тормош ауырлығынан бөгөлгәндәр өсөн. Турайтығыҙ кәүҙәгеҙҙе һәм йылмайығыҙ! Йылмайып йәшәйек! Сөнки бөгөн илаһаң, иртәгә лә иларға тура киләсәк.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

*АТЫҢ КЕМ?*

# ӘҘӘМ БАЛАҺЫНЫҢ ЯҘМЫШЫН...

## уның исеме үҙгәртә аламы?



**Йәш ғаиләләрҙә яңы донъяға килгән сабыйға ниндәйерәк исем ҡушырға тигән һорау тыуып тороуы - тәбиғи. Һәр ата-әсә үҙенең балаһының матур исемле булыуын теләй. Шул уҡ ваҡытта гәзизенең һау-сәләмәт булып үҫеүен, бәхетле булыуын теләмәгән кеше лә юҡтыр. Ҡыҙ балаға Гөлдәр, Гөлназ, Гөлшат, Гүзәлиә, Нәфисә тигән һымаҡ матурлыҡты сағылдырған исемдәр һайларға тырышалар. Ә малай кешегә - буласаҡ ир-егеттәргә Арыҫлан, Батыр, Тимер, Салауат, Азамат һәм башҡа шундай исемдәр бирә күптәр. Хәҙерге ваҡытта, тыуыр сабыйҙың малаймы-ҡыҙмы икәнен УЗИ ярҙамында алдан белгәнгә күрә, исемде лә бер нисә ай элек үк әҙерләп ҡуйыу ғәҙәткә ингән. Исем кешегә бер-береһен айырыу, таныу, аралашыу өсөн бирелә.**

Таңһылыу Кусимованың "Исемдәр донъяһында" тип аталған китабында бик күп исемдәрҙең сығышы хаҡында ла ентекләп яҙылған. Шул китапты йыш ҡына ҡулыма алып, кинәнес менән уҡып алам. Сөнки унда халҡыбыҙ тарихы ла сағылыш ала. Киң таралған ябай исемдәрҙән тыш, һәр төрлө ырым-юрауҙар, хәрәфәттәр менән бәйләләре хаҡында ла аңлайышлы бәйән ителгән был китаптан исем эҙләү генә түгел, ә уларҙың тамыры менән дә ҡыҙыҡһыныу файҙалы. Исемдәр тарихы китаптың аҙағындараҡ килтерелгән.

Кеше тәненең йә тәбиғәттең тышҡы күренешен сағылдырған Миңлегөл, Миңлебай, Ҡарабай, Аҡйегет йә Буранбай, Таңатар, Ҡәмәриә (ай), Шәмсиә (ҡояш) һымаҡ боронғо исемдәрҙең ҡайһыларын әле булһа ҡушҡылайҙар. Һуңғы йылдарҙа Айсыуаҡ, Айбулат, Айнур, Айгүзәл, Айназ һымаҡ исемдәр йыш ҡына осрай. Бер танышым ҡыҙына Айым тигән исем дә биргән ине. Элегерәк, ҡайны айҙа йә көндә тыуыуына ҡарап, Рәжәп, Рамаҙан, Мөхәррәм, Зөлхизә, Айытбай, Йомағол, Йомабикә исемдәрен йыш ҡуша торғайнылар. Арыҫлан, Бөркөтбай, Һандуғас, Ҡарлуғас һымаҡ ҡош, хайуан исемдәренең берәүҙәрен малайға, икенселәрен ҡыҙға биреү ҙә боронолан килгән. Әйбер атамаһына бәйле Алтынай, Көмөшбай, Көмөшбикә һымаҡ исемдәр хәҙер әллә ни йыш осрамай. Ә үзбәктәрҙең Аҡсагөл, Аҡсабай тигән исемдәрен ишеткәнем бар.

Ислам динен ҡабул итеп алғандан һуң милләтебеҙҙә, башҡа мосолман халыҡтарындағы һымаҡ уҡ, ғәрәп исемдәре лә таралған. Улар хатта күпселекте лә тәшкил итәләр. Ғәрәби исемдәрҙең дә һәр береһенең үҙ мәғәнәһе бар. Таңһылыу Кусимова уларға ла аңлатма биргән. Ғабдулла, Динислам, Нурислам, Ғәбиҙә, Хәҙисә һымаҡ исемдәрҙе балаларына үҙҙәре хаҡ диндә булған ата-бабаларыбыҙ бирергә яратҡан. Шундайыраҡ исемде беҙ "мосолман исеме" тип һанарға ғәҙәтләнгәнбеҙ, әммә кешенең дине исемгә түгел, ә иманына ҡарап аныҡланыуын да белеү кәрәк. Әйтәйек, Иван, Вячеслав исемле мосолман һәм шул уҡ ваҡытта Абдулла йә Мөхәммәт исемен йөрөткән, әммә Ислам диненән бөтөнләйгә алыҫ торған кешенең дә булыуы ихтимал.

Шулай ҙа, исемдәр тураһында һүҙ сыҡҡас, ифрат мөһим булған башҡа бер мәсьәләлә туҡтап китмәй хәлем юҡ. Исем көсөнә ышаныу хаҡында. Борон мәжүсилек дәүерендә күп кенә халыҡтарҙа, кешенең исеме уның яҙмышына тәьсир итә, тигән инаныу йөрөгән. Башҡорттар араһында ла ана шундай йола буйынса ҡушылған исемдәр киң таралған булған. Мәҫәлән, балалары тыуып, ниндәйҙер сәбәп менән йыш ҡына үлеп торһа, ана шул бәләнән ҡотолоу өсөн "Был бала беҙҙеке түгел ул", тип, нимәнелер (йә кемделер) "алдаштырыу" ниәте менән сабыйға "Һатыбалды" тигән исем дә биргәндәр (Һатыбалдин тигән фамилиялар бөгөнгә көнгәсә һаҡланып килгән). Баланы ишек аша тышҡа алып сығып, ҡабаттан ата-әсәһенең ҡулына тәҙрә аша биргәс, бала өсөн күпмелер хаҡ түләп, "һатып алғандар". Былдай йола хаҡында ишетмәгәндәр ҙә барҙыр, бәлки. Сабыйҙың йәнен алырға килгән зат: "Был башҡа кешенән һатып алынған бала бит", - тип, йәнәһе лә, быға алдана... Бынан тыш, шайтан алыштырмаһын йә күҙ теймәһен өсөн балаға Эталмаҫ, Этййылмаҫ тигән исемдәр ҙә биргәндәр (йәнәһе, эт тә алмаҫ, эт тә ашамаҫ кешенең шайтанға ла кәрәге юҡ). Тамыры шундай исемдән торған бик боронғо Эталмаҫов фамилиялары ла осрай. Туҡай (туҡ булһын), Көрәй (көр булһын) тигән исемдәр ҙә борон булған.

Шулай уҡ ата-әсә балаһының бай булыуын теләп биргән Байморат, Байгилде, Дәүләткилде һымаҡ бихисап исемдәр бар. Ҡасандыр ҡаҙаҡтар йәшәгән ерҙә хеҙмәт итергә тура килгәйне. Уларҙың да күп кенә исемдәре шул боронғо замандан һаҡланып килә. Түләгән, Саҡтаған (һаҡлаған), Ансатбай (анһат бағып китһен, мәғәнәһендә), Бәхет, Шатлыҡ, Алҡыш, Жомарт (йомарт) исемле ҡаҙаҡ кешеләрен йыш ҡына осратырға була.

Бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙың хатта шайтанды ерәндереү өсөн уйлап сығарған исемдәре лә булған. "Һаҫыҡбай", "Букбаш", "Буҡай", "Кәкәй" тигән исемдәр, әлбиттә, хәҙер ишетелмәй, әммә тарихыбыҙҙа шундай осор булыуын инҡар итә алмайбыҙ.

Ғаиләлә артабанғы бала тыуыуын теләмәй йә иһә, малай көтөп тә, ҡыҙ бала тыуа икән, уға Артыҡбикә, Яңылбикә (яңылыш тыуған йәнәһе), Дәриға (үкенес) һымаҡ исемдәр биреү йолаһы ошо көнгәсә һаҡланып килгән. Әле йәш ҡыҙҙарҙа булмаһа ла, шундай исемле олораҡ йәштәге инәйҙәрҙе йыш ҡына осратырға тура килә. Хатта бөгөнгәсә шул ырымға ышанған кешеләр бар. Йәнәһе лә, ҡыҙҙы шул исем менән атаһаң, киләһе бала малай буласаҡ... Шуға ҡарата аныҡ миҫалдар ҙа килтерергә ярата улар. Сираттағы ҡыҙҙарына Яңылбикә тигән исем ҡушҡандан һуң, Исмәғил йә Риза исемле малайҙары тыуған ғаиләләрҙе мин дә беләм. Әммә шул уҡ ваҡытта Яңылбикәнән һуң Алтынбикә, Рәсимә һымаҡ һылыуҙары донъяға килгән осраҡтар менән дә танышмын. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, былдай ихтималлыҡ - 50х50 процент.

Сабыйҙы "ен алыштырмаһын өсөн" дә бер еңел ысул бар: балаға "запас исем" биреү йолаһы. Әле булһа һаҡланып килә (йәнәһе, ана шул "ялған" исемгә алданып, шайтан аҙашып китә). Ошо хаҡта минең менән фекер алышҡан юғары гына дәрәжәле бер хәҙрәт:"...Былдай йолаларҙың төптән дөрөҫ булмауы, хатта зыянлы булыуы хаҡында иҫкәртеүҙәргә лә ҡарамай, балаһына яңы (өҫтәлмә) исем ҡуштырырға хатта дүртәр-бишәр мәртәбә мәсеткә килгән ата-әсәләр бар!.." - тип һөйләгәйне.

Бәғзе берәүҙәрҙең: "Нимәһе дөрөҫ түгел быһың, нимәһе зыянлы?" - тигән һорауы булыуына шигем юҡ. Ошо һорауға яуап бирер өсөн, әлбиттә, Аллаһ Тәғәләнең Изге Ҡөрьән аяттарына, Уның илсеһе бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үәссәләм һүҙҙәренә таянырға тейешбеҙ. Бәйғәмбәр с.ғ.с. балаларҙы, ысынлап та, матур исем менән атауҙы хуплаған. Хатта яман мәғәнәле исемдәрҙе яҡшыға алыштырырға ла кәңәш иткән. Әммә сабыйҙың исеме уның артабанғы яҙмышында ниндәйҙер роль үтәүен күҙ уңында тотмаған. Киреһенсә, Аллаһ Тәғәлә кешелек донъяһын барлыҡҡа килтереүҙән күпкә алдараҡ һәммәбеҙ өсөн яҙып ҡуйған тәҡдиргә һис икеләнеүһеҙ ышанырға ҡушҡан. Тәҡдиргә ышаныу - иман шарттарының береһе. Әҙәм балаһы менән ни булыры Аллаһ Тәғәлә тарафынан кеше тыумаҫ элек үк яҙылып ҡуйылған...

Шулай итеп, ниндәй генә булһа ла, нимә генә аңлатһа ла, борондан һаҡланып килгән исемдәребеҙ барыһы ла тиерлек матур. Уларҙы балаларыбыҙға ла бирәйек. Ундай исемдәр тыйылмаған. Тик теге йәки был исемде бала яҙмышына йоғонто яһаһын тигән ниәт менән ҡушыу ғына ярамай, тимәксемен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

**Редакциянан: Ысынында, беҙҙең халыҡтағы бик күп йолалар, ырымдар, им-томдар изгелеккә, яҡшылыҡҡа ышаныуға, кешеләрҙе яманлыҡтан ҡурсыуға арналған. Был шул уҡ, кешенең исеме уның яҙмышына йоғонто яһай, тигән инаныуға ла ҡағыла, йәғни ата-әсәне балаһына теләһә ниндәй сит исем ҡушыуҙан иҫкәртә, тип аңларға кәрәктер. Һәр хәлдә, гәзитебеҙ биттәрендә был турала элек тә сығыштар булғыланы һәм ошолайыраҡ һығымта яһалды: балаларҙы, йәштәрҙе яманлыҡтан, тормош юлында яңылышыуҙарҙан ҡурсалау өсөн халҡыбыҙ төрлө ырымдар, йолалар уйлап сығарған һәм уларҙың тәрбиәүи йоғонтоһон юғары баһалаған. Бөгөнгө көнгә тиклем былдай милли йолаларыбыҙ рухи мәҙәниәтебеҙҙең нигеҙен тәшкил итә, улар дини йолаларыбыҙ менән йәнәш йәшәй. Ә һеҙҙә ниндәй фекерҙәр бар, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ?**

✓ *Бәхетле булыр өсөн күп кәрәкмәй миңә, ғаиләм, туғандарым, яратҡан кешеләрем һау-сәләмәт булһа, эргәмдә булһа, шул етә. Һин үҙеңде яратмайһың, үҙеңде нығыраҡ ҡайғырт, тип әйткәндәре бар. Аңламайым мин ундайҙарҙы.*



ИЖАДХАНА

**Шекспирҙың, тормош - ул театр, кешеләр унда актерҙар, тигән ҡанатлы һүҙҙәрен йыш ҡабатлайбыҙ. Тимәк, нисек кенә ҡыҙыҡ тойолмаһын, актерҙар тормошта һәм сәхнәлә йәшәп, ике тормош кисерә булып сыға. Шуғалыр ҙа, бәлки, улар беҙҙең өсөн сәйерерәк тойола. Ғәҙәттә, уларға беҙ һоҡланып ҡарайбыҙ, һәр беребеҙҙең яратҡан актер-актрисабыҙ бар. Уларға оҡшарға тырышыр инең дә, хәлдән килмәй, сөнки айырым ҡамырҙан баҫылған бит улар. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театрының йәш актрисаһы Зәлиә ХАФИЗОВА менән әңгәмәләшкәндә беҙҙең өсөн ят булған сәхнә тормошо серҙәре бер аҙ асылғандай тойола.**

# БӘХЕТЛЕ КЕШЕЛӘР ЭРГӘҺЕНДӘ...

## мин дә бәхетлемен



### Премьера - ул үҫеш баҫҡысы

Актерҙар премьераларҙы көтөп йәшәй, сөнки һәр премьера - ул яңы һулыш, яңы тетрәнеү, бәлки, һынауҙыр. Ғөмүмән, тормошта ла шулай бит: һәр саҡ яңылыҡтар көтөп, яҡшыға өмөт менән йәшәйбеҙ. Баныу Ҡаһарманованың әҫәре буйынса ҡуйылған премьерала шахтер ҡатыны ролен башҡарҙым, сәхнәлә үҙемде иркен тоттом, кисерештәремде героиня образына тулыһынса күсерергә тырыштым. Конфликттар һәр ғаиләлә була, уларҙы юҡ тип йәшереп булмай, был ғәҙәти, тәбиғи хәл. Характерым уйнаған образға оҡшаған: берәйһе минең менән ирешә, ҡаңғыра башлаһа, өндәшмәйенсә, күҙенә ҡарап тик ултырам, сөнки үҙем конфликтлы кеше түгелмен - ирешмәйем дә, талашмайым да, үҙемә бикләнәм. Былай эшләргә ярамайҙыр ҙа, бәлки, әммә мин шундай кеше, икенсе төрлө була алмайым. Беренсе сәхнәлә шуға оҡшаш конфликтлы хәл килеп тыуа. Әҫәрҙе уҡыған ваҡытта уҡ был ролде миңә бирерҙәрен күңелем менән һиҙҙем. Уйнауға килгәндә, үҙемдән күберәкте өмөт иткәйнем. Ә ниңә, ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо ла булырға тейеш, был сифат та бөтәбеҙгә лә хас икәнен онотмайыҡ. Ана шул ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо бер нисә спектаклдән һуң образды урынына ултырта. Гел генә баш әйләнеп, ысынбарлыҡтағы мөмкинлектәреңде теләгән уйҙарың менән бутап, эйфорияға бирелеп йәшәһәң, үҫеш булмай.

### Бала саҡ, йәшлек...

Ҡыҙ фамилиям - Төрөпҡолова. Ейәнсура районы Иҙелбәк ауылында тыуып үҫтем. Ғаиләлә биш бала булдыҡ, мин бишенсеһе - иң бәләкәсе. Беҙҙе атай менән әсәй яратып, бик матур үҫтерҙеләр. Атайым мин беренсе класта уҡығанда мәрхүм булып ҡалды, әммә атайһыҙ үҫһәм дә, атайлы һәр көнөмдө иҫләйем. Мәктәптә уҡыған саҡтағы күп нәмәләр онотолған, ә атайлы сағымды һис онотмайым. Минең Золушкам, тип кенә йөрөттө атайым. Әсәйемдең сабырлығына, ныҡлығына һоҡланам, яңғыҙы биш баланы аяҡҡа баҫтырҙы. 11 класты ауылда тамамланым, шунан сәнғәт академияһында уҡыным. Ҡурсаҡ театры өсөн әҙерләнеләр беҙҙе, аҙаҡ шунда эшкә барырға тейеш инек, әммә яҙмыш ҡушыуы буйынса Сибай башҡорт драма театрында эшләргә яҙҙы. Театр актерҙарға ҡытлыҡ кисергән мәлгә тура килдем, һөйләштек, резюмемды күрһәттем һәм, Хоҙайҙың "Амин" тигән мәленә тура килгәндер, мине шундуҡ эшкә алдылар.

Башта оялсанлығым арҡаһында ҡыйынлыҡтар булды, әлбиттә. Хатта һаулыҡ һорашырға ла ояла торғайным. Эшләй башлап, кейәүгә сығып, бала табып, әсәй булғас ҡына үҙемде иркенерәк тоя башланым. Ирем театрға ҡағылышы булмаған һөнәр кешеһе - полицияла юл хәрәкәте инспекторы булып эшләй. Икеләнмәй әйтә алам: ғаиләмде лә, эшемде лә яратам. Ғаилә, әлбиттә, беренсе урында, әммә ижад ҡомары талап иткән күңел эшенән үҙе теләп ваз кискәндәр бик һирәк. Ижад, ғөмүмән, сәнғәт юлы, кешене үҙенә әсир итһә, ситкә ебәрмәй, ул һине аңлайышһыҙ ләззәт тойғоһо менән үҙенә бәйләп тота, ебәрмәй.

### Тәүге ролем

Тәүге ролем Сәлихйән Әфләтүнов ҡуйған "Ҡәрҙәштәр" спектаклендә Маруся роле булды. Еңел бирелмәне был роль, героиням ирек һөйгән әрһеҙ ҡыҙыҡай, характеры минең булмышыма бөтөнләй оҡшамаған. Өйрәндем, уйнаным, тәүге һынауҙы үттем. Актерлыҡ бит ул был һөнәрҙе һайлаған кешенең булмышы ғына түгел, ул эш урыны ла икәнде онотorға ярамай. Сәхнә тормошонда йәшәй торғас, драмаларҙы уйнарға яратыуымды аңланым. Күп кисерештәремде эске донъямда бикләп тотҡас, спектаклдәрҙә лә еңел генә илай алам, бөтөн йыйылған хистәремде күҙ йәштәре менән бергә тышҡа сығарам. Әле бына "Шахтер" спектакленең финалында ла күҙ йәштәренән быуылам. Бер туған ағайым Магаданда шахтер булып эшләй. Ҡурҡыныс эш бит ул, ағайым иҫән-һау ғына булһын, тип, йыш борсолам. Бәлки шуғалыр ҙа был ролде күңелемә яҡын ҡабул иттем.

Һәр уйнаған яңы роль - ул әле һиңә таныш булмаған яҙмыш, һинең кеүек әҙәм балаһының башҡа шарттарҙағы тормошо. Театрҙа эшләү дәүеремдә әллә күпме шундай яҙмыштарҙы сағылдырырға тура килде, нисә ролдә уйнағанымдың иҫәбен һанағаным да юҡ. Әлегә оло йәштәгеләр ролен уйнағаным юҡ, шулай ҙа ауыл тормошонан таныш булған берәй әбей ролен уйнап ҡарағым килә. Тормош бит, ҡасан да булһа, теләйһеңме-юҡмы, барыбер уйнарға тура киләсәк, әлегә ауылдағы оло инәйҙәрҙең холоҡ-фиғелен күҙәтеп, спектаклдәрҙә ҡулланыу өсөн кәрәкле һыҙаттарын күңелемә һеңдереп йөрөйөм. Бала саҡ хәтирәләрен уятып, бала ролен дә уйнап ҡарағы килә. Тамашасыны алдап булмай, оло тормошҡа барыбыҙ ҙа бала саҡ иленән килгәнбеҙ, шуға бала ролен уйнау мауыҡтырғыс тойола. Ғөмүмән, сәхнә тормошонда тамашасы үҙ тормошо сағылышын да күрә, шуға уларҙың зауығын аңлап, ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн көндәлек тормошта кешеләрҙе күҙәтергә яратам.

### Актер һәм режиссер

Актерҙар тик режиссерҙың әйткәнен генә үтәп уйнаһа, тулыһынса актер була алмайҙыр. Режиссер, әлбиттә, образды үҙенсә күҙаллай, ә һин икенсе төрлө уйлайһың, ҡараштар йөҙ процентҡа тап килмәүе лә мөмкин, нисек инде, программаға көйләнгән робот һымаҡ, әйткәнде ҡабатлап ҡына уйнамаҡ кәрәк. Үҙемдең тәҡдимдәрем булһа, режиссерға еткерергә тырышам, ул ҡабул итһә, уртаҡ фекергә киләбеҙ. Бәлки, күп осраҡтарҙа үҙ фекеремде үткәрергә тырышамдыр ҙа, әммә компромис табылмаһа, спектаклде төҙөп булмай. Эш бит гел сәхнәлә режиссер ҡатнашлығында бармай, өйгә лә эйәреп ҡайта, артыңдан эйәреп йөрөй. Өйҙә режиссер юҡ, текстарҙы үҙеңсә ятлайһың, был ролде мин нисегерәк күҙ алдына килтерәм, тип, үҙеңсә фекер йөрөтөргә тура килә. Кешеләрҙе күҙәтеп йөрөгәндә кемдәлер булған сифаттарҙы ҡай саҡ сәхнәгә күсерәм, бөтәһе лә үҙеңдән генә сыҡмай бит ул, режиссер әйткәндәрҙе үтәп, үҙеңдең кисерештәреңде ҡушып, матур образ алып килеп сығарырға була. Яңғыҙың ғына сәхнәлә булғанда әллә нәмәләр эшләргә лә булыр ине, ләкин бит һинең янда партнерҙар була, улар менән бер тулҡынға көйләнергә, тулы ансамбль барлыҡҡа килтерергә кәрәк.

### Әсәйем өсөн уҡыным

Мәктәптә русса уҡығас, русса фекерләгәс, башҡортса шиғырҙарҙы, поэмаларҙы, проза әҫәрҙәрен ятлауы бик ауыр була торғайны. Институтта сәхнә теленән уҡытҡан Әхтәм ағай Абушахманов, күберәк башҡортса китаптар уҡы, бөтәһе лә үҙенәнүҙе килеп сығасаҡ, тип өйрәтте. Уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, Зәйнәб Биишеваның трилогияһын тулыһынса уҡыным. Ныҡ оҡшаны ул миңә, бер һулышта уҡып бөттөм. Һәм, ысынлап та, башҡортса шиғырҙарҙы еңел ятлай башланым. Тырышлыҡтарым бушҡа булманы, институтты Ҡыҙыл дипломға бөтөрҙөм. Әле уйлайым да, шундай фекергә киләм: үҙемдән дә бигерәк әсәйемдең күңеле булһын, ул ҡыуанһын, тип тырыштым. Әле лә сәхнәлә әсәйҙәр темаһы булһа, ныҡ тулҡынланам, ундай саҡта бик ҡыйын була. Ғөмүмән, кеше ҡаты күңелле булырға тейеш түгел, тип уйлайым. Сәхнәлә уйнаған ролдәр, теләйһеңме-юҡмы, артыңдан эйәреп, тормошта ла йәшәй. Ғаиләлә, эштә яҡындарың, коллегаларың менән булған мөнәсәбәттәрҙең ҡәҙерен белергә өйрәнергә кәрәк. Әлеге пандемия һымаҡ һынауҙарҙы Хоҙай беҙгә һынамаҡҡа бирәлер: кешеләр бер-берећенә иғтибар итмәй башланы бит. Юҡҡа түгелдер, тим, еңел булмаған хәүефле осорҙо аңлап ҡабул итергә, үҙеңде, туғандарыңды һаҡларға кәрәк.

### Актер һәм тамашасы

Актер өсөн иң мөһиме - тамашасыларҙың өмөтөн аҡлау. Премьераларҙан һуң нығыраҡ уйландыра: ҡабул итерҙәрме, юҡмы? Сәхнәлә уйнағанда тамашасыны күрмәйһең дә. Йөҙҙәргә ҡараһаң, уйнаған образың юҡҡа сыға. Дүртенсе стена тигән төшөнсә бар: өс стена сәхнәлә, тамашасылар дүртенсе стена булып, бөтөнлөк барлыҡҡа килтерә. Беҙ, актерҙар, ана шул дүрт стена эсендә йәшәйбеҙ, уйнайбыҙ, образдар тыуҙырабыҙ. Әлбиттә, тамашасыға иғтибар, хөрмәт күберәк бүленә. Мәҫәлән, тамашасыға арт менән оҙаҡ тормаҫҡа кәрәк, улар һәр һүҙеңде аныҡ ишетһендәр, һөйләгәнеңдән мәғәнәһен аңлаһындар. Тауыштары сәхнә төпкөлөнән дә асыҡ ишетелгән, булмыштары бөтөн сәхнәне тултырған мэтрҙар бар. Был инде юғары оҫталыҡ!

### Ауыл һәм ҡала тамашасыһы

Гастролдәрҙәге һәм театрҙағы тамашасылар бер-береһенән ныҡ айырыла. Ауылдан-ауылға йөрөгәндә көн дә яңы тамашасы менән осрашаһың. Улар шул тиклем ихлас ҡарайҙар. Ҡала кешеһе бит ҡасан теләй, шул ваҡытта килеп ҡарай ала спектаклдәрҙе, ауылдарҙа ундай мөмкинлек юҡ, шуғамы икән, улар яңы һулышҡа һыуһаған кеүек ҡарайҙар. Уларҙың күңеле булһа, беҙгә лә рәхәт, ҡанатланып китәбеҙ, уларҙың рәхәтләнеп көлә-көлә ҡарауҙарынан ҡәнәғәтлек кисерәбеҙ. Әлбиттә, Сибайҙа ла спектакль һайын бер үк тамашасы йөрөмәй: ҡай саҡ тыныс, тын да алмай ҡараған кешеләр килә, шул тиклем тынлыҡ ҡолаҡты ярғандай тойола, икенсе юлы хисле, шаулап торған тамашасылар була, бер үк спектаклде төрлө аудитория төрлөсә ҡабул итә.

### Бәхетле булыу өсөн...

Сәнғәт институтында рәхәтләнеп уҡыным, сөнки уҡыу тәртибе оҡшаны. Аптырай торғайным: нисек инде, түләүһеҙ уҡып та, бейеү, сәхнә хәрәкәте, актер оҫталығы дәрестәренә йөрөмәҫкә мөмкин. Уҡырға ялҡауҙары килгәс, икенсе берәй кешенең урынын тотмаһындар, тип, йәнем көйә торғайны хатта. Үҙем һәр бер дәрескә ҡыуанып бара инем. Бигерәк тә сәхнә хәрәкәттәре дәрестәрен яраттым. Баштүбән йөрөйһөң, өҫтәл аша һикерәһең, тормошта ҡулланa һалып бармаған хәрәкәттәр яһайһың - ҡыҙыҡ та инде! Уҡытыусыбыҙ Лариса Евгеньевна Адушева мәрхүмә берәй хәрәкәт яһарға кәрәклеген әйтә лә, хәҙер беҙгә Зәлиә эшләп күрһәтә, ти. Ә ни эшләп мин, тип аптырап китәм. Сөнки һинең хәлеңдән килә, ти. Ҡурҡам, сөнки әле берәү ҙә эшләп ҡарамаған. Уҡытыусы ышаныс белдергәс, ҡурҡҡан хәлдә лә, ни булһа ла булыр, тим дә, эшләп күрһәтәм. Килеп сыҡһа, ҡәнәғәтлек тойғоһо солғап ала, тағы ла нығыраҡ тырышам. Шундай уҡытыусыларым булғанға ныҡ рәхмәтлемен. Икенсе институттарҙан дуҫтарыбыҙ килһә, беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ менән ҡосаҡлашып һаулыҡ һорашыуыбыҙға аптырайҙар, һеҙ ҡалай бер ғаилә һымаҡ йәшәйһегеҙ, тиҙәр ине. Хәҙер ҙә студент йылдарым иҫемә төшә, дүрт йылыңды яңынан уҡы, тиһәләр, ул бәхетле мәлдәремде ҡабатлап, бик теләп уҡыр инем. Бәхетле булыр өсөн күп кәрәкмәй миңә, ғаиләм, туғандарым, яратҡан кешеләрем һау-сәләмәт булһа, эргәмдә булһа, шул етә. Һин үҙеңде яратмайһың, үҙеңде нығыраҡ ҡайғырт, тип әйткәндәре бар. Аңламайым мин ундайҙарҙы, эргәмдәге бәхетле кешеләр менән генә үҙемде бәхетле тоям мин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ актерҙарҙы, ғәҙәттә, тышҡы ҡиәфәттәре буйынса баһалайбыҙ. Фанаттар яратҡан артистарының фотоларын стеналарға элеп ҡуя ла шуның менән ҡәнәғәт, кумирының эске донъяһы уны артыҡ ҡыҙыҡһындырмай. Ғөмүмән, тормошта ла шулай: кейемгә ҡарап баһалайбыҙ, кешенең эске донъяһына, уй-фекеренә, хис-тойғоларына иғтибар итә һалып бармайбыҙ, әммә кәрәк, сөнки камиллыҡтың сиге юҡ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН
яҙып алды.**

✔ *Уларҙы бала саҡтарынан башҡорт теленә, моңона, сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләп үҫтерҙек. Әле ейән-ейәнсәрҙәр һөйөү бәхетен татып, уларға ла уҙ тәрбиәбеҙҙе бирергә, башҡорт мөхитенә ылыҡтырып үҫтерергә ынтылып йәшәйбеҙ.*



*ИЖАДХАНА*

# МИН СӘНҒӘТ КЕШЕҺЕ,

## рухи байлыҡты өҫтөн ҡуйып йәшәйем...

**Бөгөн республикабыҙ театрҙары башҡорт халҡының милли мәҙәни мираҫы һағында торған звеноларҙың береһе. Был бурысҡа үҫеп килгән быуынды сәхнә сәнғәте аша тәрбиәләгән, донъяға ҡараш формалаштырырға, матурлыҡты күрә белергә өйрәткән М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ла бына инде өс тиҫтәнән ашыу йыл дауамында уҙ өлөшөн индерә килә. Ә Башҡортостандың халыҡ артисы Мәғәфүр УСМАНОВ театрға нигеҙ һалынғандың тәүге көндәренән баш ҡала тамашасыһы өсөн күңелен биреп хеҙмәт иткән актер. Ошо көндәрҙә Мәғәфүр Мәхмүт улы үҙенең 60 йәшлек юбилейын билдәләй һәм бөгөнгө әңгәмәлә уның менән сәнғәткә илткән юлдар, ғүмер буйы тоғро хеҙмәт иткән театры, баш ҡала тамашасыһы тураһында һөйләштек.**









➔ **Һөйләшеүҙе сәнғәт юлына илткән, шәхесегеҙгә ҙур йоғонто яһаған бала саҡ хәтирәләренән башлап китәйек.**

- Мин Башҡортостандың бик гүзәл тәбиғәтле төбәктәренең береһендә, Архангел районының Ҡыҙғы ауылында тыуғанмын. Мин беренсе синыфты тамамлауға ғаиләбеҙ Баҡалды тигән ауылға күсеп, ул заманда күпселеге урыҫтар төйәк иткән ауылда өс йыл йәшәнек тә, әсәйемдең тыуған ауылына - Тирәклегә килеп нығындыҡ. Бөгөн туғандарым менән ҡайтып йөрөр, балаларға олатай-өләсәй нигеҙе тип күрһәтер, күңел йылыһы табыр йортобоҙ ошо Тирәклелә. Шулай ҙа Баҡалды ауылы менән бәйләнештәр былай ғына тамам булманы әле: мин белемде тап ошо ауылдың ун йыллыҡ урыҫ мәктәбендә алдым.

Сәнғәт юлына илткән һәм минең булмышыма, киләсәгемә йоғонто яһаған хәтирәләр тураһында һөйләгәндә тәү сиратта һүҙҙе исемемдән башларға кәрәктер. Беҙ бала саҡта һәр өйҙә радио була торғайны һәм унан моңло башҡорт йырҙары яңғырап торҙо. Үҙе лә йырларға яратҡан әсәйем минә исемде аҙашым Мәғәфүр Хисмәтуллин хөрмәтенә ҡушҡырған. Беҙ ул саҡта радионы йотлоғоп тыңлай торғайныҡ, унда әленән-әле Мәғәфүр Хисмәтуллиндың йырҙары яңғырай, уның тормош иптәше Сөйөмбикә апай шундай матур итеп әкиәттәр уҡый ине. Был тапшырыуҙарҙы көтөп ала торғайныҡ. Бына шул осорҙон радио һәм телевидениеһы нәфис һүҙгә, сәхнә сәнғәтенә һоҡланыу, һөйөү уятҡандыр, тим инде.

Мәктәптә уҡып йөрөгәндә, 1978 йылда, ниндәйҙер гәзиттә Башҡорт дәүләт филармонияһына бейеүселәр һайлап алыуҙары тураһында иғлан биргәндәр. Минең ағайҙар индустриаль-педагогик техникумда уҡығанда бейеү ансамблендә шөғөлләнделәр. Улар әлеге иғланды күреп, мине һайлау турына әҙерләргә булып, һығылмалылыҡҡа, оҫталыҡҡа өйрәтә башланылар. Кәүҙәне әҙерәк дөрөҫ тоторға өйрәнгәс, бер нисә бейеү һалдырып, Өфөгә юлландым. Ике турҙан үттем. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе ҡала балалары, ҡала мәҙәниәт һарайҙарындағы бейеү түңәрәктәрендә шөғөлләнгәндәр, араларында ата-әсәләре сәнғәт кешеләре булғандары ла бар. Ансамблгә 15 егет, 15 ҡыҙ һайлап алдылар, мин өсөнсө турҙы үтә алмай, кире ҡайтып киттем. Әммә нәҡ ошо осорҙа күңелемдә "Мин барыбер артист булам!" тигән уй ныҡлы урын алды. Беҙҙең Тирәклелә ҡурайсылар күп кенә ине. Минә Иҡсан бабайым ҡурай уйнарға өйрәтте. Өйҙә түрбашта ашарға бешереп йөрөгән әсәйемде йырлатам да, уға ҡушылып ҡурайҙа көйөн сығарып маташам.

Шулай итеп, мәктәпте тамамлағандан һуң мин, сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә уҡырға инәм, тип, Өфөгә юлландым. Мәшһүр ҡурайсы Ғата Сөләймәнов мине тыңланы, йырлатып ҡараны, миндә баритон тауыш икәнен асыҡлағас, ул осорҙа училищела вокал бүлеген етәкләгән Рәйсә Әхмәҙиеваға алып китте. Рәйсә Рәхим ҡыҙы мине йырлатып та, нотaларҙы айырыу-айырмауымды ла тикшереп ҡараны ла, вокал бүлегенә уҡырға алырға булды. Ғата ағай ҙа вокал бүлеген һайларға күндерҙе, бер үк ваҡытта ҡурайҙа уйнарға өйрәнеү мөмкинлегең дә буласаҡ, тине.

Шулай ҙа бар тормошомдо бағышлар һөнәремә Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов ойоштороған әҙерлек курстары аша килдем. Көҙгөһөн ошо курсты тамамлаған студенттар араһынан һайлап алынған драма артистары төркөмөнә мин дә эләктем һәм Рифҡәт Исрафилов, Олег Ханов, Айбулат Хәйбуллин Гөлли Мөбәрәкова, Тамара Хоҙайбирҙина, Александр Дыбо кеүек данлыҡлы уҡытыусыларҙың ҡулы аҫтында белем алдым. Шулай итеп, мин 1987 йылда сәнғәт институтын тамамлап, курсташым Эмма Ваһапова менән Сибай ҡалаһына эшкә юлландыҡ. Ике йыл Сибай театры мәктәбен үттем шулай.

➔ **Урал аръяғының баш ҡалаһы һеҙҙе нисек ҡабул итте? Яңы урын, кешеләр һәм хатта тәбиғәт тә икенсе төрлө...**

- Бер яҡтан, мине барыһы ла ҡыҙыҡтырҙы, беҙ бит Назар Нәжми әйтмешләй, "капҡа артынан ары донъя күргән" кешеләр түгел инек. Уҡыған осорҙа концерттар менән йыш йөрөһәк тә, Архангел - Өфө араһынан ары киткән юҡ ине. Минең өсөн Сибай театры менән республика райондары ауылдары буйлап гастролдәрҙә йөрөү ҙур тәжрибә мәктәбе булды. Ә 1989 йылда ТЮЗ тип асылған, хәҙер Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына саҡырыу алып, кире Өфөгә юлландым. Яңы театрҙың эш башлап торған ғына сағы, уны Олег Ханов етәкләй. Башҡорт академия драма театрынан уның менән бергә Әхтәм Абушахманов, Роза Кәримова, Сәүиә Сираева, Әнфисә Хафизова, Шәүрә Дилмөхәмәтова кеүек сәхнә оҫталары ла бында күскән. Йәш театр коллективы "Иҙеүкәй менән Мораҙым" спектаклен сәхнәгә сығарыу буйынса эш башлаған, шунда ҡушылып киттем. Бер йыл тирәһе эшләгәндән һуң студия булып, артистар йыйылып, театр барлыҡҡа килде. Әлегә тиклем шул театрға тоғро булып эшләп йөрөйөм.

➔ **Тимәк, һеҙ Милли йәштәр театрына нигеҙ һалынған йылдарҙан эшләйһегеҙ. Үткәне менән бөгөнгөһөн сағыштыра ла алаһығыҙҙыр?**

- Театр матур сәхнә әҫәрҙәре булғанда ғына үҫә. Юғары кимәлле әҫәрһеҙ театр әллә ни алға китә алмай. Был йәһәттән беҙ уңышлы коллектив булдыҡ, тиергә мөмкин: бик матур әҫәрҙәр сығарҙыҡ сәхнәгә. Мостай Кәрим исемен йөрөткәс, уның ижадына ҙур иғтибар бүленде. Театрҙың үҫеше яҡшы әҫәр һәм яҡшы режиссерҙан тора, тетрәндергес спектаклгә халыҡ та ҡыҙыҡһынып килә. Беҙҙең театрҙа заманында Флорид Бүләковтың "Дала ҡисаһы" тигән бик шәп әҫәре ҡуйылды, ул башҡорт халҡының бөйөк шәхестәре тураһында ине һәм бигерәк тә балаларға бик тә фәһемле, донъяға ҡараштарын киңәйтер спектакль ине. Уны Азат Нәҙерголов ҡуйғайны. Йәланы дауам итеп, шул спектакль әле лә уйналһа, гел телефонға текәлеп, китап уҡымаған хәҙерге балалар өсөн ҡалай ҙа отошло булыр ине, тип уйланыла. Бына шундай әҫәрҙәр һәм йолалар кәрәк беҙгә. Тамашасы хәҙер ҡайҙа ниндәй спектакль барыуын яҡшы айыра. Шөкөр, пандемия осоронда ла өфөләр беҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырманы, йөрөнө. Был инде театрҙың уҙ тамашасыһы бар, тигәнде раҫлай.

Театрыбыҙҙа башҡорт һәм рус труппалары булғас, сәхнәне бүлешеп эшләйбеҙ. Көндөҙ балалар өсөн, кисен өлкәндәргә тәғәйенләнгән спектаклдәр ҡуябыҙ. Эргә-тирәләге ауылдарға, баш ҡала мәктәптәренә барып та уйнап киләбеҙ. Һуңғы йылдарҙа ситкә сығып йөрөү ауырлашты, фестивалдәрҙә ҡатнашыу, ойоштороу ҙа ҡатмарлашты. Элек фестивалдәр йышыраҡ ойошторола ине, сит төбәктәрҙән дә коллегалар килә, аралаша, фекер алыша инек. Шул ваҡыттар һағындыра. Унда тәнҡит тә ишетәһең, хатта махсус тәнҡитселәр саҡырыла ине. Тәнҡит, тигәндәй. Элек беҙҙең театрҙарҙа Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты студенттары спектакль премьераларынан һуң артистарға уҙ фекерҙәрен еткереү йолаһы булды. Уҡытыусылары, мәрхүм профессор Тимерғәли Килмөхәмәтов рецензиялар яҙып, гәзиттәрҙә баҫтыра торғайны. Бөгөн дә тамашасынан бына шулай баһа-яуап ишетеүгә мохтажбыҙ, был уҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнап йәшәмәү өсөн бик мөһим.

➔ **Һеҙҙең театрҙа балалар өсөн спектаклдәр бик йыш ҡуйыла. Тик уларҙың башҡортсалары шулай ҙа һирәгерәк...**

- Был мөһим мәсьәлә һәм тейешле иғтибар, хәл ителеүҙе талап итә. Театрыбыҙҙа рус труппаһы ла эшләгәс, беҙ күп кенә балалар спектаклдәрен русса уйнайбыҙ. Башҡортсаһы ла бар, шулай ҙа күберәк балалар ҡарай алһын һәм аҡса йыйыуы ла еңелерәк булһын типтер, русса тамашалар йышыраҡ була. Бына ошо көндәрҙә генә Шамонино ауылы мәктәбенә барып, "Чиполлино" спектаклен 300-сө тапҡыр уйнап ҡайттыҡ. Был башҡорт труппаһының оҙаҡ барған спектаклдәренең береһе, уны русса уйнайбыҙ. Әле мәктәптәр "Үлмәҫбай"ҙы алып килеүҙе һорайҙар, әммә ул оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған спектакль һәм балалар өсөн ауырыраҡ. Башҡорт әкиәттәрендәге Аҡъял батыр, Һоросай батыр булып та уйнарға теләк бар ҙа бит...

➔ **Һеҙҙең юлды балаларығыҙ дауам итәме?**

- Уларҙы бала саҡтарынан башҡорт теленә, моңона, сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләп үҫтерҙек. Әммә улым - иҡтисадсы, ә ҡыҙым хоҡуҡ белгесе булыуҙы уҙ итте. Әле хәләл ефетем Зәлифә менән ейән-ейәнсәрҙәр һөйөү бәхетен татып, уларға ла уҙ тәрбиәбеҙҙе бирергә, башҡорт мөхитенә ылыҡтырып үҫтерергә ынтылып йәшәйбеҙ. Мәктәп йәшендәгеләре Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала мәктәбендә уҡый, бәләкәстәре балалар баҡсаһына йөрөй. Йома һыйын беҙгә киләләр. Мин сәнғәт кешеһе, ғүмер буйы рухи байлыҡты өҫтөн ҡуйып йәшәнем, йәшәйем. Бар ғүмеремде арнаған һөнәрем, үҙем тырышып һалған юлым, ынтылышым бар. Балаларым нәҡ мин барған юлды дауам итмәһә лә, ошо мөхиттә рухи тәрбиә алып үҫтеләр...

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Бәләкәй генә ауылда шыңғырлап торған йорттар һалып инеп, заманса йыһазландырып, затлы машиналарҙа йөрөгән, ысын мәғәнәһендә етеш тормошҡа ынтылған, эшһөйәр халыҡ йәшәй бында.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НИНДӘЙ ВИТАМИН ЕТЕШМӘЙ?

■ Тәбиғи яҡтылыҡ етешмәүе, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау кеүек үк, һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Ҡояш нурҙары аҫтында йышыраҡ йөрөһәң, матдәләр алышыныуы, аш һеңдереү яҡшыра, организмда һөйәк системаһы, остеопороз, кариес, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмауы D витамины барлыҡҡа килә. Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины етешмәү һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

■ Психологтар фекеренсә, ниндәй ҡиәфәттә йоҡлауына ҡарап, кешенең характер үҙенсәлектәрен, ҡурҡыуҙарын һәм теләктәрен асыҡларға була. Яралғы кеүек йомарланып йоҡлаусыларға наҙ һәм йылылыҡ етешмәй. Үҙ-үҙенә ныҡ ышанған һәм иғтибар үҙәгендә булырға ятраҡан кешеләр арҡаһында йоҡлай. Эстәренә ятып йоҡлаусыларҙың хәтере тиҙ генә ҡалып барыусан, улар һәр ваҡыт ни тураһындалыр борсолоп йәшәй. Ҡабырғаһында йоҡларға яратыусылар тормошҡа тиҙ яраҡлаша белә. Уң ҡабырғаһында йоҡлаусының умыртҡа бағанаһына ауырлыҡ тигеҙ төшә, йөрәккә лә һөйбәт, тән дә ял итә. Һул ҡабырғала, ғалимдар фекеренсә, ижади шәхестәр йоҡлай. Улар башҡалар менән тиҙ уртаҡ тел таба, йәмғиәттәге урындары ла ышанысл.

■ Кеше олоғайған һайын һөйәктәр кальций етешмәү арҡаһында муртҡа әйләнә, йомшара башлай һәм остеопороз барлыҡҡа килә. Күбеһенсә уның менән ҡатын-ҡыҙҙар яфалана, сөнки улар 35 йәштән һуң һөйәк массаһының йылына яҡынса 1 процентын юғалта. Менопаузанан һуң был юғалтыу икеләтә арта, әтәмәке тартыу һәм спиртлы эсемлектәр ҡулланыу организмдың тағы ла нығыраҡ ҡаҡшауына килтерә. Был сирҙән һаҡланыу өсөн һөт аҙыҡтарын йыш ҡулланырға кәрәк (татлы йогурттар һәм туңдырма һаналмай). Кальций сәтләүектәрҙә, кәбеҫтәлә, минераль һыуҙа, балыҡта күп. Организмда кальций үҙләштерелһен өсөн етерлек кимәлдә D витамины һәм магний булырға тейеш.

■ АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән яғынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыумау беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

АУЫЛДАРҘА ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

**Һаҡмар буйында үҫкән Йылайыр ҡыҙы булһам да, Сәләх ауылын быйыл тәүгә барып күрергә тура килде. Беҙҙең Юлдыбай түңгәүерҙәр ауылы булһа, Сәләх - үҫәргәндәр төбәге. Йылайырҙан Һабырға илткән юлдан бараһың унда. Ике яҡлап мөһабәт, һомғол буйлы һалдаттарҙай ҡалҡҡан төҙ ҡарағайҙар ғорур теҙелешеп ҡаршы ала. Бер үргә, бер түбәнгә артылып, 17 саҡырымдай ара үткәс, барып та етәһең. Күрше-тирәлә Ҡаҙырша, Ашҡаҙар, Һабыр, Һаҡтау, Йомағужа ауылдары ята. Шәмсетдин тигән бөткән ауыл да Сәләхкә яҡын.**

# ЭШЕБЕҘ ҘӘ, АШЫБЫҘ ҘА...

## ожмахҡа тиң ошо ерҙә





### Сәләхтә...

Сәләх Башҡортостанда сағыштырмаса йәш ауылдарҙың береһе. 1927 йылда нигеҙ һалына. Ошо ауылда тыуып үҫкән уҡытыусы, тарихсы, журналист Фәрит Рәмов әйтеүенсә, уның атаһы Абдулла ҡарт етәкселегендә унлап кеше Үрге Ғәле ауылынан ошо ергә килеп төйәкләнә. Араларында иң олоһо Сәләх Мортаев булғас, ауылға ла уның исемен бирәләр. Быйыл Сәләх ауылының барлыҡҡа килеүенә теп-теүәл 95 йыл. Ауылда мәсет, фельдшер-акушерлыҡ пункты, клуб эшләй. Саң-туҙанлы оло юлдан ситтә, урман ҡосағына һыйынып ҡына ултырған ауылдың тәбиғәтен ожмах мөйөшөләр тиһәң дә арттырыу булмаҫ. Ҡош-ҡортҡа, кейектәргә, һәр төрлө үлән-сәскәләргә, ағас-ҡыуаҡтарға бай был төбәкте хатта кеше аяғы баҫмаған ер менән дә сағыштырырға мөмкин. Таллыҡ, муйыллыҡ аша зәңгәр таҫмалай һуҙылған Бараҡал, Бараҡалтиле, Һыҙғы йылғалары, мөһабәт ҡарағайлы, олпат имәнле ҡара урмандар, әкиәттәрҙә, мәшһүр эпостарҙа һүрәтләнгән "олатайҙай айыуҙар", "һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән, ҡолағы миңле төлкөләр", "майлап һалған ҡайыштай йыланлы", "оя яһап, түл йәйер" ерҙәрҙең береһе ул Сәләх.

Ауыл ҙур түгел. Урам ярым ғына. Ошо урам ярымлыҡ 42 йортта 162 кеше йәшәй. 29 трактор, 27 еңел машина. Ауыл тотҡаһы булып торған өлкәндәр ҙә, милләт киләсәге балалар ҙа бар. Биш саҡрым алыҫлыҡта ултырған күрше Йомағужа ауылына 44 бала балалар баҡсаһына, мәктәпкә йөрөп уҡый.

Бәләкәй генә ауылда шыңғырлап торған йорттар һалып инеп, заманса йыһазландырып, затлы машиналарҙа йөрөгән, ысын мәғәнәһендә етеш тормошҡа ынтылған, эшһөйәр халыҡ йәшәй бында. Һәр йортта кәмендә 5-6 баш һыйыр, ат, кәзә-һарыҡтар. Ҡош-ҡорт тураһында өндәшеп тә тормайҙар. Беҙ, журналистар, ғәҙәттә, нисә баш мал тота, күпме ерҙә баҡса үҫтерә, ниндәй уныш ала - шул турала төпсөнөп ҡыҙыҡһынабыҙ, үҙебеҙгә мәғлүмәт туплайбыҙ. Мин дә мал-тыуар иҫәбен белешеп, яңғыҙ донъя көткән өлкән инәйҙәрҙең дә 20-ләп баш кәзә-һарыҡ көтөүен ишетеп, аптырап ҡалдым. Мәҫәлән, Рәмова Ҡанифа инәйҙә алайыҡ. Һыйыр, ҡолонло бейә, тай, 18 баш һарыҡ көтә, йыл да 30-40-лап ҡош-ҡорт аҫрап ала, баҡсаһында иһә кеше үҫтермәгән ағас-ҡыуаҡтар, хатта годжи емешенә тиклем бар. Иң беренселәрҙән булып сәскә, йәшелсә үрсетмәләре ултыртып сығара баҡсаһына. Помидор-ҡыярҙы ла түгеләрҙән булып ауыҙ итә. Өй алды ла, баҡсаһы ла иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем шау сәскә була. Эскән һыуына тиклем таҙа - ябай ҡоҙоҡ һыуы. Алты бала - биш улан, бер ҡыҙ менән утыҙ ике йәшендә генә тол ҡалған инәй балаларын аяҡҡа баҫтырыуға, уҡытыуға бөтә көсөн, күңелен һала. Бөгөн Ҡанифа инәйгә 70 йәш. Бер улы ауылда тора, йорт эштәрендә улар ярҙам итә.

### Эше барҙың - ашы бар

Эйе, ауыл ерендә эшһеҙ ултырмай кеше. Ҡояш менән бергә тороп, ҡара кискә тиклем ҡырмыҫҡа шикелле бил бөгә ауыл халҡы. Тырышлыҡтары, сәмселлектәре менән етеш тормошҡа ынтыла. Нимә генә тиһәң дә, хөкүмәткә күҙ терәп торғандарға ҡарағанда ашы ла мул, донъяһы ла бай.

Балта оҫталары ла күп Сәләхтә. Ябай ағас кисәгенән күҙҙең яуын алырҙай әйберҙәр эшләгән кешеләргә һоҡланмау мөмкин түгел. Ғәҙәттә, уларҙы "алтын ҡуллы" тип йөрөтәләр, һоҡланып йә аптырап "ағас ене ҡағылған" тип тә ебәрәләр. Шундайҙарҙың береһе Шамил Хәмит улы Солтанов. Атанан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, бөтә эшкә Шамил ағай атаһынан да, ауылдағы өлкән ағайҙарҙан да өйрәнгән.

- Ауылда ағас эшен төптән белгән ағайҙар ҙа күп булды: Ғатаулла, Сафуан, Вәкил ағайҙар тирә-яҡта данлыҡлы балта оҫталары ине. Үҙҙәре менән ҡуша алып йөрөнөләр, күрһәтеп эшләттеләр. "Бынан мәғәнә сыға" тип ҡәнәғәт көлгән булырҙар ине үҙҙәре. Иҫ белеп, балта-бысҡы тотоп өйрәнеп, етди эшләгән тәүге эштәремдең береһе - атай солан эшләгәйне, мин тәҙрә рамдары яһаным, - ти Шамил Хәмит улы үсмер сағын иҫкә алып. Ир ҡорона ингәс, өй, мунса буралары күтәрә, мейес сығара. Заказға ла эшләй. Урман эше ҡаҙнаны ла тулыландыра, күңелде лә ҡәнәғәтләндерә. Ағас эшенән тыш, Шамил ағайҙар бал ҡорто ла үрсетә, йылҡы ла тота.

Тимерселәре менән дә данлыҡлы Сәләх. "Атанбаевтарҙың ихатаһында сыңҡ-сыңҡ иткән тауыш ишетһәгеҙ, белегеҙ, Рәфилебеҙ тимер эшенә маһир", ти ауылдаштары. Шешлек бешереү өсөн сыньяһау мангал, тимер мейестәр, мал арбаһы, семәрләп-биҙәп йорт-ҡура кәрәк-ярағы эшләй. Уның ябай тимер кисәгенә лә ижади ҡарауы һоҡландыра.

Булат Кинйәғәле улы Аҡкужин иһә пилорама ултыртып алған. Өс бала атаһы уландарын да эшкә өйрәткән. Улы Морат ағас эшендә төп ярҙамсыһы. Мал аҙығы әҙерләү, ағас эшен еңеләйтеү өсөн трактор ҙа алғандар.

### Малсылыҡ - төп килем

Эйе, ауыл халҡын ерһеҙ, малһыҙ, ҡош-ҡортһоҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Борон-борондан халҡыбыҙ ер эшкәртеп, мал аҫрап көн иткән. Шулай ҙа бер осор халыҡ малын бөтөрҙө. Малын бөтөрҙө лә, аҙаҡ баҙап ҡалды. Кәмеһе эшһеҙ, кәмеһе ашһыҙ йонсой башланы. Ә бына сәләхтәр мал көсө менән донъя көтә, балалар уҡыта. Ысынлап та, малсылыҡ - башҡорт халҡының иң төп көсәптәренең береһе. Мал көсө эштә файҙаланылһа, ите, ағы аш-һыу булараҡ ҡулланыла.

Сәләхтә йылҡысылыҡ менән дә күптән шөғөлләнәләр. Иң күп йылҡы тотоусыларҙың береһе - Айбулат Иҫәнбаев. Бөгөн уның хужалығында 20 баш йылҡы иҫәпләнә. Ошо ауылда тыуып үҫкән уҙаман Юлдыбайҙың данлыҡлы һөнәрселек училищеһын тамамлай, байтаҡ йылдар ауыл хужалығы өлкәһендә эшләй. "Һабыр" совхозы тарҡалғас, бар көсөн шәхси хужалыҡҡа һала, йылҡысылыҡты киңәйтеп, умартасылыҡҡа ла тотона.

- Ауылда йәшәп тә, мал тотмаған, уның ни ҡыҙыны ла, ни йәме. Йылына бер нисә баш йылҡыны һуйып һатһаң, аҡсаһы ла була, - ти алты бала атаһы. Ысынлап та, Сәләх йылҡыһы итен тәмле тип, сал ҡылғанлы Хәйбулла, Әбйәлил яҡтарынан да килеп алалар икән. Таҙа ерҙә, таҙа үлән ашап, таҙа, саф ҡоҙоҡ һыуын ғына эсеп үҫкән малдың ите татлы була шул.

Ҡортсолоҡ Йылайыр яҡтарында бик киң таралған тармаҡ булмаһа ла, бал ҡорто тотоусылар ҙа күп Сәләхтә. Тик былтыр урманға ҡарышлауыҡ төшкәс, бал ҡорттары ҡырылған. Шулай ҙа был тәңгәлдә эште дауам итәләр, тырышлыҡтары арҡаһында донъяларын ла ялтлап тора. Ҡайҙан, нисек, ҡайһылай өлгөрәләр, тип хайран ҡалаһың йәрнекһеҙән уларға: ҡош-ҡорто ла, малы ла бағыулы, баҡсаһы ла бынамын тигән

✓ *Ауылдың киләсәге бармы тигән һорау бынан бер нисә йыл элек барыһын да борсой һымаҡ ине. Ә бөгөн халыҡ "каланы маҡтай ҙа, ауылда йәшәй".*



уңыш бирә, табыны ла һый-нигмәттән һығылып тора, шул арала мохтаждарға ярҙам итергә лә ваҡыт табалар.

## Һыйлы көнөң - һыйырҙа

Эйе, һөттән әҙерләнгән бик күп төрлө ризыҡтар башҡорттарҙың милли аш-һыуына әйләнгән. Әйткәндәй, башҡорт аштары малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килгән дә инде. Бейә һөтөнән ҡымыҙ бешһәләр, һыйыр, кәзә ағын эшкәртеп, ҡаймаҡ, май, ҡорот, эремсек, ҡатыҡ, айран, һөҙмә, ҡыҙыл эремсек алалар. Сәләх ҡатын-ҡыҙҙарының да аш-һыуға сымыры булыуҙары һоҡландырҙы.

Ауыл көтөүендә йөҙгә яҡын һыйыр, биш йөҙҙән артыҡ кәзә-һарыҡ, йөҙләп баш йылҡы йөрөй. Йәй буйына малды сиратлап көтәләр. Аҡсаға ялланып көткәндәр ҙә бар, улар өсөн йәй - килемле осор. Һыйыр быҙаулағас, һөтөн, ҡаймаҡ, май, ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, ҡыҙыл эремсек, һөҙмә һәм башҡаса төрләндереп, баҙарға сығаралар. Ҡороттоң да нисәмә төрө: ул муйыллыһы, ҡарағат, сейә, еләк, бал ҡушылғаны; һуған, һарымһаҡ, әнис, һымаҡ тәмләткестәрҙе, хатта ҡыр йыуаһын турап, ашҡа айырым әҙерләнгәндәре; әсеһе, сөсөһө, кипкән, ыҫланғандары - һанай китһәң, ҡул бармаҡтары етмәҫ. Ҡыҙыл эремсекте лә тәмле итеп, еренә еткереп, Урал аръяғы ысулы менән эшләй улар.

Боронғоса ирегән һары майҙы тоҙлап, ҡышҡылыҡҡа ла йыйып ҡалдыралар. Хатта май бешкәндән һуң айырылып сыҡҡан ҡаймаҡ һыуы - айранға, ҡорот һарҡытҡандан ҡалған эркет һыуына тиклем "ашҡаҙан, үт-бауыр ауыртҡанда", йә "ҡамырға кәрәк булыр" тип пластик шешәләргә ҡойоп туңдырып ҡуя Сәләхтең йүнсел хужабикәләре.

Сәләхтәрҙең өҫтәленән ҡаймаҡ, аҡ май ғына түгел, башҡорттарҙың боронғоса десерты - сейәле-ҡарағатлы май ҙа өҙөлмәй. Ҡыр сейәһен дә, баҡса емешен дә бөртөгөн дә әрәм итмәй йыйып алып, эшкәртәләр. Турғай еләген, урман еләген саҡ ҡына елләтеп киптереп, үткәреп, аҡ майға ҡушып тәмле бер тәғәм дә эшләп туңдыралар. Йоҡа ғына итеп ҡырҡып, сөсикмәккә һылап ашарға ярата балалар.

## Ауылдың киләсәге бармы?

Ауылдың киләсәге бармы тигән һорау бынан бер нисә йыл элек барыһын да борсой һымаҡ ине. Ә бөгөн халыҡ "ҡаланы маҡтай ҙа, ауылда йәшәй". Иген сәсер баҫыуҙар, мал-тыуар кинәнерлек көтөүлектәр, бесәнлектәр йәйрәп ятҡанда, ҡалаң ары торһон, тиеүселәр, ысынлап та, хаҡтыр.

Үҙ ере өсөн бөтә йөрәктән көйөп-янып, уның киләсәге тип тырышҡан кешеләре булғанда ғына уның иртәгәһе ышаныслылыр. Ауылдың абруйлы уҙаманы Ҡорманғәле Таһиров "Һабыр" совхозында эшләгән осорҙа ауылға асфальт һалдырта, "зәңгәр яғыулыҡ"-ҡа тоташтырта. "Был асфальтты мәңгелек тиһәң дә була, ҡалын итеп, еренә еткереп һалдырттым. Элек ауыл эргәһендә ҡыйлыҡ күп ине, идарасы булып эшләгән саҡта эттертеп, таҙалаттырҙым", - ти Ҡорманғәле олатай.

- Ауылыбыҙ бәләкәй булһа ла, халҡы тырыш, татыу. Бер-береһе менән ярышып донъя көтәләр. Әйткәнде лә көтөп тормайҙар, яҙ етеү менән эргә-тирәһен таҙалап, буяр нәмәһен буяп, матурлап, тәртипкә килтереп тә ҡуялар. Эшһеҙ ултырмайҙар. Күп йәштәрҙең ауылда тороп ҡалыуы ҡыуандыра. Ни тиһәң дә, ер кешеһе тота бит ауылдарҙы. Йәштәр ҙә береһенән-береһе уҙҙырып донъя нығыта, мал-тыуар үрсетә, бала-саға уҡыта, әлбиттә, былар барыһы ла дөрөҫ тәрбиә һәм тырышлыҡ емештәре, - ти Ҡәнзәфәр ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Рөстәм Тотманов.

- Ҡайһы ғына өйҙө алма, һәр береһенең ҡапҡа артында оҙон һаплы селек һепертке элеүле тора. Ҡар иреп, асфальт асылғас та, көн һайын иртәнсәк көтөүҙән һуң ауыл халҡы урам һеперә сыға. Берәү ҙә юҡ тимәй, әйҙә, тигәнде лә көтмәйҙәр, көтөү киттеме - бөтәһенең дә ҡулында һепертке, - ти тормош иптәшенең һүҙен йөпләп Таңсулпан апай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нимәгә тотонһалар ҙа, ҡулынан килә сәләхтәрҙең. Кемеһен генә алһаң да, гәзит биттәрен тултырып айырым яҙырлыҡ кешеләр. "Ата-бабаларыбыҙҙың тормошо борон урман, тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнгән булған. Ошо мөхиттә тыуғанбыҙ, ошо мөхиттә үҫкәнбеҙ. Эшебеҙ ҙә, ашыбыҙ ҙа ошонда", - ти үҙ йүндәрен үҙҙәре күреп, тәбиғәт биргән һәләттәреннә тырышлыҡ та ҡушып, алға ынтылған сәләхтәр. Ә ил санкциялары иһә үҙе бер Хоҙай хикмәтелер. Сит ил етештергән ризыҡ ейеп, асылыбыҙҙы боҙғансы, сәләхтәр һымаҡ үҙебеҙ тапҡанды, үҙебеҙ үҫтергәнде файҙаналып, таҙарынайыҡ.**

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ҡыуаныс арта, ә өмөттөң күҙе асыла

Быңдай халәт аңдың яңы кимәлгә күтәрелеүенән барлыҡҡа килә. Мин һеҙгә тәү ҡарашҡа бер-береһенә оҡшамаған, әммә үҙ-ара бәйләнеше булған ваҡиға тураһында һөйләргә теләйем. Уларҙы уҡып, уртаҡлыҡтарын таба алырһығыҙмы икән, үҙегеҙҙе тикшереп ҡарағыҙ.

**Беренсе тарих.** Был хәл Икенсе донъя һуғышы ваҡытында була. "Куин Мэри" лайнеры Атлантика аша Америка һалдаттарын Бөйөк Британияға алып сыға. Һыу аҫты кәмәләре менән осрашыуҙан ҡурҡып, төнөн карапта ут яндырмайҙар. Ярҙамсы ҡатын-ҡыҙ армияһы корпусынан алты ҡатын төнөн каютала йоҡлай алмай борғолана. Ниһайәт, береһе тороп, иллюминатор эргәһенә килә. "Беҙгә быны эшләргә ярамай, - ти ул, - әммә мин иллюминаторҙы асам. Ләкин утты яҡтыртмағыҙ". Ҡалғандар ризалаша. Ҡатын иллюминаторҙың биген асҡас, барыһы ла иркен тын ала һәм таңға тиклем бала кеүек йоҡлайҙар. Иртән тороп иллюминаторҙы ябырға итһәләр, уның тыштан тағы бер ҡат быяла менән көпләнгәнен күрәләр һәм бер ниндәй ҙә саф һауа инмәгәнлеген аңлайҙар.

**Икенсе тарих.** Бер ҡатын үҙенең дүрт йәшлек балаһы менән тротуарҙа йөрөй. Бала әсәһенән алда йүгерә. Ҡапыл ситкә туҡтаған "кадиллак" әкрен генә артҡа китә башлай. Бала тәгәрмәс аҫтында ҡала. Әсә уға ярҙамға ташлана һәм машинаны күтәреп, баланы тәгәрмәс аҫтынан сығара. Ҡатындың ауырлығы 45 килограмм самаһы була, ә "кадиллак"тыҡы - тонна самаһы.

Ошо ике ваҡиғаны нимә берләштерә? Инаныуымы? Дөрөҫ. Беҙҙең инаныуыбыҙ тәртибебеҙгә, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙға йоғонто яһай. Әлегә тиклем барлыҡ инструкцияларҙы ла намыҫлы үтәп барһағыҙ, үҙ-үҙегеҙгә ҡарата инаныуығыҙ тамырынан үҙгәрергә тейеш. Һеҙ аңығыҙҙың тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрелгәнен тойорһоғоҙ. Шуның һөҙөмтәһендә һеҙ хәҙер күберәкте эшләй алаһығыҙ. Яңы инаныу системағыҙҙың бер өлөшө булып Ижадсыға яҡынайыуығыҙ тора.

Был, әгәр һеҙҙең менән ғәҙел булмаһалар, уны дөрөҫләүҙе Илаһҡа тапшырыуығыҙҙы аңлата. Әгәр йырып сығып булмаҫтай һынауҙар алдында ҡалһағыҙ, Илаһ һеҙгә ҡыйыулыҡ һәм көс бирәсәген аңлата, әгәр тупиктан сығыр юл тапмаһағыҙ, Илаһ һеҙгә юл асасағын аңлата. Ошоларҙың барыһы өсөн дә әлегә тиклем беҙҙе өйрәтеүселәргә рәхмәтле булырға кәрәк. Һеҙҙең Юғары аңығыҙ быға лайыҡ булған һәр кемгә рәхмәтен еткерһен. Түбәндәге инструкцияны уҡығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм үтәгеҙ.

**Нисек итеп рәхмәтте еткерергә?**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм тыныс бер картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Бүлмәгә үҙегеҙҙең Юғары минегеҙҙе саҡырығыҙ. Уның бейек, яҡты булып килеп ингәнен уйығыҙҙа ғына күрегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына урынығыҙҙан тороп, уны ҡосаҡлағыҙ: "Мин Һине яратам", - тиегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Хәҙер мин Ижадсыға яҡынайҙым һәм һиңә быға тиклемгә ҡарағанда нығыраҡ мохтаж буласаҡмын", - тиегеҙ.
- Юғары минегеҙ нисектер "эйе" тип яуап бирәсәк - йылмайып, баш ҡағып, һүҙ менән. Һуңынан ул һеҙҙе ҡалдырасаҡ.
- Урынығыҙға ҡайтҡас, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙегеҙҙең алға табан тағы бер аҙым эшләүегеҙгә ҡыуанығыҙ.

Ошоға тиклем яҙылғандарҙың барыһын да уҡып, һеҙ үҙ хыялығыҙ менән аныҡ именлек - аҡса, һөйөү, сәләмәтлек һәм башҡа нәмәләрҙе булдыра алаһығыҙ. Ҡыуанысығыҙҙан бейеһәгеҙ ҙә була.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

## Ихласлыҡ өсөн...

Сәмәрҡәнд ҡалаһында бер ир бик ҡаты ауырып киткән һәм: "Был ауырыуҙан әмәл һәм сара тапһам, һәр йома көн тапҡан кәсебемде атай-әсәйем өсөн саҙаҡа ҡылыр инем", - тип нәҙер әйткән. Был кеше ауырыуҙан сәләмәтләнеп, бер нисә йыл йома һайын тапҡан килемен ата-әсәһе өсөн саҙаҡа итеп биреп торған. Бер йомала кәсебе һәм килеме булмаған һәм саҙаҡа ҡылырға һис бер әйбер тапмағас, хәсрәткә төшөп, бер ғалимдан: "Йома һайын атай-әсәйемә саҙаҡа бирергә нәҙер әйтмеш инем, бөгөн һис нәмә тапманым, ни ҡылайым икән?" -тип һораған. Ғалим: "Ни тапһаң да саҙаҡа итеп бир, ҡауын менән ҡарбуз ҡабыҡтары булһа ла ярай", - тигән. Был кеше тиҙ генә йүгереп барып, сүп һауытынан ҡарбуз-ҡауын ҡабыҡтары йыя һалып, таҙартып, йыуып, уларҙы бер фәҡир кешенең ишәгенә бирә лә: "Быны сауабын вафат булған атайым менән әсәйемә бағышлайым", - ти.

Шунан ир шул кистә үк төшөндә атаһы менән әсәһен күрә. Уларҙың һәр икеһе быны ҡосаҡлап: "Әй, уғылым, беҙгә ни ҡәҙәр хәйер һәм саҙаҡалар биреп шатландырҙың, бөгөн ҡауын менән дә тәғәмләндерҙең. Аллаһы Тәғәлә һинән риза булһын", - тип, улдарынан бик ҡәнәғәт ҡалыуҙарын белдергән, ти. Ихласлығы һәм йома көндө ололау сәбәпле, Аллаһы Тәғәлә ирҙе шулай сауаплы иткән.

## Ғалимдарҙың дәрәжәһе

Ҡиәмәт көнөндә Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәтенән бер ғалимды Аллаһы Тәғәләнең ҡаршыһына килтергәндәр. Аллаһы Тәғәлә Ябраил ғәләйһиссәләмгә: "Әй, Ябраил, был ғалимдың ҡулынан тот та, Мөхәммәт янына илт", - тигән. Ябраил ғәләйһиссәләм был ғалимды Рәсүлебеҙҙең янына килтергән. Ул ваҡытта Рәсүлебеҙ баллы-шәрбәтле Хуз күле ярында була. Хуздан һауыт менән һыу алып, халыҡтарға эсереп йөрөй. Рәсүлебеҙ был ғалимды күргәс, бик шатланған, күлдән усы менән һыу алып, уға ла эсергән, ти. Башҡа әҙәмдәр быны күргәс: "Әй, Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле, беҙгә һыуҙы һауыт менән эсерә инең, ни өсөн был кешегә һыуҙы усың менән эсереп, уны артыҡ хөрмәт иттең?" - тип һораған. Рәсүлебеҙ: "Ғәйре әҙәмдәр кәйеф-сафа ҡороп, һөнәр һәм кәсеп менән шөғөлләнгәндә, был әҙәм донъялыҡта ғилем хасил итеү менән, минең сөннәт-һүҙҙәремде ғәмәл ҡылыу менән шөғөлләнде. Шуның өсөн артыҡ хөрмәт ҡылдым", - тип яуаплаған. Бынан һуң был ғалимдың сиратһыҙ үтәсәге хаҡында әмер бирелеп, ул сираттан үтә башлағанында: "Йә, ғалим дуҫым, миңә ярҙам итсе!" - тигән тауыш ишетә. Ғалим: "Һин кем?" - тип һорағас, ҡысҡырыусы: "Мин һинең дуҫтарыңдың береһе инем", - ти. Ғалим: "Я, Раббым, минең дуҫымдың хәле ауыр икән, ярҙам итәйек уға",- тигәс, бының дуҫын да ғилеме арҡаһында сираттан үткәргәндәр. Ғилем хасил итеүҙең һәм ғалимлыҡтың әхирәттә дәрәжәһе ҙур булған кеүек, ғалимдарҙың дуҫтары ла сираттан сәләмәт ҡотола, имеш. Ғалим булмаһа ла, аҡыл эйәһе ғилем менән дуҫ булырға тейештер.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**



## 28 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор". [12+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**23.30 Х/ф "Восемнадцать лун". [12+]**
**2.15 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.15 Күстәнәс. [12+]**

## 29 МАРТА ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор". [12+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 "В полете стрелы-сияние судьбы!" [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Цыганка Аза". [16+]**
**3.00 Спектакль "Осень". [12+]**

## 30 МАРТА СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор". [12+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Парадиз". [16+]**
**2.45 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 31 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "София". [16+]
2.00 Т/с "Земский доктор". [12+]
3.30, 4.15 Т/с "Семейный детектив". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Двойная фамилия". [16+]**
**3.00 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 1 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Серьезные отношения". [12+]
3.10 Х/ф "Александра". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "Год на орбите". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Поет Римма Амангильдина. [12+]**
**14.00 Д/ф "Мусульманская рапсодия". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Х/ф "Райские кущи". [16+]**
**1.45 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 2 АПРЕЛЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50, 14.50 Т/с "Невеста комдива". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.20 Х/ф "Чужая сестра". [12+]
1.25 Х/ф "Противостояние". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Назер". [12+]**
**9.15 "Деревенька моя". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 4.15 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Народные песни". Сборный концерт. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Хазина. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Джокер". [12+]**
**2.00 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 3 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.20, 3.15 Х/ф "Жила-была Любовь". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50, 14.50 Т/с "Невеста комдива". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Течет река Волга". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Караван времени". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Хазина. [12+]**
**17.30 Бенефис Флюры Кильдияровой. [12+]**
**19.45 Интервью. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 4.15 Х/ф "Курьер из "Рая". [12+]**
**0.45 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**3.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 март "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**30 март "Джут: һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**31 март "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса). 12+
**1 апрель "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**2 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+
**3 апрель "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 март "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 12+
**31 март "Аладдин"** (И. Казакова), мажара. 12.00 6+
**1 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+
**2 апрель "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**3 апрель "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 март "Картинки с выставки"** (М. Мусоргский) концерт. 6+
**30 март "Йөрәгемдә сыңлар бер йыр"** З. Фәйзуллина иҫтәлегенә. 6+
**"Дыхание весны"** классик музыка концерты. 6+
**1-3 апрель "Розовая пантера"** халыҡ-ара джаз фестивале концерттары. 6+
**1 апрель "Юмор в музыке!"** үҙенсәлекле концерт. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**29 март "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**1 апрель "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 12+
**2 апрель "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**30 март "Һырғалаҡ"** (А. Житковский) спектакле менән Салауат театры гастролгә килә. 12+
**31 март Премьера! "Основы PR: Сергей Дягилев"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.), кеше һәм заман тураһында хикәйәт менән
**28 март -** Ҡырмыҫҡалы район мәҙәниәт йортонда,
**29 март -** Стәрлебаш район мәҙәниәт йортонда гастролдәр;
**31 март -** Сибайҙа. 12+
**1 апрель "Их, йәшәүҙәре рәхәт!"** (Б. Ҡаһарманова), комедия. 12+
**2 апрель "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), әкиәт. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

| Март - Апрель (Шәғбан - Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (25) дүшәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:39 | 19:42 | 21:12 |
| 29 (26) шишәмбе | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 17:41 | 19:44 | 21:14 |
| 30 (27) шаршамбы | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 17:42 | 19:46 | 21:16 |
| 31 (28) кесе йома | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:44 | 19:48 | 21:18 |
| 1 (29) йома | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 17:45 | 19:50 | 21:20 |
| 2 (1) шәмбе | 5:18 | 6:48 | 13:30 | 17:46 | 19:52 | 21:22 |
| 3 (2) йәкшәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 17:48 | 19:54 | 21:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *"Әсмә"не сәхнәләштереү беҙҙең театр сәнғәтендә ҙур бер ваҡиға итеп ҡабул ителде. Киләсәктә республикабыҙ режиссерҙары ошо һәм башҡа башҡорт әҙәбиәте авторҙары ижадына йышыраҡ мөрәжәғәт итһендәр ине.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 27 МАРТ - ХАЛЫҠ-АРА ТЕАТР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**10-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Янбаева. Грамматика. Көрт. Шарлама. Үтәбай. Бразилия. Йома. Нафиҡова. Журнал. Риторика. Ишкинин. Ғәниева. Көйә. Имашева. Носилка. Наҙ. Алып. Таҡмаза. Натурализм. Тарантас. Наза. Игәт. Липки. Роман. Нияз. Ағуна. Йүкә. Муллаҡаев. Квант. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Янки. Ғәйнетдинов. Кактус. Зар. Таити. Исмена. Инәй. Груша. Ҡарағужина. Айҙар. Ғимаев. Ярмуллин. Латин. Атлант. Майор. Аптека. Малай. Ҡара. Бажа. Түләк. Аҡтар. Ғаилә. Ваба. Лавр. Аяҡлы. Ижаби. Псәнчин. Етегән. Аласа. Яхина. Ауыҙ. Союз.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠИММӘТЛӘНӘ...



• Рәсәйҙә 16 марттан "АвтоВАЗ" концерны сығарған бөтә машиналар ҡимммәтләнде. Билдәләнеүенсә, LADA Niva Legend - 819 мең һум (+42 мең һум), седан LADA Granta кәмендә 728 мең һум (+43 мең) була. LADA Niva Travel 1,1 миллион һумдан (+63 мең) башлана. LADA Largus 132 мең һумға ҡыйбатланды, хәҙер автосалонда уны 1,2 миллион һумға һатып алырға мөмкин. Бынан тыш, рәсми дилерҙарҙың машиналарҙы планға ярашлы хеҙмәтләндереү хаҡы ла арта - 400 һумдан 12700 һумға тиклем.

• Рәсәйҙә бензин һәм дизель яғыулығының етерлек запасы булдырылған. Был хаҡта ФАС башлығы Максим Шаскольский белдерҙе. 7 мартҡа ҡарата, бензин запасы - 1,9 миллион, дизель яғыулығыныҡы 3,3 миллион тонна тәшкил итә. Рәсәйҙә яғыулыҡҡа биржа хаҡтары февраль һуңында ҡапыл төштө. Һөҙөмтәлә бер аҙна эсендә Аи-92 бензинының хаҡы - 11,6 процентҡа, Аи-95 - 9,6 процентҡа кәмене. Ошо арауыҡта дизель яғыулығы 12 процентҡа арзанайҙы.

• Магазиндарҙа көнкүреш техникаһы һәм электроника ҡиммәтләнә. Рәсәйҙәр интернет-ресурстарҙа күҙәтеүҙәре менән бүлешә. Мәҫәлән, һуңғы ике аҙнала "Ситилинк"та ҡаты дисктың бер төрө - 11 690 һумдан 29 980 һумғаса, DNS магазинында Indesit һауыт-һаба йыуыу машинаһы 38 299 һумдан 119 799 һумғаса артҡан. Өфөлә DNS онлайн-магазинында Honor ноутбуктарының хаҡы 81-130 мең һум булһа, Huawei - 107 -169 мең һум. Apple ноутбуктары хәҙер 144-300 мең һум тора.

• 14 марттан Рәсәйҙә Мәскәүҙән Ҡытайға авиаосоштар ҡабаттан тергеҙелде. ТАСС хәбәр итеүенсә, "Мәскәү - Пекин", "Мәскәү - Гуанчжоу" һәм Мәскәү - Шанхай маршруттары буйынса осоштар аҙнаһына бер тапҡыр башҡарыла. Бынан тыш, аҙнаһына өс тапҡыр "Мәскәү - Денпасар" маршруты буйынса Индонезияға осош планлаштырыла.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



# РИЗАИТДИН ИЖАДЫ - СӘХНӘЛӘ

**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә күренекле мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдиновтың "Әсмә йәки Ғәмәл үә яза" повесы буйынса спектакль ҡуйылды.**

Йәш ҡыҙ Әсмә яҙмышы беҙҙе XIX быуат аҙағы - XX быуат башы осорона илтеп ташлағандай булды. Баҡтиһәң, был тарих бөгөнгө көнгә лә ауаздаш икән. Спектакль авторҙары мелодрама ижад итеп кенә ҡалмаған, улар уны тәрән ғилем, тамырҙар менән бәйләнеште сағылдырған асыҡ китап рәүешендә төҙөгән, Ризаитдин Фәхретдинде халыҡ хәтеренә кире ҡайтарыу өсөн бик күп көс һалған.

Бөгөн башҡорт театрҙары сәхнәһендә нисә башҡорт яҙыусыһының әҫәре ҡуйыла икән? Театрҙар репертуарына күҙ һалһаҡ, был бик һирәк күренеш булыуын аңлайһың. Шуға күрә "Әсмә"не сәхнәләштереү беҙҙең театр сәнғәтендә ҙур бер ваҡиға итеп ҡабул ителде. Улай ғына түгел, киләсәктә республикабыҙ режиссерҙары ошо һәм башҡа башҡорт әҙәбиәте авторҙары ижадына йышыраҡ мөрәжәғәт итһендәр ине, тигәнгә ишара ла яһаны.

Был әҫәрҙе сәхнәләштереү идеяһы ҡуйыусы режиссер Зиннур Сөләймәновтыҡы. Ә уның инсценировкаһын быға тиклем дә уңышлы эштәре менән киң билдәле Шәүрә Шәкүрова яҙған. Шуныһы ҡыҙыҡ, Шәүрә Шәкүрованың атаһы - Рәшит Шәкүр Ризаитдин Фәхретдиновтың ижадын өйрәнгән, тикшеренеүҙәрен ғилми монографияларҙа баҫтырған, үҙенең "Арҙаҡлы башҡорттар" китабында тотош бер бүлекте уға бағышлаған кеше. Әйткәндәй, был китап хәҙер иркен ҡулланыуҙа һирәк ҡалып, күптән яңынан нәшер ителеүҙе көтә. Р. Фәхретдинов бик күп хикәйәләр һәм повестар авторы, әммә уҡыусыларға бик аҙҙары ғына билдәле, ҡалғандары ҡулъяҙма рәүешендә һаҡланған йәки ғәрәп графикаһында баҫылған. Быға тиклем уның әҫәрҙәре сәхнәләштерелмәне.

Ризаитдин Фәхретдиновтың ижады менән таныш һәр кем спектакль авторҙарының хеҙмәтенә юғары баһа бирә, сөнки уның әҫәре төҙөлөшө буйынса ла, тел йәһәтенән дә бик ҡатмарлы.

Ризаитдин Фәхретдин дин белгесе булған, ғәрәп теле морфологияһы буйынса әсбаптар төҙөгән һәм хатта үҙ замандаштары өсөн дә уның әҫәрҙәренең теле аңлауға еңел булмаған. Әммә был әҫәр шул осорҙо, авторҙың борсолоуҙарын һәм өмөттәрен теүәл сағылдырыуы менән ҡиммәтле. Спектаклдә мәғрифәтсенең нәсихәттәре һәм уй-фекерҙәре лә яңғырай. Бында төп фекер шуға ҡайтып ҡала: милләтте үҫтереү өсөн тормоштоң бөтә ҡаршылыҡтарын еңгән Әсмә кеүек тәрбиәле, белемле, ҡыйыу ҡатын-ҡыҙҙар кәрәк.

Шулай итеп, театр Ризаитдин Фәхретдиндең ижадын халыҡҡа ҡайтарыуға бик ҙур өлөш индерҙе. "Әсмә" спектаклендә театрҙың алдынғы сәхнә оҫталары һәм йәштәр ҡатнаша. Төп ролдә З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаусы Айым Сөләймәнова һәм М.С.Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһының сығарылыш студенты Сабина Кирәева уйнай.

**Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА.**

✓ Бөгөнгө уҡыусылар беҙ уҡыған ваҡыттағы балаларҙан ныҡ айырыла: беҙҙең шаяртыуҙар бер ҡатлы булһа, бөгөнгө шаяртыуҙар көнүҙәк темаларға, сәйәсәткә һуҡтыра. Юҡ, артыңа ултыртҡансы түгел, ә семетеп-семетеп алып ҡына.



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАЛАЛАР ТЕЛЕНДӘ...

## тормош хәҡиҡәте яңғырай

**Юмор - тормоштағы барлыҡ өлкәләрҙә лә "уңыш" тигән ишекте асыусы асҡыс. Башҡалар һинең барлыҡ ҡаҙаныштарыңды белмәгәндә лә, бер тапҡыр аралашҡанда әсир иткән ихлас йылмайыуың һәм уңышлы шаяртыуыңды оҙаҡ ваҡыт хәтерҙәрендә һаҡларға мөмкин. Хатта иң ауыр ваҡыттарҙа ла көлөү-йылмайыу күңелде тынысландыра һәм урынына ултыртырға ярҙам итә.**



"Кендектәр"



Алсынбай Ғарифуллин.



Ангелина Халиҡова.

22 мартта Өфөнөң Ҡала мәҙәни-ял үҙәгендә инде хәҙер йолаға әүерелгән "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар ҡала конкурсының быйылғы еңеүселәрен тәбрикләү тантанаһында беҙ ҙә рәхәтләнеп көлөп, ял итеп ҡайттыҡ. Инде 20-се тапҡыр ойошторолған сара "Ғүмер ҡыҫҡа - үткәрмә бушҡа" девизы менән үтте. Һәр районда үткән һайлап алыу турында барлығы 32 команда ҡатнашһа, ярымфиналға 14 команда сыҡты һәм уларҙың 9-ы финалда кубок өсөн көс һынашты, ә 5 команда үҙҙәренең иң яҡшы номерҙарын күрһәтте.

Фойеға килеп инеү менән был сараның ғәҙәти һәм ябай түгеллеге күҙгә ташлана: ул балаларҙың шат тауышына күмелгән, һәр ерҙән самимилыҡ һәм ихласлыҡ бөркөлә. Ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм хатта олпат булырға тырышҡан белем биреү усаҡтары директорҙары ла ошо мөхит уртаһында ҡайнай, сөнки тап ошо сара бер аҙға ғына булһа ла тормош ығы-зығыһынан арындырып, тирә-яғыбыҙға йылмайыу аша ҡарарға мәжбүр итә. Быны сәхнәгә сыҡҡан командалар тағы бер тапҡыр раҫланы: хәҡиҡәтте балалар ауыҙы аша ишеттек. Әммә ололарса ҡәтғи һәм ҡаты һүҙҙәр аша түгел, ә балаларса бер ҡатлылыҡ һәм уларҙың юморы күҙлегенән ҡараныҡ. Эйе, бөгөнгө уҡыусылар беҙ уҡыған ваҡыттағы балаларҙан ныҡ айырыла: беҙҙең шаяртыуҙар бер ҡатлы булһа, бөгөнгө шаяртыуҙар көнүҙәк темаларға, сәйәсәткә һуҡтыра. Юҡ, шаңҡытҡансы, артыңа ултыртҡансы түгел, ә семетеп-семетеп алып ҡына (балаларҙың нисек семетеп алғанын аңлатырға түгел инде - ҡулдары йомшаҡ булһа ла, ныҡ ауырттыра улар).

Командалар "... ауыҙы Макдоналдс кеүек... ябылып бөтә алмай" тип, Рәсәйҙә ябылған сит ил предприятиеларына төрттөрһә, "2021 йыл ҡатын-ҡыҙ өсөн үтә ауыр булды..." тип, Элвин Грей, Зәйнетдин, Алтынай, Ғайсарҙың өйләнеүенә бошондо, 1-се полилингваль гимназия шаяндары командалаш "айыу"ҙың "бар йырсыларҙың ҡолағына баҫыуына" төрттөрһә, көндәлеккә әсәйҙәренән күҙ йомоп ҡул ҡуйҙырғандан һуң, "башҡорт теленең иң бай тел" булыуына инанды, коронавирусҡа ҡаршы вакцинаның беренсе компонентын яһатҡандан һуң Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын уҡырға тотонғас, икенсе компонент нисек эшләрен күҙ алдына килтерә алмай баш ватты. Шулай уҡ инде балаларҙың ғына түгел, ололарҙың теңкәһенә тейгән ҡар темаһына ла "тоҙло-боросло" шаяртыуҙар булды, сәйәсмәндәр ҙә буш ҡалманы, хатта Рамзан Ҡадировтың телмәрендәге паразит һүҙҙе элеп алып, башҡорт телен бысратмаҫҡа саҡырғандай булдылар. Гастарбайтер-"инвесторҙар", мигранттар, санкциялар темаһы ла йәш шаяндарҙың иғтибарынан ситтә ҡалманы. "Эх, зал тултырып етәкселәрҙе ултыртырға ине", - тигән хыял ояланы күңелдә - ни тиһәң дә, балалар телендә хәҡиҡәт һүҙе яңғыраны был сарала.

Барлыҡ командаларҙың сығышын ҡарағандан һуң, жюри түбәндәге еңеүселәрҙе билдәләне: рус мәктәптәре араһында 3-сө урынға М. Горький исемендәге 3-сө гимназияның "Мария билмәндәре" (Мариин билмәндәре), 45-се гимназияның "15 минуттан" командалары сыҡты. Икенсе урында - "Искәндәр бабай" (113-сө мәктәп), "Хыялый-зыялыйҙар" (159-сы мәктәп). 1-се урын "Затонград" (4-се мәктәп) командаһына бирелде.

Башҡорт лицейҙары һәм гимназиялары араһында 3-сө урынға "Һупайлы дәрүиштәре" (М. Исҡужин исемендәге 136-сы лицей) менән "Ша-шу-ша" (122-се гимназия), "Сәтәкәй" (48-се лицей) командаһы лайыҡ булды. Икенсе урында - "XX централ" (Фатима Мостафина исемендәге 20-се гимназия), "Тағы ла 2" (Ғ. Ибраһимов исемендәге 2-се лицей) командалары. 1-се урын - "Ҡырғаяҡтар" (1-се күп профилле полилингваль гимназия) командаһы. Гран-приға быйыл баш ҡаланың Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы лайыҡ булды. "Милли колорит" номинацияһында З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһының "Ығы-зығы" командаһы билдәләнде, "Иң берҙәм команда" тип Р. Бикбаев исемендәге 102-се гимназияның "Етегән+1" командаһы танылды. "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" Ғ. Ибраһимов исемендәге 2-се лицей уҡыусыһы Ангелина Халиҡоваға бирелһә, "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһы еңеүсеһе 122-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Алсынбай Ғарифуллин булды. Еңеүселәргә һәм призерҙарға Өфө ҡала хакимиәтенең дипломдары, сертификаттар һәм конкурс партнерҙарының иҫтәлекле бүләктәре тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шаяниум"да ҡатнашыусылар өсөн ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт тамам... Алда уларҙы белем тауы үрҙәре көтә. "Ығы-зығы" командаһы әйтмешләй, башҡортса шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһендә ҡатнашыусылар ғүмерҙәрен заяға үткәрмәй - улар башҡорт телен ауырһынмай, йылмайып-көлөп кенә өйрәнә һәм көндәлек тормошта ғына ҡулланып ҡалмай, ә сәхнә түренә алып сыға! Башҡорт асыҡ КВН лигаһы рәйесе Урал Кәримов әйтеүенсә, "Шаяниум" - ул бөгөн баш ҡаланың визит карточкаһы тип әйтергә була. Ул шаяндарҙы һәм отҡорҙарҙы ғына табып ҡалмай, уның төп маҡсаты - лидерҙар тәрбиәләү.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТЫНА ҠАРАМА...

## затына ҡара

Атаһы юҡ ул - ҡуштан, инәһе юҡ ул - инмәй тыштан.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙың холҡо юҡ, тип әйтмәгеҙ, уның көн һайын бер холҡ.

**(Генрих Гейне).**

Ирҙәр ҡатын-ҡыҙ һымаҡ уҡ: улар ҙа аҡыл тауышына түгел, йөрәк тауышына эйәрә.

**(Филипп Честерфилд).**

Ир кешене нығлап белер өсөн уның менән айырылышырға кәрәк.

**(Сари Габор).**

Йәштәр, әлбиттә, ысын матурлыҡты танып белә алмай, улар бит теләктәр менән эш итә.

**(Вовенарг).**

Ҡартлыҡ мөхәббәттән һаҡламай, әммә мөхәббәт ҡартлыҡтан һаҡлай.

**(Коко Шанель).**

Мөхәббәтте бер ҡараш менән үлтереп була, бер ҡараш менән терелтеп тә була.

**(Уильям Шекспир).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер изге йән менән аҙғын йән күрше генә йәшәйҙәр. Улар икеһе лә бер көндә теге донъяға күсә. Аҙғындың йәне - ожмахҡа, ә изгенең йәне тамуҡҡа эләгә. Йәндәрҙе оҙатып барыусы фәрештәләр бик аптырай был хәлгә. Улар бер туҡтауһыҙ бер-береһенән: "Нимә булды был? Ниндәйҙер хата бар бында. Ниңә беҙ изге кешенең йәнен тамуҡҡа алып китеп барабыҙ?"- тип һорайҙар икән. Фәрештәләрҙең иң аҡыллыһы һәм олорағы былай ти: "Был кеше ысынлап та изге ине, әммә ул баяғы аҙғын күршеһенә көнләшеп йәшәне. Ул гел генә был аҙғындың өйөндәге кисәләр һәм шау-шыуҙар тураһында уйланы. Унан ишетелгән музыка уны тулҡынландырҙы. Ул хатта намаҙ уҡығанда ла күршеһенең өйөнән ишетелгән музыканы тыңланы..." "Ә теге аҙғын йән ни өсөн ожмахҡа эләкте һуң?" тип һорай фәрештәләр. Өлкән фәрештә шулай ти: "Үҙенең гонаһтары һаҙлығында аунағанда ла был аҙғын кеше әлеге изге йән, уның доға уҡыған мәлдәге ләззәтле минуттары хаҡында уйланы. Мәсеткә йүнәлгәндә уны ҡараштары менән оҙатып ҡалды. Мин мәсеткә инергә лә лайыҡлы түгелмен, тип ғазапланды. Аҙан тауыштары яңғырағанда тын ҡалып ултырҙы, изге йәнле күршеһенең Аллаға баш эйеп, доға ҡылғанын һоҡланып күҙәтте. Ул һәр ваҡыт ошо изге кешенең урынында булыу тураһында хыялланды, ә изге кешене был аҙғындың тормошо ылыҡтырҙы. Тимәк, уны тамуҡҡа илтеүегеҙ дөрөҫ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3387
Заказ - 368

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.